ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискэ Өфө

26-2 сентябрь - октябрь (нарысай - ҡарасай) 2025

№38 (1182)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Республика спорты юғары кимәлдә**



2

**Алтмыш йәшлек бабай буламы,**

йәки Һәр нәмә сағыштырыуҙа баҙығыраҡ күренә



6

**Янғыҙ ҡарға яҙ килтерәме,**

йәғни Йәштәр ауылдарға кире ҡайта ҡалһа...



8-9

**Үҙем булып ҡалам...**



11

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Арзанға яҙылып ҡалығыҙ!* Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, *1 октябрҙән 11-нә тиклемге* ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы *"Киске Өфө"*гә 2026 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән *905 һум 04 тингә* яҙыла алаһығыҙ. Ошо ун көнлөктә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Әйҙәгеҙ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

БАШЛЫҠ ӘЙТТЕ!

# ЮЛДАР ХӘҮЕФҺЕҘ БУЛҺЫН



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың социаль селтәрҙәрҙәге сәхифәһенән:**

"Беҙ Башҡортостан халҡы, бигерәк тә көньяҡ райондарҙа йәшәүселәр көткән күләмле яңы төҙөлөшкә тотондоҡ. Стәрлетамаҡтан Ашҡаҙар ауылына тиклемге участкала Р-240 Өфө - Ырымбур федераль трассаһында капиталь ремонт башланды.

Хәҙер унда ике һыҙатлы юл. Был участкала хәрәкәт бик тығыҙ һәм хәүефле. Авариялар йыш булып тора. Уны дүрт һыҙатҡа тиклем киңәйтергә һәм, Өфөнән Стәрлетамаҡҡа тиклемге трассалағы кеүек, йәйәүлеләр өсөн үткәүелдәр эшләргә, һыҙаттарҙы айырыу кәртәләре, яҡтыртыу ҡорамалдары ҡуйырға һәм башҡа эштәр башҡарырға кәрәк.

Хәҙер подрядсы ойошма ер япмаһын күтәрә, коммуникацияларҙы үҙгәртеп ҡора. Эштәрҙе тулыһынса киләһе йыл аҙағына тиклем тамамларға планлаштырабыҙ. Федераль коллегаларыбыҙға - "Росавтодор" һәм "Урал буйы" юл идаралығына - күрһәткән ярҙамдары өсөн рәхмәт белдерәм".

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# КҮП БАЛАЛЫЛАР КӨНӨ

**Республикала Күп балалы ғаилә көнөн булдырырға тәҡдим итәләр.**

Республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары киләһе ултырышта мөһим дата булдырыу тураһында закон проектын ҡарай. Парламент спикеры Константин Толкачев һүҙҙәренсә, йыл аҙағында республикала ишле ғаиләләрҙе, "Йыл ғаиләһе" Бөтә Рәсәй проекты һәм башҡа ғаилә конкурстары еңеүселәрен, призерҙарын бүләкләүгә бәйле 21 декабрь байрам көнө итеп һайланған. "Күп балалы ғаилә көнөн булдырыу ғаилә институтын нығытыуға, традицион ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлауға һәм күп балалылыҡты пропагандалауға булышлыҡ итәсәк", - ти Константин Толкачев.

Әйткәндәй, Башҡортостанда ишле ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән колледж студенттарына уҡыу өсөн түләнгән аҡсаның бер өлөшө кире ҡайтарыла.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Алтакталарҙағы сит тел атамалары ҡала йөҙөн биҙәйме?




***Константин ТОЛКАЧЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе:*** Сит ил һүҙҙәре менән сыбарланған ҡалаларҙа алтаҡталарҙы тәртипкә килтереү буйынса Рәсәй кимәлендә күптән һүҙ алып барыла. Илебеҙ ҡалаларының тышҡы йөҙө Рәсәйҙең мәҙәни-тарихи мираҫын һәм тел суверенитетын сағылдырырға тейеш. Ошо йүнәлештә системаһыҙ рәүештә сит телдәрҙе файҙаланыу ҡала мөхитенең милли үҙенсәлектәрен юғалтыуға килтереүе мөмкин. Sale, Coffee, йәки Life Garden торлаҡ комплексы кеүек атамалар һәм алтаҡталар ҡулланыусылар башын бутай, айырыуса был өлкән быуын вәкилдәре өсөн уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра.

Шул уҡ ваҡытта заманса иҡтисади ысынбарлыҡ менән мәҙәни кодты һаҡлау араһында тейешле тигеҙлек булдырыу ҙа мөһим бурыс булып тора. Дәүләт Йыйылышының башланғысы иң тәү сиратта хеҙмәт күрһәтеүселәр менән файҙаланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау һәм тел ҡулланылышын һаҡлау мәсьәләһенә йүнәлтелә. Был йәһәттән, әлбиттә, фирмаларҙың сит телдәге атамалары һәм рәсми теркәлештә булған тауар билдәләренә рөхсәт бар, ләкин ойошмаларҙың эшмәкәрлеге һәм улар тарафынан күрһәтелгән хеҙмәттәр тураһында аңлатмалар рус телендә булырға тейеш. Был хаҡтағы закон проекты Дәүләт Йыйылышының көҙгө сессияһында ҡараласаҡ.

12+

ҠЫҪҠАСА

## ЭШ УРЫНЫНДА ИМГӘНҺӘҢ...

**Республикала производствола имгәнгән өсөн түләүҙәр хаҡында һөйләнеләр.** Бындай осраҡта һәм һөнәри сир булғанда ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ буйынса пособие хеҙмәткәрҙең уртаса айлыҡ эш хаҡының 100 процент күләмендә түләнә. Рәсәйҙең Социаль фонды эшләп йөрөгән граждандар өсөн ярҙам саралары тураһында файҙалы мәғлүмәт менән бүлешә. Был юлы ведомство белгестәре эш урынында имгәнеү алған хеҙмәткәргә түләүҙәр хаҡында һөйләне. Иң тәүҙә табипҡа хәбәр итергә кәрәк. Ул эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙын асырға тейеш. Социаль фонд бындай эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы өсөн уртаса эш хаҡы күләмендә түләй, стажға ҡарамай. 2025 йылда тулы календарь ай өсөн түләүҙең күләме күп тигәндә 476 474 һум тәшкил итә. Артабан хеҙмәт инциденты факты буйынса мотлаҡ тикшереү үткәрелә. Эш биреүсе махсус комиссия булдырырға һәм уның эшен тәьмин итергә бурыслы. Тикшереү һөҙөмтәһе буйынса производствола бәхетһеҙ осраҡ тураһында акт төҙөлә.

✓ **Башҡортостандың Дәүләт хеҙмәттәре порталында балалы ҡатын-ҡыҙҙар өсөн яңы бүлектәр асылды, тип хәбәр итә республиканың Дәүләт идаралығының һанлы үҫеше министрлығы матбуғат хеҙмәте.** Бүлектәр өсәү: һаулыҡ һаҡлау, социаль яҡлау, мәғариф. Әсәләр өсөн бүлек порталдың төп битенә ҡуйылған. Бында балалар тарбиәләгән ғаиләләргә ярҙам саралары, кәрәкле документтар, мөрәжәғәтте ҡарау ваҡыты тураһында мәғлүмәт бирелгән, йыш борсоған һорауҙарға яуап табып та була. "Беҙ дәүләт ярҙамы һәр кемгә барып етһен, уны халыҡ белһен өсөн тырышабыҙ, шуға ла республика Дәүләт хеҙмәттәре порталында уңайлы бүлектәр булдырабыҙ. Хәҙер балалы ҡатын-ҡыҙҙар бөтә ярҙам саралары хаҡында мәғлүмәтте тиҙерәк таба ала, ваҡыттарын әрәм итмәй. Мәғлүмәт 19 төрлө осраҡҡа бүлеп урынлаштырылған", - тип асыҡлыҡ индерә Башҡортостан дәүләт идаралығының һанлы үҫеш министры Геннадий Разумикин.

✓ **Республикала табиптарға остазлыҡ өсөн өҫтәмә аҡса түләнә. Улар оҙайлы отпуск алырға ла хоҡуҡлы.** Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы һәм һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәре профсоюзы педагогик эшкә ярҙам күрһәтеүгә ҡағылышлы тармаҡ килешеүенә төҙәтмәләр ҡабул итте. Документҡа ярашлы, республикала тәүге тапҡыр остазлыҡ өсөн окладтан кәмендә 15 процент күләмендә өҫтәмә түләү индерелә. Остазлыҡ, ғилми эш, хеҙмәткәрҙе уҡытыу менән шөғөлләнгән, студенттарҙың практикаһына етәкселек иткән йәки башҡа педагогик йөкләмә алған табиптар һәм шәфҡәт туташтары ла 56 көнгә тиклем отпуск алырға хоҡуҡлы. Баш табиптарға нормаһыҙ эш көнө өсөн өҫтәмә отпуск бирелә башлай. Төҙәтмәләр федераль ҡануниәттең үҙгәреүе һәм табиптарҙың эш хаҡы структураһы, шул иҫәптән окладты 50 процентҡа тиклем арттырыу менән бәйле, тип хәбәр иттеләр республиканың табиптар профсоюзынан.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

## РЕСПУБЛИКА СПОРТЫ ЮҒАРЫ КИМӘЛДӘ

**Башҡортостан Башлығы Мәскәүҙә "Физик культураны һәм спортты үҫтереү" комплекслы дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу буйынса хөкүмәт комиссияһы ултырышында ҡатнашты.**



"Кәңәшмәне РФ Хөкүмәте вице-премьеры Дмитрий Чернышенко үткәрҙе, мин халыҡты спорт менән шөғөлләнеүгә йәлеп итеү йәһәтенән республика тәжрибәһе хаҡында һөйләнем. Спорт менән шөғөлләнеү уңайлыраҡ булһын өсөн уның инфраструктураһын үҫтерәбеҙ. Һәр ҡалала һәм районда ФОК-тар, һауыҡтырыу комплекстары, бассейндар, спорт майҙансыҡтары булырға тейеш. Бөгөн спорт объекттары төҙөлөшө темптары һәм уларҙың һаны буйынса республикабыҙ илдә алдынғылар рәтендә. Шуныһы мөһим, был йәһәттән беҙгә илебеҙ Хөкүмәте һәм Спорт министрлығы ҙур ярҙам күрһәтә. Быны өсөн уларға рәхмәт белдерәм. Алда ҙур пландар һәм эштәр күп - туҡтамайбыҙ, юлды артабан дауам итәбеҙ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәрҙәге сәхифәһендә.

Башҡортостанда физкультура һәм спорт һөйөүселәр һаны 2019 йылдан алып 45 процентан 62 процентҡа тиклем артҡан.

## ҮҘӘК БАНК РӘЙЕСЕ - ӨФӨЛӘ

**Эльвира Нәбиуллина Өфөгә Рәсәй һәм Белоруссия Үҙәк банкыларының банк-ара валюта советы ултырышына килгәйне. РФ Үҙәк банкы сайтында хәбәр ителеүенсә, Рәсәй Банкы рәйесе Эльвира Нәбиуллина һәм Беларусь Милли Банкы идараһы рәйесе Роман Головченко Өфөлә берлектәге күҙәтеү коллегияһы тураһында положениеға ҡул ҡуйҙы һәм ике илдең иҡтисади үҫеш һәм аҡса-кредит сәйәсәте прогноздарын тикшерҙе.**

Республика башлығы Радий Хәбиров төбәк ҡунаҡтары менән осрашыуҙа Башҡортостанды мөһим һөйләшеүҙәр өсөн майҙансыҡ итеп һайлағаны өсөн рәхмәт белдерҙе. "Был беҙҙең өсөн, ысынлап та, ҙур хөрмәт. Яҡташыбыҙ менән ғорурланабыҙ. Ауыр шарттарҙа ул илебеҙҙең иҡтисади именлегенә бәйле булған ҡатмарлы ҡарарҙар ҡабул итә. Бөтә республика исеменән уға уңыштар, был мөһим эштә сыҙамлыҡ теләйем", - тине ул. Осрашыуҙа социаль-иҡтисади үҫеш мәсьәләләре, ағымдағы аҡса-кредит сәйәсәтенең төбәк иҡтисадына йоғонтоһо, Башҡортостандың финанс секторы торошо, шулай уҡ Рәсәй-Белоруссия хеҙмәттәшлеге һөҙөмтәләре һәм перспективалары тикшерелде.

Эльвира Нәбиуллина Башҡортостан етәкселегенең баш ҡала Өфөнөң хәҙерге йөҙөн формалаштырыуға ҙур өлөш индереүен билдәләне. "Мин Өфөнө бик яратам. Уның нисек яҡшырыуын күреү мине ҡыуандыра", - тине яҡташыбыҙ.

## ИҢ ҘУР МӘКТӘП БУЛАСАҠ

**Үткән шәмбелә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфө ҡалаһының "Кузнецов затоны" биҫтәһендә һәм Өфө районының Шмидт ауылында мәктәптәр төҙөү барышы менән танышты.**



"Кузнецов затоны"ндағы 2200 урынлыҡ Волга буйы федераль округындағы иң ҙур мәктәп төҙөлөшө тамамланыу өҫтөндә. Дөйөм майҙаны 34 мең квадрат метрҙан ашыу яңы белем биреү учреждениеһының дүрт спорт һәм тамаша залы, махсуслаштырылған дизайн, фото һәм кино төшөрөү, театр студияһы, нәшриәт үҙәге, робот техникаһы кабинеттары бар. Мәктәп биләмәһендә мини-футбол, баскетбол, теннис өсөн спорт майҙансыҡтары, шулай уҡ йүгереү юлдары һәм тренажерҙар урынлаштырыла. "Уҡыусылар яңы мәктәптә өсөнсө сиректән, яңы йыл каникулдарынан һуң, уҡый башлар, тип планлаштырабыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Шмидт ауылында 160 тәрбиәләнеүсегә иҫәпләнгән балалар баҡсаһы менән берләштерелгән 640 урынлыҡ заманса белем биреү үҙәге төҙөлөшө дауам итә. Проект буйынса мәктәп һәм мәктәпкәсә учреждение айырым биналарҙа урынлашҡан. Бында технологик һәм инженерлыҡ белемгә айырым иғтибар биреләсәк. Учреждение Өфөлә тыуып үҫкән, хәрби бурысын үтәгәндә һәләк булған өлкән лейтенант Илдар Суфияровтың исемен йөрөтәсәк. "Шмидт мәктәбен күптән көтәләр. Беҙ уны, республикалағы башҡа ҡайһы бер белем биреү учреждениелары кеүек үк, концессия килешеүе буйынса төҙөйбөҙ. Һәм, әлбиттә, уның Рәсәй Геройы исемен йөрөтөүе бик мөһим", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Башҡортостан Башлығы.

## ГРАНТТАР КОНКУРСЫ

**Башҡортостандың граждандар йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фонды коммерцияға ҡарамаған ойошмалар өсөн Республика Башлығы гранттары конкурсы иғлан итте.**

Гранттар биреү тәртибен раҫлау тураһындағы ҡарарға БР премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған. Документта әйтелеүенсә, гранттар граждандар йәмғиәте институттарын үҫтереү һәм социаль әһәмиәтле проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн тәғәйенләнгән. Атап әйткәндә, улар үҙ эсенә социаль хеҙмәтләндереү, граждандарҙың айырым категорияларын социаль яҡлау; ғаиләгә, әсәлеккә, аталыҡҡа һәм балалыҡҡа ярҙам итеү; мәҙәниәт һәм сәнғәт; тарихи хәтерҙе һаҡлау; граждандар йәмғиәте институттарын үҫтереү; һаулыҡ һаҡлау, сәләмәт йәшәү рәүешен, физик культураны һәм спортты пропагандалау; фән, мәғариф һәм мәғрифәтселек; тирә-яҡ мөхитте һаҡлау, уңайлы йәшәү мөхитен булдырыу, хайуандарҙы һаҡлау; милләт-ара һәм дин-ара татыулыҡты нығытыу кеүек ижтимағи әһәмиәтле йүнәлештәрҙе алыуы ихтимал. Бер проектҡа гранттың максималь күләме 2,5 миллион һумдан артмаҫҡа тейеш.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Өфөлә Ағиҙел йылғаһы аша Аркалы күпер 10 октябрҙә асыла. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙған шәмбе көнө башҡарылған эштәрҙе ҡараған саҡта "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына хәбәр итте. Әлеге ваҡытта аралыҡтар ҡоролмаһына гидроизоляция эшләнә. Артабан күпергә асфальт һалыу, ҡоймалар, фонарь бағаналары ҡуйыу бурысы тора. 670 метр оҙонлоҡтағы күпер 1956 йылдың 3 ноябрендә асыла, уны 4 йыл 10 ай эсендә төҙөйҙәр. 2022 йылдың мартында масштаблы реконструкция башланды һәм ул бөгөн тамамланыу өҫтөндә.

✓ Инвалидтарҙы һәм Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы реабилитациялау өсөн медицина үҙәге, ҡунаҡхана һәм спорт майҙансыҡтары булған күп функциялы биналар комплексы төҙөләсәк. Уны инвесторҙар финанслай. Хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә Төбәктәрҙең социаль инновациялары форумы сиктәрендә БР ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова һәм "Көслө кешеләр биләмәһе" автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошма директоры Евгений Куйбышев ҡул ҡуйған. Үҙәкте төҙөү сығымдары - 1,2 миллиард һум. Иҫәпләүҙәр күрһәтеүенсә, стационар һәм ярымстационар шарттарҙа реабилитацияны йыл һайын 5 меңдән ашыу кеше үтә аласаҡ.

✓ 3 октябрҙә "Торатау" конгресс-холында уҡыусылар, студенттар, йәш белгестәр өсөн "ТрудКрут" карьера форумы була. Программала һөнәри йүнәлеш биреү уйындары, федераль һәм төбәк спикерҙары менән лекторий, квиз һәм эш биреүселәр күргәҙмәһе планлаштырылған. Ҡатнашыусыларҙы резюме төҙөргә өйрәтәләр, улар шулай уҡ HR-белгестәрҙән консультация ала һәм хатта ҙур компанияларҙа стажировка үтеү өсөн әңгәмәләр үтә ала. Сара 11:00 сәғәттә Зәки Вәлиди урамы, 2-се йорт адресы буйынса башлана. Ойошторoусылар булып республиканың Хеҙмәт һәм Йәштәр сәйәсәте министрлыҡтары ярҙамында РСО-ның Башҡортостан төбәк бүлексәһе сығыш яһай.

✓ 15 сентябрҙән Ҡытай халыҡ республикаһына барыу өсөн виза талап ителмәй. Ике ил сиге аша сит ил паспорты менән үтергә мөмкин. Ҡытайҙа, илгә ингәндән алып, 30 көн булырға мөмкин. Рәсәйлеләр, сикләнгән зоналарҙан, атап әйткәндә, Тибет автономиялы районынан тыш, илдең бөтә территорияһында йөрөргә рөхсәт ителә. Визаһыҙ режим Ҡытайға туристик һәм эшлекле эш сәфәре менән, шулай уҡ төрлө гуманитар бәйләнештәрҙә ҡатнашыу, туғандарға барыу йәки транзит маҡсатын тотҡан граждандарға ҡағыла. Эш, уҡыу, журналист эшмәкәрлеге өсөн килгән граждандарға, шулай уҡ водителдәргә, экспедиторҙарға һәм тәржемәселәргә ул ҡағылмай.

✔ *Рус теле менән бер рәттән, Башҡортостандың дәүләт теле булған башҡорт телендә лә атамалар урын алырға хаҡлы, тип уйлайым: был баш ҡалабыҙҙың милли йөҙөн сағылдырыуға булышлыҡ ҡына итәсәк бит.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Алтаҡталарҙағы сит тел атамалары ҡала йөҙөн биҙәйме?

***Зәлиә ӘУХӘҘИЕВА, Өфө ҡалаһы, реклама агентлығы хеҙмәткәре:*** Фирма, компаниялар атамаларында һәм уларҙың алтаҡталарында сит ил һүҙҙәрен сикләү кәрәклеге тураһында һүҙ әлегә-әле күтәрелеп тора. Был мәсьәләгә күптән түгел РФ Президенты Владимир Путин да иғтибарын йүнәлтте һәм рус теле менән Рәсәй халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм яҡлау, туған телдәрҙең таҙалығы хаҡында һөйләне. Юғиһә, ысынлап та, илебеҙҙә һәм уның төбәктәрендә сит ил атамалары, терминдары менән мауығыуҙар, ғөмүмән, сит-ят рәүештәр алдында һуҡырҙарса табыныу күренештәре модаға инеп китте. Бөгөн айырыуса йәштәр һәм үсмерҙәр араһында сит телдәге һүҙҙәр яҙылған футболка һәм майкалар кейеп, сумкалар артмаҡлап, йәнәһе лә, "текә" булып күренергә тырышыусылар күбәйҙе. Ә ул яҙыуҙарҙың тәржемәһе йә эстәлеге берәүҙе лә ҡыҙыҡһындырмай, фәҡәт сит телдәге яҙыуға ла күнелдәре була, күрәһең.

Хәйер, был йәһәттән кемдәлер ғәйепләү ҙә, бәлки, урынһыҙҙыр, сөнки һатыуҙа хәҙер рус һәм башҡорт телдәрендә яҙылған майкаларҙы табыуы ла ауыр, уларҙы махсус заказ биреп кенә эшләтеп алырға була. Ә бына ҡала урамдарындағы алтаҡталарға бәйле, таныштарымдың береһе, уларҙың ниндәй телдә яҙылыуы "ваҡ мәсьәлә", тип, яныраҡ минең менән бәхәс ҡуптарҙы. Ҡыҙғанысҡа күрә, ул, үҙе әйтмешләй, ошо "ваҡлыҡ"тың туранан-тура туған тел һәм тыуған илгә һөйөү һәм ихтирам билдәһе икәнен аңламай ҙа ине, буғай. Бик йәл миңә ундай кешеләр. Улар өсөн үсмерҙәрҙең пейджерҙарынан, иномаркаларҙан яңғыраған сит ил музыкаһы ней ҙә, кинотеатрҙарҙа күрһәтелгән сит ил боевиктары ней.

Өҫтәүенә, ҡала урамдарында беҙҙә инглиз телендәге алтаҡталар уратып алған. Билдәле режиссер Никита Михалков әйтмешләй, ысынлап та, ситтән килгән берәй кеше ҡапылғара үҙенең ҡайһы илдә йөрөүен аңламайыраҡ тороуы ла бик ихтимал.

Дөрөҫ, һәр кем үҙе теләгән музыка тыңларға йә фильм ҡарарға хоҡуҡлы, тик шул уҡ ваҡытта был туған тел, туған моңдар һәм башҡа ҡиммәттәребеҙҙе һанламау, инҡар итеү иҫәбенә эшләнмәһен ине. Юғиһә, Башҡортостандың баш ҡалаһында рус хәрефтәре менән яҙылһа ла, беҙҙең өсөн барыбер аңлашылмаған һәм Ҡафтау яҡтарын күҙ алдына килтереүсе "Оджахури", "Хани", "Нуар","Чикен Нуар", "Тануки","Иза" атамалы кафе һәм кафетерийҙар ҙа күбәйеп киткән икән дә! Уларҙың хужалары, күрәһең, мигранттар иҫәбенән булып, урындағы мәнфәғәтте күҙәтеү урынына үҙ телен, үҙ бизнесын өҫтән күрә: үҙ илендәгеләй ирәйеп, беҙҙең республикала аҡса эшләй. Был да тема, минеңсә. Нисәмә йылдар буйы улар республика халҡын рус-башҡорт-татар аш-һыуынан биҙҙереп, үҙҙәренең сифат яғынан шикле-микле шаурма һәм ҡара көйгән шашлыҡтары менән ризыҡланырға өйрәттеләр тәки! Ә бит утта ҡыҙҙырылған ит ризыҡтары тотошлайы менән канцероген - яман шеш сәбәпсеһе.

Ә бына бер нисә йыл элек хуплау-йөпләүҙәр менән асылып эшләй башлаған "Aibat hallyar" туҡланыу селтәренең атамаһы хәҙер ҡайһы бер урындарҙа рус хәрефтәре тип алмаштырылған. Тик шуныһы: әгәр бында башлыса урындағы милли аш-һыу тәҡдим ителә икән, ни өсөн кафены "Һәйбәт хәлдәр" тип кенә башҡортса атамаҫҡа икән?

Яңыраҡ баш ҡалабыҙ урамдары буйлап үткәндә, алтаҡталар атамаларында инглиз хәрефтәре урынына рус телендә яҙылған ошондай ҡайһы бер үҙгәрештәрҙең күҙгә салына башлауына шаһит булдым. Был ҡыуандыра, ләкин яҡшы эштең беҙҙә ҡайһы саҡ күҙәтелә торған сиктән-сиккә һуғылыуҙарһыҙ ғына атҡарылыуына ышанғы килә. Закон проектында әйтелеүенсә, атамаларҙы рус телендә яҙыу ҡулланыусылар мәнфәғәтенән сығып эшләнә. Шулай булғас, рус теле менән бер рәттән, Башҡортостандың дәүләт теле булған башҡорт телендә лә атамалар урын алырға хаҡлы, тип уйлайым: был баш ҡалабыҙҙың милли йөҙөн сағылдырыуға булышлыҡ ҡына итәсәк бит.

ҠЫҪҠАСА

# МИНСК КӨНДӘРЕ ҮТӘ

**Мэр Ратмир Мәүлиев етәкселегендәге Өфө делегацияһы туғандаш ҡаланан Минск көндәрен юғары тураһында килешеү төҙөп ҡайтты.** Киләһе йыл 3 июлдә Өфөлә Минск көндәре үткәрелә. Ә Белоруссияның баш ҡалаһында Өфө көндәре ойоштороло. Хакимиәт башлығы оператив кәңәшмәлә ошо турала белдерҙе. Ул эшсе төркөмдәр төҙөргә һәм сараға әҙерлек эштәрен башларға ҡушты. "Был бик яҡшы эш формаһы, унда беҙ предприятиеларыбыҙ менән таныштыра, хеҙмәттәшлеккә этәргес бирә алабыҙ. Әлбиттә, туризмды үҫтереү - беҙҙең өсөн стратегик бурыстарҙың береһе. Беҙ бер-беребеҙҙән бик йыраҡта түгел, күп йәһәттән оҡшашбыҙ, мәҙәниәттәр бик яҡын", - тип билдәләне Ратмир Мәүлиев. Әйткәндәй, Башҡортостандың һәм Белоруссияның баш ҡалалары 2017 йылдан туғандаш ҡалалар булып тора. 2023 йылда Өфөлә Рәсәй һәм Белоруссия төбәктәренең X форумы барышында ике ҡала араһында 2023-2025 йылдарға берлектәге саралар планына ҡул ҡуйылды. Быйыл йәй ҡалабыҙҙа Минск көндәре уҙҙы, мәҙәни һәм эшлекле ваҡиғалар, шулай уҡ белорус тауарҙары йәрминкәләре ойошторолдо.

✔ **2025-2030 йылдарҙа Өфөнөң Киров, Дим һәм Орджоникидзе райондарын үҫтереүгә бюджет сығымдары арттырылды.** Тейешле ҡарар ҡала хакимиәте сайтында урынлаштырылған. Баҫылған документҡа ярашлы, Киров районына бүленгән аҡса күләме 176 миллион һумға - 3,34 миллиардҡа тиклем арттырылған. Дим районын финанслау 140 миллионға - 1,68 миллиард, Орджоникидзе районына бүленәсәк аҡса 9 миллионға, йәғни 2,98 миллиард һумға тиклем еткерелгән. Был суммалар биләмәләрҙе тәртиптә тотоуға һәм төҙөкләндереүгә, тышҡы яҡтыртыу системаһын үҫтереүгә, социаль объекттарҙы ремонтлауға һәм яңыртыуға, ҡала халҡының наказдарын үтәүгә һәм башҡа өлкәләргә йүнәлтеләсәк. Өҫтәмә сығымдарҙың зур өлөшөн муниципаль бюджет булә. Шулай уҡ республика һәм федераль үҙәктән дә аҡса йәлеп итеү планлаштырыла.

✔ **Өфөлә ҡала хакимиәте ҡарары менән алкоголде ваҡлап һатыуға юл ҡуйылмаған ойошмалар һәм объекттар исемлегенең яңы редакцияһы раҫланды.** Исемлектә бөтәһе 1429 объект: мәктәптәр, балалар баҡсалары, юғары уҡыу йорттары һәм колледждар, өҫтәмә белем биреү ойошмалары, медицина учреждениелары, автомәктәптәр, стоматология кабинеттары, атаҡтар һәм башҡалар. Объекттар исемлеге 2014 йылда төҙөлгән. "Башинформ" агентлығына Өфө хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, яңы редакцияла уны 6 яңы ойошма: 3 шәхси балалар баҡсаһы, "Меги" клиникаһы филиалы, Дим биҫтәһендәге Балалар һәм үсмерҙәр өсөн реабилитация үҙәге һәм "Орион"ижад һарайы филиалы индереп киңәйттеләр. Бынан тыш, 10 белем биреү учреждениеһының исеменә үҙгәреш индерелде.

ДЕПУТАТ АҢЛАТА



# ХАҠЛЫ ЯЛҒА ИРТӘРӘКМЕ?

## Был мөмкин!

**Бөрйән районында халыҡ менән осрашыу барышында алты бала әсәһе мөрәжәғәт иткәйне. Ул балаларҙы ҡарауҙың бөтә йылдары ла пенсияның страховкалау стажына индерелмәүенә, шуға күрә иртәрәк хаҡлы ялға сыға алмауына зарланды. Бөтә документтарҙы өйрәнергә һәм, нигеҙ булғанда, законға үҙгәрештәр индереүҙе башларға вәғәҙә бирҙем.**

Асыҡланыуынса, "Страховка пенсиялары тураһында" Федераль закондың 12-се статьяһында страховка стажына ата-әсәләрҙең береһенә һәр баланы йәш ярымға тиклем, әммә дөйөм алғанда алты йылдан артыҡ булмаған ҡарау осоро инә. Был страховка стажына дүрт баланы ҡарау ғына инәсәк тигәнде аңлата (4+1,5=6). Бишенсе һәм артабанғы балаларҙы ҡарау осоро страховка стажына инмәй. Әлеге закон нигеҙендә биш балалы әсә, 15 йыл страховка стажы булғанда, 50 йәштән хаҡлы ялға сығырға хоҡуҡлы. Миңә мөрәжәғәт итеүсе әсәнең бишенсе һәм алтынсы балаһын ҡарауы иҫәпкә алынмағанлыҡтан страховка стажы 15 йылға етмәгән. Һөҙөмтәлә ул иртәрәк хаҡлы ялға сыға алмай.

Рәсәй Федерацияһының хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығына страховка стажына бөтә балаларҙы ла ҡарау осорон иҫәпкә алырға кәрәклеген аңлатып, законға үҙгәрештәр индерергә кәрәклеге тәҡдим иттем. Министрҙан бындай үҙгәрештәр менән риза булыуын, көнүҙәклеге менән килешеүе тураһында яуап алдым.

Тиҙ арала РФ Дәүләт Думаһына закон проекты әҙерләнде һәм уны беренсе уҡыуҙа ҡабул иттек. Законды тормошҡа ашырыу өсөн йылына 12 миллиард һум самаһы аҡса талап ителәсәк. Көҙгөһөн законды икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа ҡабул итәсәкбеҙ.

Бөрйән районынан әсәнең мөрәжәғәте Федераль законға үҙгәреш индереүгә булышлыҡ итте. Был сара дүрт һәм унан да күберәк бала тәрбиәләүсе меңәрләгән ата-әсәгә файҙа килтерәсәк.

**Зариф БАЙҒУСҠАРОВ, Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостан шашкасылары IDA йөҙ шаҡмаҡлы шашка буйынса Донъя кубогының өсөнсө этабы чемпиондары булды. Шашка турниры Ереванда үтте, тип хәбәр ителәр республиканың Спорт министрлығынан. Блицта һәм рапидта Александр Георгиевка етеүсе булмай. Блиц буйынса ҡатын-ҡыҙҙар турнирында - Тамара Танһыҡҡужина, рапидта Әлиә Әминева еңә. Елена Мильшина ике тапҡыр икенсе урынды яулай, ә Муродулло Амриллаев блицта көмөш мизал ала. Ярышта Әрмәнстан, Грузия, Рәсәй һәм АҠШ-тан 34 спортсы ҡатнашҡан.

✔Башҡортостанда халыҡты спортҡа йәлеп итеү өсөн тейешле шарттар булдырыла. Вице-премьер - республиканың спорт министры Руслан Хәбибов һүҙҙәренсә, 2022 йылдан алып капиталь ремонт программаһына 40 спорт объекты индерелгән. Йүнәлтелгән средстволарҙың дөйөм суммаһы 382,1 миллион һум тәшкил иткән. Бынан тыш, муниципаль спорт объекттарын капиталь ремонтлау буйынса федераль проект эшләй. Быйыл ошо программа буйынса республикала спорт комплекстарын яңыртыуға 40 миллион һум бүленгән. Дәүләтҡа ҡарамаған спорт йүнәлеше лә үҫешә. 2022 йылдан 56 спорт ойошмаһына 12 спорт төрө буйынса спорт әҙерләгән тормошҡа ашырыуға 263,5 миллион һумлыҡ субсидиялар бирелгән. Был проект сиктәрендә 7205 спортсы өҫтәмә спорт әҙерлеге үткән.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Интер РАО" акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Сергей Дрегваль менән эшлекле осрашыу үткәрҙе. "Интер РАО" менән бәйләнешебеҙ ныҡлы. Компания - беҙҙең ышаныслы партнерыбыҙ, йылылыҡ ресурстары менән тәьмин итеүсебеҙ. Йылылыҡ һәм электр станцияларын яңыртыу программаһын тормошҡа ашырыу дауам итә. 2029 йылға тиклем инвестициялар күләме 27 миллиард һумға етәсәк - был бик етди күрһәткес", - тип белдерҙе Республика етәксеһе.

✔Рәсәй Президенты ошо көндәрҙә видеоконференция режимында Хөкүмәт ағзалары менән үткәргән кәңәшмәлә үҙенең Хакимиәтенә һәм Рәсәй Хөкүмәтенә сираттағы "Тура бәйләнеш"те ойоштороу буйынса телә́ктәрен белдерҙе. "Халыҡты борсоған һорауҙар ни тиклем күп булһа ла, улар барыһы ла айҙар дауамында иғтибарға алынһын", - тине Владимир Путин.

✔2021 йылдан башлап республиканың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы Һаулыҡ һаҡлау министрлығындағы коллегалары менән берлектә алкоголь һәм наркотиктар ҡулланыуға бәйле ауырыуҙарҙы профилактикалау һәм дауалау, ғаилә конфликттарын иҫкәртеү һәм хәл итеү мәсьәләләре буйынса консультациялар үткәрә. 11 һәм 12 сентябрҙә иһә Башҡортостанда алкоголь һәм наркотиктар ҡулланыуға бәйле мәсьәләләр буйынса ҡыҙыу бәйләнеш ойошторолдо. Республика халҡының һорауҙарына белгестәр яуап бирҙе.

✓ *Ошо йылдың 1 ғинуарынан алып 2 сентябренә тиклем Рәсәй баҙарына 671,5 мең тонна ҡытай продукцияһы килтерелгән. Йәшелсәләрҙең ниндәй шарттарҙа үҫтереп ебәрелеүе беҙгә ҡараңғы.*



*БЫЛ АЙҘА...*

# ҺАРЫСАЙҘАН - ҠАРАСАЙҒА

**Көҙ уртаһына ла килеп индек. Һарысай ҡойма ямғырҙары менән йәнгә тейһә лә, йырҙа йырланғанса, һауа торошоноң насар көнө юҡ. Аяҙ, сыуаҡ көндәр ҙә бүләк итеп китте һарысай, ә бына ҡарасай нисек килер - унығын фаразлау беҙҙең эш түгел.**

Ә шулай ҙа синоптиктар бер-береһен уҙҙырып, бер-береһенә ҡапма-ҡаршы күҙаллауҙар бирә. Мәҫәлән, Яндекс. Погода метеорологтары вәғәҙәләүенсә, Башҡортостанда октябрҙең ғәҙәттән тыш йылы килеүе көтөлә. Ә инде "Фобос" үҙәге ҡарасайҙа һауа температураһының киҫкен тирбәлештәре һәм көтөлмәгән үҙгәрештәр хаҡында, айҙың 4-5-тәренән һыуытып ебәрәсәге, төндә температураның нулдән түбән төшәсәге һәм икенсе-өсөнсө аҙналарҙа көндөҙ ҙә хатта минус 3 һәм 5-кә етәсәген, айҙың икенсе яртыһынан ҡар ҡатыш ямғырҙар ихтималлығын белдерә. Росгидромет шулай уҡ октябрь ахырында Башҡортостанда, айырыуса таулы райондарҙа, ҡар яуасаҡ, тип тә иҫкәртә.

Нимә генә тиһәң дә, көҙ уртаһы ҡарасайҙа ҡар һыуығы, ҡыш һулышы көндән-көн үҙен нығыраҡ һиҙҙерәсәк, тик шулай ҙа ҡар ҡатламы, ғәҙәттә, ноябрҙә генә ята торғайны. Кем белә, йылытып ебәреүе лә ихтимал. Мәҫәлән, Башҡортостан матбуғат баҫмалары 2019 йылда ҡарасайҙың Башҡортостанда 1949 йылдан бирле күрелмәгәнсә ғәҙәттән тыш йылы тороуы хаҡында яҙа. Ай аҙағында ул йылда һауа температураһы 13-14 градусҡа тиклем йылынған. Былтыр шулай уҡ ошо мәлдә көндәр йылы һәм ҡоро килде. Айҙың тәүге көнө температура +21,5 градус күрһәтте һәм 1984 йылғы рекорд ҡабатланды.

Ҡарасай - сирҡандырғыс һыуыҡ, болотло-яуынлы мәл тиһәк тә, был айҙа матур байрамдар, аҡ, игелекле көндәр етерлек: Өлкән йәштәгеләр, Йылмайыу **(1)**, Ҡыҙҙар **(11)**, Ауыл ҡатындары **(15)**, Икмәк **(16)**, Атайҙар **(19)**, Өләсәй һәм ҡартатайҙар **(28)** көндәре күңелдәрҙе йылытып, тормошобоҙға нур өҫтәп торғандай. Бынан тыш, ҡарасайҙа тағы ла Ҡурай **(10)**, Башҡортостан Республикаһы **(11. 1990)**, Милли бейеү **(21)** байрамдары ла көтөп алына һәм йәшәйешебеҙҙе йәмләй. Ҡыҙғаныҫҡа, байрам да, иҫтәлекле көн дә булмаған, тормошобоҙҙағы теге йәки был проблеманы иҫкә төшөрөп, киҫәтеп тороусы даталар ҙа байтаҡ ай календарында: Төйәк иткән ерҙәрҙе һаҡлау **(6)**, Фәҡирлекте бөтөрөү өсөн халыҡ-ара көрәш **(17)**, Инсульт менән көрәш **(28)**, Сәйәси репрессиялар ҡорбандарын иҫкә алыу **(30)** көндәренең ни тиклем көнүҙәк мәсьәләләр күтәреүен күрәбеҙ, ләкин был даталар рәсми ойошма йәки власть органдары тарафынан указдар менән булдырылған сүрәттә лә шым һәм эҙһеҙ генә ябай көн сифатында үтеп китәләр.



Унын ҡарауы, ил иҡтисадының нигеҙе, таянысы булып торған тармаҡ һөнәрмәндәре көндәренең берәгәйлеһе - Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте хеҙмәтсәндәре байрамын **(12)** телгә алып китмәү яҙыҡ булыр ине. Был көн беҙҙә ил күләмендә лә, республикабыҙҙа ла киң билдәләнә, тантаналар ойошторолоп, хеҙмәт алдынғыларының фиҙакәр эшмәкәрлектәре баһалана, уларға ҡиммәтле бүләктәр, дәүләт наградалары тапшырыла. Шулай булырға тейеш тә, сөнки илдең аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген тәьмин итеп килеүсе агросәнәғәт комплексы - халҡыбыҙ тормошоноң нигеҙе. Быйыл был дата яңы форматта билдәләнәсәк: 8-12 октябрҙә Бөтә Рәсәй агродиктант көнө үткәреләсәк, тип хәбәр иткәйне 18 августа Башҡортостандың премьер-министр урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов. "Ауыл хужалығы ризыҡтары нисек етештерелә, ниндәй технологиялар ҡулланыла - агродиктанттың маҡсаты кешеләрҙе ошо мөһим тармаҡ эшмәкәрлеге менән таныштырыу, белемдәрен арттырыу",- тигәйне министр. Бер ыңғайҙан агродиктант йәштәрҙе ауыл хужалығы эштәренә йәлеп итеү сараһы ла булып тора, тип иҫәпләй сараны ойоштороусылар. Агродиктантта теләге булған һәр кем: уҡыусыларҙан алып, студенттар, тармаҡ белгестәре һәм ауыл хужалығы менән ҡыҙыҡһынған кешеләр категорияларға бүленеп ҡатнаша ала һәм тармаҡ буйынса 30 һорауға яуап бирә.

Шул уҡ ваҡытта байрам - ул проблемалар хаҡында өндәшмәй ҡалыуҙы ла аңлатмай, ә улар беҙҙә етерлек. Мәҫәлән, рәсми сығанаҡтарҙан мәғлүм булыуынса, быйыл йыл башынан Ҡытай беҙҙе йәшелсә-

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Алтаҡталарҙағы сит тел атамалары ҡала йөҙөн биҙәйме?

***Илшат БАЙМОРАТОВ, Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенты:*** Алтаҡталар - иң тәүҙә теге йәки был ойошманың йөҙөн, йөкмәткеһен күрһәтеп тороусы билдә ул. Үҙен ихтирам иткән бөтөн ойошмалар, бигерәк тә рәсми учреждениелар, алтаҡталарын Башҡортостандың дәүләт телдәрендә яҙып элә. Быныһына бер һүҙ ҙә юҡ. Закон буйынса шулай булырға тейеш тә. Ләкин Өфө урамдарынан үткән саҡта магазин, кафе-рестора ндар, коммерция дауалау учреждениелары һәм башҡа һанһыҙ күп ойошмаларҙың атамаларын рус телендә лә, башҡортса ла түгел, ә инглиз телендә генә яҙып элеү модаға инеп китте. Ысынлап та, кем әйтмешләй, былдай сыбарлыҡтан күҙ ҡамаша, айырыуса, мәҫәлән, транспортта ҡала буйлап барғанда. Һәм был бер ҙә матур түгел, ҡайһы бер атамалар хатта көлкөнө килтерә. Мәҫәлән, Заман by Tubatay, Chick, Frank by Баста, Efendi, Chowara һәм башҡалар. Былдай туҙға яҙмаған һәм инглиз хәрефтәре менән яҙылған атамалар аҫтында күберәк тиҙ туҡланыу кафелары, бәләкәй сауҙа нөктәләре (бутиктар - исемен дә тапҡандар бит, ә!) эшләй. Улар, әлбиттә, үҙ ҡулланыусыларын башлыса бала-саға, үҫмерҙәр һәм йәштәр йөҙөндә күреп өйрәнгән, күрәһең, шуға ла уларҙың инглиз теленән белемдәрен "һынап ҡарарға" уйлайҙар микән, тип тә уйлап ҡуяһың. Көлкө түгел, әлбиттә, ләкин аңлашылмай: ни сәбәпле бизнес әһелдәре инглиз атамаларын өҫтөн күрә? Улар бит инглиздарҙы хеҙмәтләндермәй ҙә баһа! Башҡортостан Республикаһында эшләүҙәрен онотоп ебәргәндәрме әллә? Башҡортса атама булмаһа, беҙ русса ла һупалайбыҙ, ниңә Рәсәйҙең дәүләт телен һанламай улар?

Башҡортса атама, тигәндән, әйтеүемсә, дәүләт учреждениеларында, ҙурыраҡ сауҙа ойошмаларында русса атамаларҙың, магазиндарҙағы "Ҡулланыусы мөйөштәре"нең башҡортса тәржемәләре яҙып эленә, быныһы һәйбәт күренеш. Тимәк, уларҙың хужалары реклама һәм телдәр тураһындағы закондар менән таныш. Тик быны башҡортса яҙыуҙарҙа ғәфү иткеһеҙ хаталар киткеләй. "Балтика" компанияһының "Башбир" атамалы һыраһы менән булып алған тарихты хәтерләйһегеҙме әле? Туған телебеҙгә битараф булмаған әүҙем йәмәғәтселек тарафынан был дай мәғәнәһеҙлеккә ваҡытында юл ябылды: аңлайышһыҙ атамалы продукцияны сығарыу ҡәтғи туҡтатылды. Йәмәғәт палатаһы ағзаһы, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса ойошма директоры Гөлназ Йосопова һөйләүенсә, алтаҡталарҙағы атамалар һәм башҡа яҙыуҙарҙа дөрөҫ тәржемә ителмәгән һүҙҙәр йә булмаһа, һүҙҙәрҙе контекстан сығып файҙаланмау, "У" һәм "Ү", "С" һәм "Ҫ" кеүек хәрефтәрҙе бутау, орфографик хаталар йыш осрай. Былдай күренештәргә лә сик ҡуйыу кәрәк, ә уның өсөн иһә алтаҡталарҙың яҙылышын даими контролдә тотоу мотлаҡ. Уларҙы йөрөп тикшереү өсөн, мәҫәлән, студенттарҙы, пенсионерҙарҙы йәлеп итергә булыр ине, тип уйлайым. Туған телебеҙҙе үҙебеҙҙең яҡлауға алып, уға ҡарата ихтирам талап итмәһәк, быны беҙҙән башҡа бер кем дә эшләмәйәсәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2026 йылда Өфөлә Халыҡ-ара халыҡ художество кәсептәре фестивале үткәрелә. Рәсәй төбәктәренән һәм сит илдәрҙән иң яҡшы оҫталар "Китап байрамы" халыҡ-ара йәрминкәһе тамамланғандан һуң баш ҡаланың Совет майҙанында үҙ ҡулдары менән эшләгән әйберҙәрен күрһәтә. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Креатив индустриялар сәғәте"ндә ошо турала һөйләне. Республика етәксеһе билдәләүенсә, баш ҡалала һөнәрселәр һәм халыҡ художество кәсептәре оҫталары үҙ изделиеларын һата алһын өсөн даими урындар билдәләргә кәрәк.

*

✓15 сентябрҙән Ҡытай халыҡ республикаһына барыу өсөн виза талап ителмәй. Ике ил сиге аша сит ил паспорты менән үтергә мөмкин. Ҡытайҙа, илгә ингәндән алып, 30 көн булырға мөмкин. Рәсәйлеләргә, сикләнгән зоналарҙан, атап әйткәндә, Тибет автономиялы районынан тыш, илдең бөтә территорияһында йөрөргә рөхсәт ителә. Визаһыҙ режим Ҡытайға туристик һәм эшлекле эш сәфәре менән, шулай уҡ төрлө гуманитар бәйләнештәрҙә ҡатнашыу, туғандарға барыу йәки транзит маҡсатын тотҡан граждандарға ҡағыла. Эш, уҡыу, журналист эшмәкәрлеге өсөн килгән граждандарға, шулай уҡ водителдәргә, экспедиторҙарға һәм тәржемәселәргә ул ҡағылмай.

*

✓Әлшәй районы Шишмә ауылынан "Һунарсы" позывнойлы яугир яҡташтарына тылда хәрби хеҙмәткәрҙәргә ярҙам күрһәтеүҙәре өсөн рәхмәт белдерҙе. Унын менән осрашыуы хаҡында Әлшәй районы хакимиәте башлығы Наил Әбелғужин хәбәр итте. Яҡындарҙың һәм дуҫтарҙың ярҙамы бик мөһим, айырыуса фронтта үҙ районындан яуҙаштар булһа, тип билдәләне "Һунарсы" муниципалитет етәксеһе менән һөйләшеүҙә. "Алғы һыҙыҡта "Һунарсы" менән бергә уның ике туған ағай-ҡустылары хеҙмәт бурысын үтәй, был өйҙән алыҫта үткәргән һәр көнгә айырым мәғәнә өҫтәй", - тип яҙҙы Наил Әбелғужин социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

*

✓Стәрлетамаҡтан "Авангард" федераль ҡаҙна предприятиеһы Японияның санкция исемлегенә индерелде. Был хаҡта мәғлүмәт илдең Сит ил эштәре министрлығының рәсми сайтында баҫылған. Оборона предприятиеһына ҡаршы иҡтисади саралар капитал менән операциялар һәм түләүҙәр буйынса сикләүҙәрҙе күҙ уңында тота, улар өсөн хәҙер махсус рөхсәт талап ителә. Японияның яңы сикләүҙәренә шулай уҡ "Беренселәр хәрәкәте", Әхмәт Ҡадиров фонды, Тула ҡорал заводы, "Алабуға" махсус иҡтисади зонаһы, Силәбенең "Урал" автозаводы һәм "Артек" халыҡ-ара балалар үҙәге индерелде.

*

✓1 октябрҙән үҙмәшғүлдәр, бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ вәкилдәре 5 йылға бер тапҡыр алты айға тиклем кредит каникулдары алырға мөмкин. Рәсәй Президенты июль айында тейешле законға ҡул ҡуйҙы, тип иҫкә төшөрә федераль киң мәғлүмәт саралары.

***✓ Көнбайыш илдәре Палестина дәүләтен танныуҙары хаҡында белдерҙе. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының 193 ил-ағзаһынан 148 дәүләт, шул иҫәптән Рәсәй, Палестинаны таный.***



емеш ризыҡтары менән тәьмин итеү күләмен былтырғыға ҡарағанда 46 процентҡа арттырған. Һөҙөмтәлә Россельхознадзор мәғлүмәттәре буйынса, ошо йылдың 1 ғинуарынан алып 2 сентябренә тиклем Рәсәй баҙарына 671,5 мең тонна ҡытай продукцияһы килтерелгән. Улар иҫәбендә Рәсәй ауыл хужалығы йылдар буйы үҙ ихтыяжын тәьмин итеп килгән картуф, кәбестә, һуған, һарымһаҡ, кишер, ҡыяр, баклажан, ҡабаҡ кеүек йәшелсә төрҙәре айырыуса күп ебәрелә. Ә беҙҙең халыҡ ни эшләй, әгәр үҙен тәьмин итерлек картуф менән кәбестә лә үҫтерә алмай икән? Әллә әҙергә һалынғанмы? Үҙебеҙҙә етештерелгәндең сифатына ышаныс булғанда ла, Ҡытайҙың Бөйөк диуарҙар артында нимәләр эшләүе, йәшелсәләрҙе ниндәй шарттарҙа үҫтереп ебәреүе беҙгә ҡараңғы. Интернет каналдарындағы хәбәрҙәр буйынса ла, халыҡ телендә лә күберәк һәм тиҙерәк уңыш алыу маҡсатында унда тотош химия ҡулланыла, тигән мәғлүмәттәр ҙә киң таралған. TELS GLOBAL Маркетинг департаменты белгесе, ошо өлкәлә - 25, халыҡ-ара логистикала 15 йыл эшләүсе аналитик Александр Жикин яҙып сығыуынса, Рәсәйҙә ҡайһы бер сегменттарҙың, әйтәйек, автотранспорт һәм уға запчастар, көнкүреш электр тауарҙары баҙарының Ҡытай продукцияһы менән лыҡа тултырылыуы арҡаһында беҙҙе был продукциялар менән тәьмин итеү бер аҙ кәмей төшһә лә, уның ҡарауы, бая әйтелеүенсә, башҡа күп тауарҙар менән бер рәттән, Рәсәйгә йәшелсә-емеш экспортлау арта ғына бара.

Урынлы һорау тыуа: ҡайҙа үҙебеҙҙең агросәнәғәт комплексы етештергән картуф, һуған, кәбестә? Әле генә Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының тағы бер мәғлүмәте баҫылып сыҡты: Ҡытайға республикабыҙҙан рапс майы экспортлау ике тапҡырға артҡан ("Приволжье" телеграф агентлығы, 17 сентябрь). Ә Рәсәй үҙебеҙгә Индонезиянан ғына ла йылына уртаса 1 млн (!) тонна пальма майы һатып ала. Шул уҡ ваҡытта әлеге Ҡытайҙа, ғәрәп илдәрендә, Евросоюзда һәм АҠШ-та яман шешкә килтереүе ихтимал булған пальма майын үҙ илдәренә индереү ҡәтғи сикләнгән һәм даими контролдә тотола. Улар өсөн был майҙы махсус эшкәртеүселәр хәүефһеҙ технология ҡулланып, майҙы эшкәртеү буйынса юғары температураны ферментлау ысулы менән алмаштырған. Ә беҙгә ҡалай ҙа ярағанмы?..

Юғарыла текста әйтелеп кителгән иҫтәлекле көндәр һәм байрамдарҙан тыш, ҡарасай календарында тағы ла ошондай даталар билдәләнә: Халыҡ-ара музыка **(1)**, Урта һөнәри белем, Электрон почта, Көс ҡулланмау **(2)** көндәре, Рәсәй космос көстәре, Рәсәй МЧС-ының граждандар оборонаһы **(4)**, Уҡытыусылар **(5)**, Халыҡ-ара табиптар, Торлаҡ **(6)**, Бөтөн донъя аҙыҡ-түлек **(16)**, Участка терапевты **(17)**, Аҙыҡ-түлек сәнәғәте хеҙмәтсәндәре **(19)**, Автомобилист **(26)**, РФ Хәрби-диңгеҙ флотының һыу аҫты моряктары **(30)**, Халыҡ-ара иктисад һәм Халыҡ-ара Ҡара диңгеҙ **(31)** көндәре.

**Ҡарасайҙа тыуғандар:**

**9 -** журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш.Хоҙайбирҙин премияһы лауреаты **Әлфиә Аҡбутинаға - 70 йәш** (1955).

**14 -** шағирә, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 1991-1998 йылдарҙа Татарстан президенты аппаратының халыҡ-ара милли мөнәсәбәттәр бүлеге баш референты, Татарстан башҡорттары ҡоролтайы рәйесе, башҡорттарҙың Ҡаҙандағы милли-мәҙәни автономияһы етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры, сығышы менән Ишембай районынан булған **Фирҙәүес Бәшироваға - 80 йәш** (1945).

**17 -** М.Кәрим исемендәге БР Милли йәштәр театры артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Ш.Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты **Рушана Бабичҡа - 50 йәш** (1975).

Ҡарасайҙа Себер даруғаһы Ҡыуаҡан улысы башҡорто, 1735-1740 йылдарҙағы ихтилал етәкселәренең береһе, башҡорт феодалы, абыҙ, мулла, тыуған яҡ тарихы һәм Ҡөрьән Кәрим белгесе **Бәпәнә Торопбирҙиндың тыуыуына - 330 йыл** (1695-1739).

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ҠОРАЛЫНА КҮРӘ - ҒӘМӘЛЕ

**Рәсәй ғәскәрҙәре Махсус хәрби операция барышында дошман позицияһына дрондар осороу буйынса яңы тактика ҡуллана башланы, тип хәбәр итә интернет мәғлүмәт сығанаҡтары, Wall Street Journal баҫмаһы мәҡәләһенә һылтанып. Унда Рәсәй пилотһыҙ осоу аппараттарының һөжүм радиустарын киңәйтеүе, шулай уҡ контроль һыҙығынан алыҫҡа барып еткән ҙур дрондар эсенән ваҡ шартлаҡыс аппараттар осороп сығарылыуы һәм украин техникаларына һөжүм итеүе хаҡында һүҙ бара. Бындай тактика ярҙамында Рәсәй дрондарының Украина Ҡораллы көстәре объекттарына һөжүме күпкә һөҙөмтәлерәк килеп сыға, тип билдәләнә. Дрондар һуғышында тағы бер яңылыҡ: РФ Президенты Владимир Путин "Көнбайыш-2025"стратегик күнекмәләр ваҡытында дронға ҡаршы һаҡ ҡуйылған машиналар уйлап сығарыусы конструкторҙарҙы маҡтаны. Ошоға бәйле, Ҡорал эшләүселәр көнөндә Пермь ҡалаһында булғанында Президент Рәсәйҙә ҡайһы бер төр ҡорал етештереүҙең 30 тапҡырға тиклем арттырылыуы хаҡында белдерҙе.**

РФ Оборона министрлығы хәбәр итеүенсә, үткән йәкшәмбе - 21 сентябрҙә украин боевиктары менән сит ил хәрби ялланыусылары һәм дрондар осороусы пункттар урынлашҡан 138 район Рәсәй авиацияһы, ракета ғәскәрҙәре һәм артиллерия, шулай уҡ осоусы шартлаҡыс аппараттар ҡулланылып, көслө ут аҫтына тотолған. Ошо уҡ көндә Рәсәй Ҡораллы Көстәре тарафынан Украинаның "Сапсан" оператив-тактик ракета комплексы етештереүсе хәрби-сәнәғәт предприятиеһы, разведчик дрондар менән робот хәрби техникаһы заводтары шартлатылған. Сумы, Харьков, Покровск, Купянск, Север, Ҡыҙыл Лиман, Константиновск, Запорожье йүнәлештәрендә Рәсәй яугирҙары дошман менән көсөргәнешле бәрелештәрҙә әкренләп булһа ла позицияларын нығыта һәм үҙ ҡарамағындағы территорияларҙы украин төркөмдәре ҡалдыҡтарынан таҙарта бара. Айырыуса Харьков өлкәһенең Купянск ҡалаһы өсөн ауыр һуғыштар бара, тип хәбәр итә АиФ.ру. Украина Ҡораллы көстәре карателдәре Купянскиҙа тороп ҡалған тыныс халыҡ өҫтөнә дрондар яуҙыра, ҡаланы урталай бүлеп ағыусы Оскол йылғаһына мәйеттәр ташлай, һөҙөмтәлә халыҡ һыуһыҙ интегә. Улар урамға сығырға ла ҡурҡып, йәшеренеп ултырырға мәжбүр, сөнки украин боевиктары ваҡытында ҡаланы ташлап китмәгәне өсөн урындағы халыҡты Рәсәй армияһын көтөп ултырыуҙа, хыянатсылыҡта ғәйепләй һәм урамда осраған бер кешене үлтереп китә. Купянскиҙан сығыу юлдары миналанған. Ләкин дошман нисек кенә шашынмаһын, РФ Ҡораллы Көстәре ярты ҡаланы тиерлек үҙ контролендә тота һәм боевиктарҙы артабан ҡыҫырыҡлай. Купянскиҙы тулыһынса азат итеү өсөн ике-өс аҙна кәрәк булыр, ти хәрби эксперт Юрий Кнутов. Был ҡаланы алыу, тимәк, беҙҙеке ләргә бөтөн Донбасс территорияһын контролдә тоторға мөмкинлек бирәсәк. Ошо уҡ йүнәлештәге Кондрашовка һәм Новоселовка райондарына һөжүм көсәйә, Новопавловка өсөн һуғыштар бара. Был Махсус хәрби операция барышынан бер генә йүнәлештәге эпизод, ә фронт һыҙығы меңләгән саҡрымға һуҙылған. NEWS.ru сайты материалында билдәләнеүенсә, Рәсәй Украинаға һөжүм итеүҙә ҡулланылған юҡ итеү саралары буйынса рекорд ҡуйып, МХО-ның яңы этабына күсте. Күҙәтеүселәр фекерләүенсә, был эсул менән РФ оборона министры Андрей Белоусов һөйләшеүҙәрҙән ялтарыусы Киев режимын буласаҡ эҙемтәләр хаҡында иҫкәртә. Министр Рәсәй армияһын янырытыуға өлгәшеп, унда тәртип булдырҙы, ти хәрби күҙәтеүселәр NEWS.ru һорауҙарына биргән яуаптарында. "Яңы МХО" башланыуын белдереп, Рәсәй ғәскәре дошман тылында "утлы тамуҡ" ойоштороҙ, тиелә Telegram-каналдар материалдарында. Был һөжүмде артабан йәйелдереү хаҡында тағы бер киҫәтеү.

Һуңғы яңылыҡтарҙан: Австралия, Британия, Канада, Франция, Ирландия, Испания, Норвегия кеүек көнбайыш илдәре Палестина дәүләтен таныуҙары хаҡында белдерҙе. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының 193 ил-ағзаһынан 148 дәүләт, шул иҫәптән Рәсәй, Палестинаны таный. Ә бынан алдараҡ ҡына Израиль премьеры Биньямин Нетаньяху: "Палестины дәүләт тип таныу Израилдең юҡ ителеү ихтималлығы менән янай", - тип сығыш яһап өлгәргәйне. Ә быны АҠШ-тың дәүләт секретары Марко Рубио, Палестина дәүләтен таныу хәлдә үҙгәртмәйәсәк һәм бында Израилдең ризалығы кәрәк, тип иҫәпләй.

АҠШ президенты был көндәрҙә Афғанстан менән булыша. Атап әйткәндә, ул Афғанстандың Баграм авиабазаһын "кисекмәҫтән һәм тиҙ арала" АҠШ ҡарамағына биреүҙе талап итә һәм, әгәр талап үтәлмәгән хәлдә етди эҙемтәләр менән янай. Шул уҡ ваҡытта Трамп һәм уның хакимиәте АҠШ-тағы протест акцияларын финанслауҙа һәм илдәге сәйәси хәлде ҡаҡшатырға маташыуҙа ғәйепләп, билдәле миллиардер һәм финансист, 95 йәшлек Джордж Сорос һәм уның ғаиләһе эшмәкәрлеген тикшереү кампанияһын башламаҡсы.

Америка халҡы 10 сентябрҙә Юта университеты студенттары алдында сығыш яһаған ваҡытында атып үлтерелгән консерваторҙар активисы, яҙыусы, Трамптың власҡа килеүенә күп көс һалған һәм Рәсәй менән эшлекле мөнәсәбәттәр яҡлы, шулай уҡ Украинаға ҡорал ебәреүгә ҡаршы сығыш яһаған 31 йәшлек сәйәсмән Чарли Киркты һуңғы юлға оҙатты.

Японияның АҠШ менән берлектә, Курил утрауҙары янында уртаса алыҫлыҡтағы Tuphon ракета комплексы урынлаштырып, хәрби күнекмәләр башлауына Рәсәй бик тиҙ яуап ғәмәле тапты: Курилда "Бастион" яр буйы ракета комплексын урынлаштырып, Арктиканан истребителдәр ҡайтартты һәм Тымыҡ океан флотын хәрби әҙерлек хәленә килтерҙе. Флоттың һыу аҫты кәмәләре лә, Охот диңгеҙенә сығып, донъяла иң ҙур П-700 "Гранит" ҡанатлы ракеталар ҡеүәтен күрһәтте. Рәсәй Азия-Тымыҡ океан регионындағы хәрби күнекмәләр составында НАТО ғәскәрҙәре һанының артыуы сәбәпле борсолоу белдерә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓11 октябрҙә билдәләнгән Республика көнө уңайынан өҫтәмә ял көтә, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтендә. Быйыл байрам шәмбегә тура килә. Шуға күрә ял көнө 13 октябргә (дүшәмбегә) күсерелә. Байрам уңайынан 11 октябрҙән 13-нә тиклем ял итәбеҙ, ә 10 октябрҙә эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. "Әгәр отпуск алырға уйлаһағыҙ, ул да бер көнгә оҙайтыла, сөнки 11 октябрҙәге байрам көнө отпусктың календарь көндәре иҫәбенә индерелмәй", - тип белдерҙеләр Башҡортостандың хеҙмәт министрлығында.

✓Өфөнөң Калинин районы хакимиәтендә район башлығының иҡтисади мәсьәләләр буйынса урынбаҫары алмашынды. Район хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 15 сентябрҙән вазифаны быға тиклем иҡтисад һәм эшҡыуарлыҡ бүлеге етәксеһе булған Вәхит Игебаев биләй. Район етәксеһе Ғәзизйән Әхмәтйәнов коллективты Вәхит Венер улы менән таныштырҙы.

✓Өфөләге Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусы биләмәһендә яңы резидент - А.М. Моратшин исемендәге Стандартлаштырыу һәм метрология үҙәге - эшләй башланы. Бөгөнгө көндә кампуста 36 вуз-ара лаборатория, инновациялы объект һәм ғилми үҙәк эшләй. Майҙансыҡта республиканың биш төп вузы индустриаль партнерҙар һәм Евразия ғилми-белем биреү үҙәге менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итә. Башҡортостан заманса кампустар селтәрен ойоштороу буйынса федераль проект тормошҡа ашырылған тәүге төбәктәрҙең береһе булды.

✓Үткән шәмбелә Өфөлә беренсе көҙгө дөйөм ҡала өмәһе үтте. Ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, унда 54 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан һәм 513 берәмек махсус техника йәлеп ителгән. Эш барышында 3301 кубометр сүп-сар йыйып алынған һәм тейешле урынға сығарылған. Парк зоналарына, урман парктарына, скверҙар һәм газондарға ҡараған 1219 квадрат метр майҙан, шулай уҡ 1357 квадрат метр йорт яны биләмәһе тәртипкә килтерелгән. Киләһе өмә 27 сентябрҙә уҙғарыла.

✓Өфөлә 6 - 10 октябрҙә өсөнсө тапҡыр "Перспективалы материалдар физикаһы һәм технологияһы" Халыҡ-ара конференцияһы уҙғарыла. Ул 2021 йылдан алып, ике йылға бер тапҡыр, Рәсәй Фәндәр акдемияһы һәм Өфө фән һәм технологиялар университеты тарафынан ойошторола. Конференцияның маҡсаты - материалдар физикаһы һәм механикаһы, уларҙы эшкәртеү технологиялары өлкәһендәге тикшеренеүҙәрҙең көнүҙәк йүнәлештәрендә яңы ғилми һөҙөмтәләрҙе тикшереү, тикшеренеүҙәргә йәш ғалимдарҙы йәлеп итеү.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

БОРОНҒО АМАНАТ

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

### Ир-атҡа үә ҡатын-ҡыҙға тыйыу

Дәрт, мөхәббәт, өйләнеү, туй, ғаилә тормошона ҡағылған өгөт-нәсихәттәр үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләүгә, әхлаҡ-әҙәп ҡағиҙәләрен белеүгә, тотоуға йүнәлтелгән.

Ҡыҙ оҙатыу, килен ҡаршы алыу теләк әйтемдәрендә ошондай тыйыу рәүештәре күҙәтелә: төҫөң боҙоп, теш ыржайтып, балаҡай, йәмәғәтенде үртәмә; кейәү йортона барғас, албырғанма, ҡыҙыҡай; ҡабағанан ҡаптырма, төйләгәндән типтермә, еншайтанды индермә, иблисте еткермә; һыу башлауҙа, тәү башлап, ҡоро күнәк күтәрмә; урынһыҙға һүҙ ҡатып, гонаһҡа батма, киленсәк; ирең ҡаршы һүҙ әйтеп, ауыҙың асма; һүҙ йөрөтмә, ошаҡсы булма, ауылсы булма; ҡәйнәң ҡушҡан йомошто ташлап ҡасма; телсәнләнеп, ҡысҡырып, саусы булма; күҙең-башың йымылдап, күҙсән булма; олтороғың ҡалтырап, тегендә-бында йөрөмә... Киленгә ҡайныһы, ҡайнағалары менән әҙәпһеҙләнеп һөйләшеп тороу ярамаған. Халыҡ әйткәнсә, ҡайнаға яйҡайтып тормаҫ, килен кирелеп тормаҫ.

Хоҙай Тәғәлә ҡатын-ҡыҙға ошоларҙы бойора: урламаҫҡа, уйнаш ҡылмаҫҡа, балаларын мәхрүм итмәҫкә, ялған һөйләмәҫкә, хупланған эштәргә ҡарышмаҫҡа, йәнә оят ерҙәрен һаҡларға, үҙҙәренең биҙәктәрен күрһәтмәҫкә, түштәрендәге уйымдарына бөркәнсектәрен ҡапларға, зина ҡылған ҡатындың һәр берәһенә йөҙәр ҡамсы һуғырға, боҙоҡлоҡ һәм аҙғынлыҡ таратмаҫҡа, сит ирҙәр менән ҡыланып һөйләшмәҫкә...

Кейәүгә сығам, ир менән имен, татыу йәшәйем тигән ҡатын-ҡыҙ тыйыуҙарҙы үтәргә бурыслы. Саам мифологияһында тылсымлы болан-әүермән Мәндәш егет үҙенә әҙәм затынан кәләш әйттереүҙе һорай. Өс апай-һеңленән кесеһе генә Мәндәштең инәһенең тыйыуҙарын тыңлай, әпсен-төпсөн, арбау һүҙҙәре әйтеп, ғәмәлен башҡара, боландар менән яғымлы мөғәмәлә итә һәм Мәндәштең ғүмер юлдашы, хәләле дәрәжәһенә лайыҡ була. "Уғыҙ хикәйәте"ндә дәлилләнеүенсә лә, йән, ҡан тартыуы, бер-береңә күңел ятыуы, ғаилә татыулығы һәм ныҡлығы ир менән ҡатындың бер иманда булыуында, бер бөтөнлөгөндә.

Бәндәләргә Хаҡ Тәғәләнең тыйыуҙарын, әмерҙәрен, ҡанбаба Әҙәмдең өгөт-нәсихәттәрен, васыяттарын оноторға ярамай. Уларҙа - фәһем, һабаҡ, быуындан быуынға тапшырылырға һәм үтәлергә тейешле аманат. Был тыйыу, кәңәш рәүешендә мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә лә күренә: һөймәгәнгә һөйкәлмә; ауылдан ҡыҙ алма ла мал алма; ирең булмаҫтайға иренеңде бирмә; көндәш күргәнден ҡыҙына ҡыҙыҡма; тиңһеҙҙе тиңгә тартма; ҡатынды үҙеңдән башҡа ҡунаҡҡа ебәрмә; ҡатындар һүҙенә алданма; кеше иренә ышанып, түшәк йәймә; ҡатыныңа серңде һөйләмә; ҡатыныңды ҡапыл бөкмә; аҙғынға эйәрһәң, аҙырһың, тоғро юлдан яҙырһың...

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# АЛТМЫШ ЙӘШЛЕК БАБАЙ БУЛАМЫ,

## йәки Һәр нәмә сағыштырыуҙа баҙығыраҡ күренә

**Был тормошта ниндәй ҙә булһа берәй нәмә хаҡында һүҙ ҡуҙғатһаҡ, уны үҙебеҙгә, йә башҡаларға аңлайышлыраҡ булһын өсөнмөлөр, икенсе берәй нәмә менән сағыштырыусанбыҙ. Ысынлап та, шунһыҙ күпселек осраҡта теге йәки был хәлдең, күренештең ниндәй икәнлеген тулы итеп белеп тә, тейешенсә баһалап та булмай. Шулай уҡ, бер үк нәмәне төрлө кеше төрлөсә, хатта ҡапма-ҡаршы рәүештә ҡабул итеүе лә бар. Мәҫәлән, Чукотка кешеһе өсөн йылы булған көн, экватор тирәһендә көн күргән африкалыға ифрат та һалҡын булып тойолоуы ихтимал...**



Тағы бер нәмәгә күптәрҙең иғтибар иткәне барҙыр: ниндәйҙер ныҡ татлы берәй нәмә ашағандан һуң, уның артынса эскән сәйеңдең шәкәр тәмен бөтөнләйгә тоймайһың. Бала сағымда әсәйемә "Мин сәйемә шәкәр һалып болғатҡайным бит, нишләп ул татлы түгел", тиһәм, әсәйем "Әле генә кәнфит ашаның, шуға күрә, ауыҙыңды һыу менән сайҡатып ал", тип кәңәш итер ине. Ысынлап та, телемдәге кәнфит тәмен ябай һыу менән сайҡатып бөтөргәс кенә сәйемдәге шәкәр тәме беленә башлай. Элегерәк "Москвич" автомобиле менән тиҙлекте сәғәтенә 80-90 километрға еткерә башлаһам, хәләл ефетем: "Һәй, һәй, нишләп улай шәп ҡыуаһың?" - ти торғайны. Ә хәҙер "Рено" менән шул уҡ тиҙлектә бара башлаһаң, "Артыҡ әкренләп киттең бит, әй", тип аптырата. Кемдер берәүҙең ҡолағы насар ишетеп, шуға зарланырға тотонһа, икенсеһе шулай тиер: "Тапҡанһың зарланыр нәмә. Мин һинең урында булһам, кireһенсә, шатланып ҡына йөрөр инем. Ә бына минең... күҙҙәрем насар күрә!"

Айлыҡ егерме биш-утыҙ мең эш хаҡы бәғзеләргә күп һымаҡ тойолһа, икенсе берәүҙәр өсөн "был ғына кәпикәләр бер нәмәгә лә етмәй". Ә кемделер айына йөҙ меңдән ашыу алған аҡсаһы ла мөрхәтһендермәһә, уның күршеһе минималь күләмдәге эш хаҡы менән ҡәнәғәт... Яҡынды белмәй тороп - алыҫ төшөнсәһен, күпте, ҙурҙы белмәй тороп - аҙҙың һәм бәләкәйҙең ни икәнлеген, йомшаҡты татымай тороп - ҡатылыҡты аңлау ҙа мөмкин түгелдер.

Йәғни, беҙҙең ошо тормошобоҙ бихисап ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан тора. Кемгәлер яҡшы булып күренгән нәмә икенсе берәүгә ифрат та насар булып тойола. Кемдер өсөн "ямаҡай" булып күренгән кеше башҡа берәү өсөн - матурҙарҙың матуры. Тормошта бына ошо мәсьәләләргә лә һәр саҡ объектив күҙлектән сығып ҡарау кәрәктер. Берәү өйөнә кәләш алып ҡайта икән, бәғзе таныштары "Ҡайҙан тапҡан икән был бисураны", тип ризаһыҙлыҡ белдерә башлай. Ә был егет өсөн әлеге кәләше, бәлки, донъяла - иң гүзәле... Минең инаныуымса, һәр кемде был донъяға Аллаһ Тәғәлә матур итеп яралтҡан. Тик кешеләр генә уларҙы төрлөсә итеп ҡабул итә. Йәғни, "абсолют матур" тигән төшөнсәне мин бөтөнләйгә инҡар итәм. Шул уҡ ваҡытта, әгәр күңеле матур икән, һәр кеше матур була, тип һанайым.

Әлегерәк, беҙ бала һәм үҫмер саҡтарҙа драма театрҙары ҡуйған "Ҡоҙаса" спектаклендәге йырҙарҙы оло быуын кешеләренең күптәре, моғайын, хәтерләйҙер. Пластинкаға яҙҙырылғандарын тыңлап, хатта отоп та ала торғайныҡ. Шундағы "мулла куплеттары"ның һүҙҙәрен әле булһа онотмағанмын. Оҙаҡ йылдар бергә йәшәгән ҡатыны - "оҫтабикә"-һе олоғайғас, бер йәш ҡоҙасаға ғашиҡ булып, уға "эс серен" асҡан мулланың йырында ошондай куплет бар:

*...Оҫтабикәм бик ҡартайҙы*
*Етеп бара иллегә.*
*Усымда ғына йөрөтөрмөн*
*Бисәлеккә кил миңә...*

Шул йырҙы тыңлаған сағымда, миңә, йәш үҫмергә, мулланың "оҫтабикә"һе ифрат та ҡарт булып күҙ алдына килеп баҫа торғайны. Шулай булмай ни, илле йәшкә етеп бара бит, сүтики!.. Йыл артынан йыл үтә, мин әкренләп олоғаям, ә йырҙың һүҙҙәре, әлбиттә, шул көйөнсә ҡала килә. Үҙем илле йәшкә яҡынайған һайын, шул йыр йышыраҡ иҫкә төшә. Ахырҙа, әлеге "оҫтабикә"нең йәшенә лә килеп еттем. Әммә, уға хәҙер бер аҙ икенсерәк, ир уртаһындағы кеше күҙлегенән сығып бағам: "илле йәш әллә ни ҡарт түгел икән дә баһа..." Тиҫтерҙәремә ҡарайым, үҙемә лә иғтибар итәм. Кешенең йөрәге һәр саҡ йәш була, тигәндәй, әллә ни бирешкәндәй ҙә түгелбеҙ...

Шулай, көңгөр-ҡаңғыр йөрөй торғас, тағы әллә күпме ғүмер йәшәп ташлағанбыҙ. Сираттағы мәртәбә артыма әйләнеп бағам: алтынсы тиҫтәне аша атлап үтеп киткәнде һиҙмәй ҙә ҡалынған бит, йәмәғәт! Ә әлеге йыр һаман шул көйө хәтергә эйәреп килә. "...Етеп бара иллегә" тигән ере әле булһа ҡолаҡ төбөндә ишетелеп торғандай. Тик хәҙер инде "әле саҡ иллегә генә яҡынлашып килгән", йәғни, минән ун-ун бишәр йәшкә кесерәк һеңлекәштәр - "почти ҡыҙҙар" икәнлеге хаҡында ла уйҙар башҡа килә башлай. Ә "ир уртаһы" ҡустылар егет һымаҡ ҡына тойола. Шулай уҡ, алтмышты күптән ашҡан булыуыма ҡарамаҫтан, әле булһа, үҙемде ҡарт кеше тип тойорға кәрәклеген дә таныңы килмәй бит әле, йәмәғәт!

Бына шул юҫыҡтараҡ, күптән түгел етмеш бишен билдәләгән бер ҡайнаға тейеш кеше менән һөйләшеп ултырабыҙ. "Мин дә, ҡайнаға, һинең арттан эйәрә киләм, алтмышты уҙҙым бит инде", - тигәс, ул миңә: "Э-эәй, кейәү, һин әле малай ғынаһың бит", - тип һалдырмаһынмы! Бына һиңә кәрәк булһа... Етмеште ҡыуып барған малай!

Был фани донъяла бар нәмә ваҡытлыса һәм сағыштырмаса. Бәкер исемле, тәүге мосолмандарҙан булған бер аҡыллы кеше былай тип әйткән: "Үҙеңдән оло кешене "ул минән алдараҡ Аллаһҡа тәҡүәлек һәм ерҙә изгелектәр ҡылды, шуға күрә ул минән яҡшыраҡ" тип һана. Ә үҙеңдән йәшерәк кешене "ул минән аҙыраҡ гонаһ эштәр ҡылған, шуға минән ул яҡшыраҡ" тип һана" тип әйткән. "Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип һана" тигән халҡыбыҙ әйтеме лә, бәлки, ана шунан да килеп сығыуы ихтимал...

Бына шул хаҡиҡәтте аңлап, ниндәй дәүерҙәр килгәндә лә, һәр төрлө ауырлыҡтар башҡа төшкәндә, унан да ауырыраҡ мәлдәр булыуы мөмкинлеген иҫләп, һис ваҡытта ла төшөнкөлөккә бирелмәй, тормош ҡыйынлыҡтарына гелән генә оптимизм менән ҡарап, уларҙы һәр саҡ еңеп сығыу сараһын эҙләп йәшәү кәрәктер. Ә Ахирәткә барғас (унан бер кемебеҙ ҙә ҡотолоп ҡала алмайбыҙ), әгәр беҙгә Аллаһ Тәғәлә ожмахҡа инергә насип иткән булһа, шуны күрәсәкбеҙ: унда кеше мәңге ҡартаймай һәм әҙәм балалары асығыу, бошоноу, ҡайғырыу, ауырыу, үлем тигән нәмәне белмәйәсәк. Икенсе төрлө әйткәндә, "абсолют яҡшы" тигән нәмә тик Ахирәттә генә булалыр. Әлеге фани донъяла йәшәгән кешеләр һис күҙ алдына килтерә алмаҫтай ләззәтле шундай тормошҡа ирешергә һәр кемебеҙ ынтылырға, ә уның өсөн тереклектә Раббыбыҙ риза булырҙай ғына ғәмәлдәр, тик гүзәл эштәр генә атҡарып йәшәргә тейешбеҙ. Шуға күрә ошо ҡыҫҡа ғына ғүмеребеҙҙе заяға үткәрмәйек. Яҡты донъяла матур йәшәргә тырышыуыбыҙ менән бер рәттән, Аллаһ Тәғәләнең тик Үҙенә мотлаҡ ҡылып йәшәргә тейешле ғибәҙәттәребеҙ хаҡында ла онотмайыҡ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✓ **Көньяҡ Уралда йәшәгән ҡәүемдәрҙең башҡа төбәктәр менән сауҙа бәйләнештәре булыуына дәлил итеп Өфө территорияһында табылған Рим тимер тәңкәләрен килтерергә була.**



ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

**(Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)**



***Светлана Воробьева, тарих фәндәре кадидаты БР Милли музейының өлкән ғилми хеҙмәткәре:*** Көньяҡ Уралда, Өфө ҡалаһы территорияһында - Өфө ярымутрауында, бигерәк тә Ағиҙелдең уң яры буйҙарында иртә тимер быуатына ҡараған ҡаласыҡтарҙа, ҡәберлектәрҙә табылған 40 меңдән ашыу ҡомартҡы предметтар Башҡортостан Республикаһының Милли музейында һаҡлана. Улар - Ҡара Абыҙ мәҙәниәте ҡомартҡылары. Мәҫәлән, ошо осорға ҡараған иң сағыу әйберҙәрҙең береһе - тотошлай бронзанан ҡойоп эшләнгән ике яҡлы зооморф балта - уның өҫкө яғы ҡош суҡышына оҡшатып эшләнгән.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Был бронза балта хәҙерге "Динамо" стадионы территорияһында табылған, уның, уға йәнәш булған барса университет комплексының һәм яҡындағы урамдарҙың майҙанын үтә ҙур Яңы Өфө ҡәберлеге биләгән.

***Александр Колонских, тарих фәндәре кандидаты, Рәсәй Фәндәр Академияһы ӨФТҮ-нең Көньяҡ Уралдың археологик мираҫы бүлегенең ғилми хеҙмәткәре:*** Өфө территорияһында ҡул көсө менән эшләнгән боронғо фортификация ҡоролмалары булған урындар әлегә тиклем һаҡланған, улар әле лә күҙгә салынып, беленеп тора. Уларҙы боронғо ҡомартҡы биләмәләрендә йәшәгән ҡәүемдәр ҡорған. Тораҡ тирәләй өйөлгән валдың бейеклеге 10 метрға етә, уның янындағы яһалма йырындың киңлеге - 5 метр, тәрәнлеге - 2 метр. Былар - боронғо кешеләрҙең һаҡланыу ҡоролмалары, улар бынан 2,5 мең йыл әүәл хасил ителгән.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Валдың бейеклеген уның өҫтөнә менеп ҡарағанда яҡшыраҡ баһалап була. Түбәндән ҡоролманың ниндәй мөһабәт булыуын тойоп булмай. Фортификация "Өфө-1" ҡаласығына ҡарай, уны Өфө кешеләре "Шайтан ҡаласығы" (Чертово городище") тип атаған. Ул хәҙерге "Йәшел сауҡалыҡ" санаторийы биләмәһендә урынлашҡан".

***Светлана Воробьева:*** "Шайтан ҡаласығы" территорияһында табылған көнкүреш әйберҙәренән, мәҫәлән, балсыҡ орсоҡбаштарҙы атап китергә була. Улар йөн иләү маҡсатында орсоҡҡа кейҙерелгәнме, әллә башҡаса ҡулланылғанмы - был турала ғалимдарҙың төрлө фараздары бар. Шулай ҙа ошондай орсоҡбаштарҙың туҡыу станогы өсөн яһалыуын да ысынбарлыҡҡа тап килә, тип фаразларға ерлек бар. Ваҡытына ҡарап, бындай орсоҡбаштар йә балсыҡтан, йә таштан яһалған. Иртә тимер быуаты осорона ҡараған артефакттарҙан тимерҙән ҡойоп эшләнгән һөңгө остарын атап китергә була.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** "Шайтан ҡаласығы"ның бер яғы вал менән уратып алынһа, икенсе яғы Өфө йылғаһына табан кинәт түбәнәйгән 180 метрлыҡ текә морон менән тамамлана.

***Александр Колонских:*** Ошо ҡомартҡы территорияһында йөрөгәндә һәр кем ер өҫтөндә тороп ҡалған боронғо керамика ярсыҡтарын таба ала. Тимәк, бында йәшәүселәр араһында балсыҡтан көршәк яһау оҫталығын үҙләштергән кешеләр ҙә булған.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Моғайын, Волга Көнсығыш Европаның көнбайышында түгел, ә уның көнсығыш ситендә - Урал буйында башлана, тигән фекер күптәргә сәйерерәк булып тойолор. Һәр хәлдә лә, боронғо гректар, уларҙан һуң урта быуат ғәрәптәре шулай тип уйлаған, ә уларҙан ҡалған мәғлүмәтте европалылар үҙләштергән.

Антик донъя ғалимы Клавдий Птолемей үҙенең "География буйынса ҡулланма" тигән китабында Ра йылғаһының, йәғни Волганың Гиперборей (Урал) тауҙарынан ағып сығыуы, шунан, түбәнгә табан ағып барып, Гиркан (Каспий) диңгеҙенә ҡойоуы хаҡында яҙа. XII быуаттың күренекле географы әл Иҙриси ошо турала тағы ла асығыраҡ белдереп, Атил йылғаһының көнсығыш тарафтан, Башҡорт иленән баш алыуын раҫлай. Тик һуң Европа картографияһында ғына Көнсығыш Европаның яңы гегемоны - Мәскәү Русенең географик перспективаһы ҡабул ителә, сөнки рустарҙың ҡарашына ярашлы, Волга уларҙың территорияһында башлана. Нисек кенә булмаһын, антик донъя һәм урта быуаттар ғалимдарының Көньяҡ Урал территорияһы тураһында бик яҡшы мәғлүмәтле булыуы беҙҙең төбәктең Урта диңгеҙ буйы һәм Урта Көнсығыш цивилизациялары менән күптәнге яйға һалынған сауҙа һәм сәйәси бәйләнештәре булыуы хаҡында һөйләй. Бына, мәҫәлән, эллинистик Мысырҙан (Египттан) килтерелеп, Өфө территорияһында табылған арыҫлан фигураһын миҫалға алырға була. Йәнә, урындағы аристократтың ҡәберенә һалып ҡалдырылған, батша һунары сағылдырылған көмөш табаҡтың Сәсәнид Иранында ҡойоп яһалыуы билдәле, күрәһең, ошондай ҡиммәтле предмет ерләнгән кешенеке булғандыр. Зиннәтле алтын медальондар һәм башҡа ювелир әйберҙәре Византиянан килтерелгән, улар, аҡһөйәктәр кейеменең ҡиммәтле аксессуарҙары булараҡ, юғары ҡатлам вәкилдәрен ябай халыҡтан айырып ҡарау маҡсатында ҡулланылған. Ҡатын-ҡыҙ муйынсағының һаҡланып ҡалған берҙән-бер ҙур гәрәбә мәрйене Балтик диңгеҙе төбәге менән бәйләнештәр булыуына ишара.

***Светлана Воробьева:*** Иртә тимер быуаты дәүерендә, атап әйткәндә, б.э. IV быуатында Көньяҡ Уралда йәшәгән ҡәүемдәрҙең башҡа төбәктәр менән сауҙа бәйләнештәре булыуына дәлил итеп Өфө территорияһында табылған Рим тимер тәңкәләрен килтерергә була. Уларҙың береһе Рим императоры Бөйөк Константин I, икенсеһе - Констанц II хакимлыҡ иткән осорҙа һуғылған. Өфө биләмәһендә - Дудкин торағы-III ҡомартҡыһында ғәрәп хәлифәтендә һуғылған тәңкә табылған, унда күфә (боронғо ғәрәп) яҙмаһы стилендәге хәрефтәр бар, был тәңкә ҡатын-ҡыҙ сулпыһына тағылған биҙәүес итеп ҡулланылған. Күфә тәңкәһе VIII быуатта һуғылған.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Эйе, ошондай артефакттар Көньяҡ Уралда, атап әйткәндә, Өфө ярымутрауында йәшәгән ҡәбиләләрҙең башҡа төбәк халыҡтары менән тауар-аҡса мөнәсәбәттәре булыуын раҫлап тора.

***Илдар Аҡбулатов, тарих фәндәрек кандидаты, археолог, ӨФТУ-ның Бөрө филиалы доценты:*** Урал төбәгендә, бигерәк тә Көньяҡ Уралда, төрлө ҡаҙылма байлыҡтарҙың күп булыуы тышҡы донъяға, бынан ситтә йәшәгән халыҡтарға боронғо дәүерҙәрҙән бирле билдәле булған. Улар бында төрлө тауарҙарҙы - ҡырағай йәнлек тиреләренән алтынға тиклем - үҙҙәре килтергән әйберҙәргә алыштырып йә иһә һатып алып була икәнен белгән, үҙ илдәрендә һуғылған аҡса менән сауҙа иткән. Шуға күрә Башҡортостан территорияһындағы ҡомартҡыларҙа боронғо металл тәңкәләр йыш табыла.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Көньяҡ Урал төбәгендә сауҙа итеүҙең һәм етештереү көстәренең йылдам үҫә барыуы матди байлыҡтарҙың арта барыуын тәьмин итә, ә был яугирлыҡтары менән Азия далаларында дан ҡаҙанған баҫҡынсы күсмә ҡәбиләләрҙе ымһындарып тора. IV-V быуаттарҙа, "Халыҡтарҙың бөйөк күсеше" тип аталған эпохала, хәҙерге Башҡортостандың үҙәге - Өфө ярымутрауы һәм уға йөҙәр саҡрым йәнәш булған территориялар археологияла турбаҫлы мәҙәниәте тип аталған ҡәүемдәрҙең атлы яугирҙары тарафынан баҫып алына.

***Светлана Воробьева:*** БДМУ биләмәһендәге ир-ат ҡәберендә бик ҡыҙыҡлы артефакт табылған - ул боронғо яугир кейеп йөрөгән тимер күлдәк - һайман ҡалдығы, яҡынса VI-VII быуаттар тирәһендә яһалған була, Башҡортостан территорияһында табылған беренсе һайман. Шулай уҡ désинститут биләмәһендә һәм "Өфө-II" ҡомартҡыһындағы ирҙәр ҡәберҙәренән йәйәгә беркетелә торған һөйәк пластинкалар табыла. Ул замандағы ҡала кешеләре яуҙа ҡулланған һуғыш ҡоралы - тура ҡылыс ҡалдығы ла археологтарҙың иғтибарын йәлеп итә.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 37-се һанда).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Башҡортостан - умартасылыҡтың классик иле, бында солоҡсолоҡ бик борондан сәскә ата. Ил иҡтисадында солоҡсолоҡтоң ҙур роле тураһында башҡорттарҙың булғарҙар хакимлығында булған заманында ла, һуңынаныраҡ, Рус подданныйлығына күскәс тә яһаҡты баллата түләү фактынан сығып та һығымта яһарға мөмкин. 1627 йылда яҙылған "Ҙур Һыҙма китабы"нда "башҡорттарҙың аҙығы - бал, йәнлек һәм балыҡ" тип билдәләнә. XVII һәм XVIII быуаттарҙағы барлыҡ беҙгә билдәле башҡорттарҙың аҫаба ерҙәренә припущенниктарҙы индергәндәге йәки уларҙы оброкка биргәндәге документтарҙа теге йәки был формала "солоҡ биләмәләре" менән файҙаланыу хоҡуғы билдәләнелә. Үҙҙәренең солоҡ ерҙәрендә башҡорттар ҡырағай бал ҡорттары эйәләшә торған эсе ҡыуыш ағастарҙы һәм яһалма солоҡтарҙы - ағасты соҡоп яһалған солоҡтарҙы айырған. Эсе ҡыуыш ағастар ҙа, яһалма солоҡ кеүек үк, шәхси милек булып торған һәм уларға тамға һалынған.

Солоҡсолоҡ менән Башҡортостандың урманлы барлыҡ территорияһында ла шөғөлләнгәндәр. Солоҡсолоҡтоң күләме хаҡында ҡайһы бер башҡорттарҙың 100-әр солоғо булыуынан сығып та фекер йөрөтөргә мөмкин. 1716 йылда ялланыу тураһындағы яҙмаларҙың береһендә, Ҡаҙан даруғаһы татары Йылан олоҫо башҡортонан алған аҡса өсөн уның аҫаба ерендәге урманда 600 солоҡ эшләргә тейешлеге күрһәтелгән. "Ырымбур губернаһының географик лексиконында" П. И. Рычков: "Башҡортостанда ике мең йәки унан да күберәк солоҡ тотҡан хужалар аҙ түгел, улар шуның менән үҙҙәренә һиҙелерлек килем ала. Башҡортостанда йылҡы һәм ҡортсолоҡ заводтары иң яҡшы һәм килемле продукттар сығанағы, тиергә мөмкин", - тип яҙа. XVIII быуаттың беренсе яртыһында солоҡҡа 10 тин хаҡ ҡуйыла, ә ҡорттары булған солоҡ 1 һум тора.

Башҡорттар яһаҡты баллата түләгәс, уларҙың солоҡ биләмәләренә ҡыҙыҡһыныуы ла аңлашыла. Шуға күрә ҡайһы бер документтарҙа припущенникка йәки арендаторға "иҫке солоҡтарҙы ябыу һәм ағастарҙы файҙаланыу", "ағасҡа менеп балды һыҙырып алыу" рөхсәт ителһә, икенселәрендә "яңы солоҡтар яһау"ға рөхсәт бирелә, ә "иҫкеләрендә уның эше (ҡыҫылышы) юҡ" тип яҙыла. Өсөнсөләрендә "балды алмаҫҡа. Тағы ла баллы ағас ҡыуышы тапҡанда, ундағы балды ла беҙ булғанда ғына алырға" тиелә. Хатта бик йыш ҡына "үҙемдең ерҙәремде бирҙем, ә солоҡсолоҡ биләмәмдә уның эше (ҡыҫылышы) юҡ" тиелә.

Башҡорттарҙың көнкүрешен тикшереү буйынса эшмәкәрлегем ваҡытында уларҙа солоҡсолоҡ, утар умартасылығы (пасечные) һәм баҡсаларҙа умарта тотоу таралғайны. Ул ваҡытҡа солоҡсолоҡ урмандарҙы ҡырҡыуға һәм башҡорттарҙан ҙур урмандарҙы тартып алыуға бәйле XVIII быуат менән сағыштырғанда күпкә кәмегәйне. Шуға ҡарамаҫтан, XIX быуатта ла солоҡсолоҡ башҡорттарҙа юғары баһалана ине әле. Сөнки ҡайһы бер ваҡыттарҙа башҡорттар, урман дачаларын һатҡанда ла, уларҙа солоҡтар менән файҙаланыу хоҡуғын үҙҙәрендә ҡалдырған һәм яңы хужалар, һатып алыу килешеүенә ярашлы, башҡорттарҙың солоғо булған ағастарҙы ҡырҡа алмаған.

**(Дауамы бар).**

*✓ Ер аҫтында ятҡан байлыҡтарыбыҙ республикабыҙға, районыбыҙға, ауылдарыбыҙға, ошо ерҙә йәшәгән кешеләргә хеҙмәт итергә тейеш. Быны өсөн инвесторҙар менән төҙөгән килешеүҙә барыһы ла әйтелергә тейештәр.*

# ЯҢҒЫҘ ҠАРҒА

## йәғни Йәштәр ауылдарға

**Гәзиттең быйылғы 11-се һанында (27 март) Хәйбулла районының Әбделнасир ауылынан сыҡҡан йәштәрҙең "Өфө - Әбделнасир араһы, йүгереп кенә бараһы..." тигән әңгәмәһе баҫылды. Унда ошо ауылда тыуып үҫеп, Өфөлә төйәкләнгән Альмира Ҡолдәүләтова-Юлдыбаева, Айнур Ғүмәров, Илдар Ғәбитов, Гөлсәсәк Хәйруллина-Фәйзуллина, Айгөл Миңнуллина ҡатнашып, уларҙың фекерләшеү ҡоро гәзит уҡыусылар тарафынан йылы ҡабул ителгәйне.**
**Хәйбулла районының Йәнтеш ауылы ир-уҙаманы Булат Ильяс улы Торомтаев та ошо әңгәмәгә, ғөмүмән, хәҙерге ауыл проблемаһына ҡарата үҙ фекерҙәрен белдерергә булды. Булат Ильяс улы Өфө авиация институтын тамамлаған. Хәйбулла РТП-һында хеҙмәт иткән, Атингән ауылы хакимиәте башлығы булып эшләгән, хәҙер хаҡлы ялда.**

**Булат Ильяс улы, Хәйбулла йәштәренең әңгәмәһен уҡығандан һуң шундай уйҙарға киләһең: йәштәр бөтөнләй икенсе төрлө фекерләй, тормошҡа ҡараштары башҡаса. Беҙ шул тиклем артта ҡалғанбыҙмы икән? Шулай ҙа ошондай йәштәрҙең булыуы киләсәккә өмөт уята. Һеҙҙең тәүге тәьҫораттар нисек булды?**

- Әбделнасыр ауылын яҡшы беләм, шул ауылдан сыҡҡан йәштәрҙең фекерҙәре һоҡландырмай ҡалманы. Беҙ барыбер ҙә совет осоронда тәрбиә алғанбыҙ һәм шул дәүер ҡалыптарынан әле булһын азат түгелбеҙ. Уларҙың бигерәк тә ауылдан Өфөгә барып, туған телдәрендә һөйләшергә өйрәнеүҙәре көтөлмәгәнсә яңылыҡ беҙҙең өсөн. Ҡасандыр, киреһенсә, беҙ ауылдан ҡалаға барып русса һөйләшергә өйрәнә инек. Элек беҙҙең район тураһында республика кешеләре саман өйҙәрҙә йәшәүсе артта ҡалған район тип беләләр ине. Хәҙер иһә беҙҙең Хәйбулла тураһында улай тип әйтеп булмай. Әгәр ҙә артта ҡалған булһаҡ, шундай йәштәребеҙ ҙә килеп сыҡмаҫ ине.

**Әңгәмәлә Айнур Ғүмәров: "Бына һеҙ, Әхмәр ағай, һеҙҙең быуын үҙегеҙгә бирелгән күп кенә мөмкинлекте ҡулығыҙҙан ысҡындырғанһығыҙ. Мин хәҙер ҡырҡ йәшлектәргә һәм унан кесе йәштәгеләргә генә иҫәп тота алам..." - тип миңә үҙенең дәғүәһен дә белдерҙе. Беҙ, бер быуын кешеләре, Айнур әйткәнсә, ниндәй мөмкинлекте ҡулыбыҙҙан ысҡындырҙыҡ икән? Беҙҙең быуын нимә эшләй ала ине?**

- Ҡатмарлы һорау. Ельцин власҡа килгәс: "Күпме йота алаһығыҙ, шунсама алып ҡалығыҙ..." - тигәйне. Бәлки, Айнур шул хаҡта әйтергә теләйҙер. Әммә беҙ яңылыш йәшәнек тип әйтә алмайбыҙ, Башҡортостан ул осорҙа Мортаза Рәхимов етәкселегендә бығаса күрелмәгән уңыштарға өлгәште. Беҙҙең Хәйбулла районын ғына алғанда ла, бик күп эштәр башҡарылды, беҙ бында зарлана алмайбыҙ.

Социалистик идеология юҡҡа сыҡҡас, бер беҙ генә түгел, тотош ил халҡы баҙар шарттарында йәшәргә яраҡһыҙ булып сыҡты. Тик айырым кешеләр генә яңы шарттарға яраҡлашып йәшәп китә алды. Ауылда ла бөтә кеше лә фермер булып китә алманы, был мөмкин дә түгел ине. Шуның һөҙөмтәһендә эшһеҙлек барлыҡҡа килде. Беҙҙең районда тау-байыҡтырыу комбинаттары булғас, элекке колхозсылар шунда ағылды. Күп кенә кешеләр ауылдарҙан район үҙәктәренә, ҡалаларға, ҡала янындағы ҡасабаларға күсенә башланы. Һуңғы ваҡытта район үҙәктәренең киңәйеп, ҙурайып китеүе тап шул сәбәпкә бәйле.

**Республика етәксеһенә, бер һүҙ менән әйткәндә, "бабай"ға һалынып өйрәнеүебеҙ ҙә быға булышлыҡ иткәндер инде...**

- Партком секретарҙары, коммунистар беҙҙе әйҙәргә һәм әйҙәгәнгә күндереп өйрәтеп, үҙаллылығыбыҙҙы юҡҡа сығарҙы. Минең ер, минең биләмә тигән тойғо ла юҡҡа сыға яҙҙы. Элек ер өсөн йәнен аямаған атай-олатайҙарҙың ейәндәренең күбеһенә, шулай итеп, пай ерҙәре лә кәрәкмәй булып сыҡты. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, совет осоронда хыял ғына булған эштәрҙең башҡарылыуы хәлебеҙҙең шөкөр икәнлеген дә раҫлай. Һаман да совет ҡоролошо һаҡланһа, беҙҙең Йәнтеш ауылына асфальт, газ килеп етер инеме икән, әйтеүе ҡыйын. Районыбыҙҙың күтәрелеүендә Фәтих Ҡаҙаҡбаевтың да роле ҙур булды. Үҙәк телевидение аша Бүребайҙа шахтерҙарҙың саман өйҙәрҙә йәшәүен күрһәтеүҙе ойоштороу ғына беҙҙең төбәккә айырата иғтибарҙы барлыҡҡа килтерҙе.



*Ауыл ерендә кеше йәшәргә, ерҙе эшкәртергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта технологиялар үҫеше дауам итә һәм элеккесә ике мең гектар ерҙе етмеш кеше эшкәртмәйәсәк. Тимәк, ҡалған кешеләр үҫтереп алған уңышты эшкәртеү, төрлө тауар формаларына еткереү менән, өсөнсөләр сауҙа менән шөғөлләнергә тейештәр. Ауыл совет осорондағы һымаҡ, сеймал етештереү менән генә булһа, әллә ни алға китә алмай ҙа.*

Хәйбулла районының әлеге хакимиәте башлығы Рөстәм Шәрипов үҙенең кеселекле, ололоҡло мөнәсәбәте менән район халҡының һөйөүен яуланы, ул кешене оло сабырлыҡ менән тыңлай белә, хәленән килгәнсә ярҙам итергә тырыша.

**Мин 1988 йылда самолет менән Өфөнән Аҡъярға осоп килдем. Ул саҡта бергәләп Ырымбур өлкәһенең Гай, Орск ҡалаларына сәйәхәт яһағайныҡ. Ул саҡтағы Хәйбулла менән хәҙергеһе араһындағы айырма - ер менән күк араһы. Хәҙер һеҙҙә газһыҙ ауыл юҡ, әллә ҡасан уҡ телефон бәйләнеше үткән. Хәйбулланың алға китеүендә субъектив факторҙарҙан тыш, тағы ла ниндәй объектив шарттар булышлыҡ итте тип уйлайһығыҙ?**

- Объектив факторҙар ҙа күп. Элек мәғдәнселек Бүребайҙа ғына үҫешһә, хәҙер, "Башмедь" асылғандан һуң, кисәге колхозсылар, совхоз эшселәре эш башлап, ҡулдарына арыу аҡса төшөрә башланы, тормошон бөтәйтте. Ошоноң менән бер рәттән, райондың социаль йөҙө үҙгәрҙе. Ҙур аҡса ҙур мөмкинлектәр тыуҙырҙы. "Башмедь"та тик Хәйбуллалар ғына хеҙмәт итмәй, Урал аръяғы ауылдары өсөн дә эшһеҙлектән ҡотолоу мөмкинлеге бирҙе ул.

**Ә экология мәсьәләһенә нисек ҡарайһығыҙ?**

- Хәҙер заман ныҡ үҙгәрҙе, фән үҫеште. Шуға күрә тирә-яҡ мөхиткә зыян килтермәҫлек итеп рекультивация эшләргә лә була. Тәүге осорҙа был мәсьәләгә иғтибар бирмәнеләр. Ер аҫтында ятҡан байлыҡтарыбыҙ республикабыҙға, районыбыҙға, ауылдарыбыҙға, ошо ерҙә йәшәгән кешеләргә хеҙмәт итергә тейеш. Быны өсөн инвесторҙар менән төҙөгән килешеүҙә барыһы ла әйтелергә тейештер.

**Ниндәй шарттар, мәҫәлән?**

- Беренсенән, мәғдәнселек эшенә, асылда, урындағы халыҡты йәлеп итеү, экологик талап, республика, район бюджетына күсереләсәк сумма мәсьәләләре. Шул уҡ ваҡытта ошоларҙың береһе генә инвестор тарафынан үтәлмәгән осраҡта бер яҡлы килешеүҙе өҙә алыу шарты һ.б. Хәҙер беҙҙең райондан мәғдәнселек предприятиеларында эшләүселәр үҙ ауылдарында, район үҙәгендә, ҙур ҡалалар янында заманса йорттар ҡалҡыта башланы, уларҙың Сибай, Өфө ҡалаларында фатир һатып алырлыҡ аҡсалары бар. Күҙ алдына килтереп ҡараһаҡ, әгәр ҙә колхоз-совхоздар һаман да һаҡланған булһа, был хәлдәрҙе йәштәр төштәрендә лә күрә алмаҫ ине.

**Ваҡытында Баймаҡ районының хакимиәт башлығы булып эшләгән Ниғмәтуллин Әкрәм Әғзәм улының бер фекере оҡшағайны: "Ер аҫты байлыҡтары беҙгә ер өҫтөндә эшләргә, ауыл хужалығын күтәрергә ярҙам итергә тейеш..."**

- Дөрөҫ, әгәр ҙә ер аҫты байлыҡтары бар икән, ул халыҡҡа ла, дәүләткә лә ярҙам итергә тейеш. Икенсенән, иртәмеһуңмы ул байлыҡ эшкәртеләсәк, шуға күрә мөмкин тиклем үҙебеҙгә ул байлыҡты файҙалы, тәбиғәткә зыянһыҙ итеп файҙаланырға кәрәк. Миҫалға ғәрәп илдәрен генә алайыҡ, уларҙа бит ер аҫтында ятҡан "ҡара алтын" иҫәбенә һәр тыуған балаға аҡса түләнә тиҙәр. Советтар Союзы тарҡалғандан алып Ҡаҙағстан да ер аҫты байлыҡтары иҫәбенә ныҡ күтәрелде. Улар Европа, Америка инвесторҙары менән дөрөҫ итеп килешеү төҙөп, ул килешеүҙәрҙең үтәлешен талап итә алды. Беҙҙең районда ла мәғдәнселек предприятиеларынан район бюджетына аҡса күсә башлағайны, социаль мәсьәләләрҙе хәл итеү мөмкинлектәре артты.

**Иҡтисад фәндәре докторы, академик Мәзһәр Насип улы Иҫәнбаев (ауыр тупрағы еңел булһын!) колхоздарҙың прогрессив хужалыҡ итеү формаһы булыуы хаҡында күп тапҡырҙар сығыш яһаны. Ул колхоз тип аталамы, артелмы, кооперативмы, предприятиемы - ауылды һаҡлауҙың иң прогрессив юлы барыбер ҙә күмәкләп эшләүгә ҡайтып ҡала. Сөнки фермерлыҡ был йәһәттән үҙен тулыһынса аҡлай алманы, шулай түгелме? Ундай хужалыҡты кире тергеҙеп булмаһа, ауыл халҡын нисек итеп эш менән тәьмин итеп була тип уйлайһығыҙ?**

- Колхоздар шәхси хужалыҡта эшләүселәрҙең берләшеүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Тимәк, ауыл халҡы шул ваҡытта яңғыҙ ҡарғаның яҙ килтермәҫен аңлаған. Алтмышынсы йылдарға тиклем күмәк хужалыҡта эшләүселәр трудоденгә эшләп, аҡса ла күрмәне, әммә шул саҡта ла колхозды ташламаны. Бында ла фәтеүә бар, сөнки тап ошондай хужалыҡ ярҙамында ауыл халҡының тамағы туйып ҡалды.

Ауылдарҙы колхоздар ныҡ күтәрҙе. Заманында беҙҙең колхоз миллионер булды, күрше Ивановкала Ленин исемендәге колхоз да аяғында ныҡ баҫып торҙо. Кешегә аҡса түләнеләр, халыҡтың күҙе асылып ҡалды, йәштәр шуның һөҙөмтәһендә махсус урта, юғары белем алырға ҡалаларға йүнәлде. Минеңсә, ауыл хужалығын яңынан тергеҙеү өсөн төрлө йүнәлештәге тауар етештереүселәрҙе берләштереп, уларҙың тауарын һатып, килем алыуҙы яйға һалырға кәрәктер. Ауыл тауар етештерә ул, әлегә уны һатып, килем алыу мәсьәләһе генә аҡһай. Әлбиттә, көслө фермерҙар бар, уларҙы инҡар итеп булмай, әммә улар барлыҡ ауыл халҡын эш менән тәьмин итә генә алмай. Әле байтаҡ ҡына ерҙәр эшкәртелмәй ята. Шуға күрә барыбер ҙә коллектив формаға ҡайтырға тейешбеҙҙер. Ваҡытында "Матрай", "Сиҙәм" совхоздары көслө саҡта уларҙа эшләүсе комбайнсылар Социалистик Хеҙмәт Геройы булдылар, тимәк, башлап ебәрергә генә кәрәк. Яңыраҡ бер фермерҙың эшләгән яланына барып, уңышты гектарынан күпмешәр алыуын һораштым. 11 центнер, тинеләр. Ә бит ваҡытында беҙ шул уҡ баҫыуҙа гектарынан 30 центнер ала торғайныҡ. Хәҙер технологияны үтә ябайлаштырып бөттөләр.

**✓ *Себерҙәге йәштәребеҙҙе лозунгылар менән түгел, лайыҡлы эш хаҡы алырлыҡ эш урындары булдырып ҡына ҡайтара аласаҡбыҙ. Әле Сибайҙың карьерын арендаға алыусылар арыу эш хаҡы түләргә итәләр, тигән һүҙҙәр ишетелде.***

# ЯҘ КИЛТЕРӘМЕ,

## кире ҡайта ҡалһа…

- Силсәүиттә эшләгәндә Рөстәм Рәүҙәт улы беҙгә лә, Ырымбур өлкәһе менән сиккә барып, баҫыуҙарҙы сағыштырып ҡарағыҙ, тип әйткәйне. 90-сы йылдар башында колхоз-совхоздар тарҡала башлағас, Ырымбурҙар был эшкә йылдам тотоноп, совет осоронда һатып алынған техника ярҙамында фермер хужалыҡтарын нығытып өлгөрҙөләр. Күрше генә Ырымбур өлкәһенең Башбүре (Үрге Наҙарғол) тигән ауылда минең ҡәйнештен Т-150 тракторы, "Камаз"ы булды. Улар миллион һумдар торған техниканы кредитҡа алды, аҡса үҙгәреп киткәс, уларҙың хаҡтары тиндәргә генә тороп ҡалды. Ә беҙ иһә техникалар ҡыйралып бөткәнсе колхоз-совхоздарҙы һаҡларға тырыштыҡ. Өҫтәүенә, "Беҙ колхоз-совхоздарҙы һаҡлап ҡалдыҡ", тип маҡтанып һөйләп йөрөнөк. Әммә тормош үҙенекен итте.

**▸ Айнур Ғүмәров Хәйбулла йәштәре менән әңгәмәлә деурбанизация тураһында һүҙ алып бара. Әгәр ҙә ошо хәрәкәт башланып, халыҡ ауылдарға ағылһа, үҙебеҙҙекеләр кире ҡайтырмы икән, нисек уйлайһығыҙ?**

- Иң мөһиме, ауылдарҙа эш урындары барлыҡҡа килтерергә кәрәк. Эш урыны булмаһа, улар ҡайтмаясаҡ, бында буй еткергәндәр һаман да китеүен дауам итәсәк. Әйтәйек, шул уҡ "Башмедь"тә 80 мең алып йөрөгән йәш кеше бындағы 30 мең һумға ҡайтырмы? Шул уҡ ваҡытта унда эшләүселәр араһында: "Элекке колхоздар булһа, мин 20-30 мең эш хаҡына ҡайтыр инем", - тиеүсе оло йәштәгеләр ҙә юҡ түгел. Ни генә тимә, әлләни байып китмәһәләр ҙә, һәүетемсә, тыныс шартарҙа эшләүсе колхоздарҙы һағыныусылар юҡ түгел. Кисә генә гәзиттән уҡып ултырҙым: беҙгә килеп, ауылдарҙан өй, ер һатып алып, шунда йәйҙәрен килеп йәшәүсе мәскәүлеләр ҙә бар икән.

**▸ Айнур фән үҫешенә бәйле тиҙләктең артыуын деурбанизация сәбәптәренең береһе тип иҫәпләй. Ә бына һеҙ тағы ла нindәй сәбәптәрҙе атар инегеҙ?**

- Һуңғы йылдарҙа ауыл менән ҡала араһындағы айырма юғала бара. Ауыл өйҙәрендә лә санузелдар, ванна, бәҙрәф ҡуйыла. Элек иһә беҙҙең атай-әсәйҙәр ауыл тормошоноң ыҙалығын татып үҫкәс, балаларының ҡалала йәшәүҙәрен теләне, үҙҙәре һымаҡ ыҙаламаһын тип уйланы. Хәҙер иһә улайтып уйлаусылар юҡ. Әгәр ҙә, Айнур әйтмешләй, тиҙ йөрөшлө поездар, канат юлдар буйлап елдереүсе машиналар барлыҡҡа килһә, ауылдан ҡалаға йөрөп эшләүселәр күбәйәсәк.

**▸ Тағы ла бер мөһим, йәндә әсендерә торған проблема: хатта тәпкөл ауылдарҙа ла балаларҙың теле русса асыла. Был мәсьәләгә ҡарашығыҙ нисек?**

- Беҙ үҫкәндә ауылыбыҙҙа телевизор күрһәтмәне. Балаларҙың теле русса асылыуында иң беренсе нәүбәттә телевизор сәбәпсе булып тора. Икенсенән, телевизорға тоташтырып уйнай торған приставкалар барлыҡҡа килде. Хәҙер иһә сабыйҙар ҡулына "ныйпафон" тотоп тыуа.

**▸ Әммә ошо урында Әбделнасыр балаларының Өфөгә барып, башҡортса өйрәнеүҙәре ҡыҙыҡ бит…**

- Уларҙың Сиҙәм мәктәбендә русса уҡығандарын беләм. Аҡъярҙа ла шул уҡ хәл күҙәтелде.

**▸ Иғтибар иткәнегеҙ бармы, хәҙерге йәштәрҙең күбеһе беҙҙең һүҙҙәргә, теләк-кәңәштәребеҙгә ҡолоп кенә ҡарай. Нишләп шулай икән ул?**

- Беҙҙе бишектән алып, октябряттарҙан башлап, "ул ярамай, был ярамай" тип күберәк тыйып тәрбиәләнеләр. Хәҙер килеп беҙ ҙә үҙ балаларыбыҙҙы тыйып маташабыҙ һәм шундай ҡолҡо хәлдәргә ҡалабыҙ. Хәҙер беҙҙең Йәнтеш ауылында ла өйөндә генә ултырып, төрлө рәсми компанияларға хеҙмәт итеүселәр, 100 меңдән кәм булған апаруҡ ҡына хеҙмәт хаҡы алыусылар барлыҡҡа килде. Уларҙы нимә тип әйтеп тыяһың инде.

**▸ Беҙҙең атай-әсәйҙәр юғары белем алыуыбыҙҙы теләһә, хәҙер иһә тулыҡынсыны тамамлап, махсус уҡыу йортонда нindәй һөнәр алыуҙы өҫтөн күрәләр. Шулай ҙа ауыл кешеһенә юғары белем кәрәкме һәм ни өсөн кәрәк тип уйлайһығыҙ?**

- Хәҙерге юғары технологиялар менән эш итер өсөн юғары белем кәрәк ул. Шул уҡ ваҡытта станокта эшләр өсөн дә махсус белем кәрәк. Элекке кеүек, унды бөтһәм, колхозда көтөүсе, һауынсы булып эшләрмен әле, тип кенә йәшәп булмай. Махсус белемме, юғарыһымы, үҙ эшеңдең оҫтаһы булыр өсөн кәрәк.

**▸ Тағы ла "Уңышлы бизнес - коллективта дөрөҫ итеп ҡоролған мөнәсәбәт ул" тип тә әйтәләр. Ә бит шундай мөнәсәбәттәрҙе короу өсөн дә, хатта балаңды тәрбиәләү өсөн дә юғары белем талап ителә торғандыр. Шул уҡ ваҡытта махсус белемле кеше алған йүнәлеше буйынса ғына фекерләй алһа, юғары белем кешене төрлө йүнәлештә, төрлө аспекттарҙа фекерләргә ярҙам итә.**

- Берҙәм дәүләт имтиханы беҙҙең ауыл балаларына ла донъяның, илебеҙҙең, республикабыҙҙың төрлө юғары уҡыу йорттарына инеү мөмкинлеге бирҙе. Башҡорт дәүләт медицина университетына уҡырға инеү еңел түгел. Бер урынға егерме самаһы кеше тура килде бер йылда. Сибай гимназияһы уҡыусылары конкурстан үтә алмайынса, Мәскәүҙең Пирогов исемендәге медицина университетына геүләп барып инеп киттеләр. Тәүге осорҙа Берҙәм дәүләт имтиханы беҙҙең балаларға ауыр бирелгәйне, хәҙер ҙур балдар йыя башланылар.

**▸ "Юлдаш" радиоһына интервью биргәндә "Институтта уҡыу осорона ҡарата нindәй үкенестәрең ҡалды?" тигән һорауға бер нисә телде өйрәнеп ҡалмауым үкендереүе хаҡында әйткәйнем. Һеҙ күп тел белеүҙең әһәмиәтен нимәлә күрәһегеҙ?**

- Күп тел белеүҙең кешегә күп мөмкинлектәр биреүе хаҡында әйтеү артыҡтыр. Инглиз, немец телдәрен, ғәрәп, ҡытай телдәрен белеү илебеҙҙең ошо илдәр менән төрлө йүнәлештәге бәйләнештәрен урынлаштырғанда ярҙам итәсәк, хатта ошо йүнәлештә үҙеңдең һөнәреңде лә табырға мөмкинһең. Кеше өҫ-дүрт телде өйрәнеп алһа, ҡалғандары еңел бирелә тиҙәр.

**▸ Журналист булараҡ, шуны әйтәм: күп телде белгән журналистың яҙған мәкәләһен уҡыһаң, уның фекерләүенең бөтөнләй башҡаса булыуын тояһың.**

- Минең паркинсон сирен дауалау буйынса махсуслашҡан Резеда һеңлем докторлыҡ диссертацияһын Мәскәүҙә инглиз телендә яҡланы. Ул атайымдың ҡустыһының ҡыҙы. Резеданың бер туған һеңлеһе Мәскәүҙә инглиз, ҡытай телдәре буйынса юғары уҡыу йортон тамамлап, ҡытай теле буйынса махсуслашты.

**▸ Резеданең бер нисә сығышын интернетта ҡараным, ул хатта башҡорт телендә лә сеанстар үткәрә…**

- Уларға интернатта тәжрибәле уҡытыусы дәрес бирҙе. Һеңлеһенең дә, үҙенең дә инглизсә яҡшы белеүе уҡытыусыларынан килә. Ә махсус белемде Резедә Америкаға барып уҡып алды.

**▸ Нисек уйлайһығыҙ, илебеҙҙә үҙгәртеп ҡороуҙар кәрәк инеме икән?**

- Үҙгәртеп ҡороуҙарҙың күп кенә ыңғай яҡтары ла, кире яҡтары ла бар. Дөрөҫ булһа, Ельцин халыҡ-ара фондтан аҡса һорағанда Рәсәйгә бик күп шарттар үтәүҙе, шул иҫәптән колхоз-совхоздарҙы бөтөрөүҙе талап иткәндәр. 90-сы йылдар башында колхоздарҙа йыйып алынған уңыш ягыулыҡ-майлау сығымдарын да ҡапламаны, йәғни хужалыҡтарҙы ошо юл менән юҡҡа сығарҙылар.

**▸ Стратегик яҡтан ҡарағанда дәүләт ауылды ҡаланы аҙыҡ-түлек менән тәьмин иткән өсөн генә түгел, демографик мәсьәләне хәл иткән өсөн дә дотацияларға тейеш. Нимә генә тимә, ауыл хужалығы рентабелле эшләй алған тармаҡ түгел, шулай бит?**

- Шулай, сөнки ҡалаларҙа ғаиләләге балаларҙың һаны, асылда, икәүҙән артмай, был осраҡта демографик үҫеш 0-гә тигеҙ, йәғни ике бала ата менән әсәне алмаштыра ғына. Хәҙер иһә хатаны төҙәтер өсөн Әсәлек капиталы ла түләп ҡарайҙар, тик демографик шартлау күҙәтелмәй.

**▸ Тимәк, демографик хәл яҡшырһын өсөн емерелгән ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырырға кәрәк, тиһегеҙме?**

- Тап шулай. Беҙҙең заманда балалар аҡсаһын да йүнләп түләмәнеләр, әммә ауылда балалар эркелеп йөрөнө.

**▸ 20-30 йылға алға ҡараш ташлағанда ауылдарҙың киләсәген нисегерәк күҙаллайһығыҙ?**

- Барыбер ауыл ерендә кеше йәшәргә, ерҙә эшкәртергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта ерҙә һөрмәйҙәр, ашлама индермәйҙәр, минималь сығымға уңыш та минималь була инде. Күмәк хужалыҡ булғанда һәр кеше үҙенең эшен алып бара һәм шуның өсөн яуаплы була, ә фермер барыһы өсөн дә яуаплы була алмай, дөрөҫөрәге, бығауның ҡулы етмәй, барыһын да белеп тә бөтә алмай. Элек колхоз ваҡытында инкемдәр бригадир, управляющий, инженер, зоотехник булып эшләгән - шуларҙың эше бара.

Колхоз-совхоздар ваҡытында ягыулыҡ-майлау материалдары арзан булды. Минеңсә, ауыл хужалығын күтәрер өсөн дәүләт тарафынан хаҡтарҙы көйләү талап ителә.

**▸ Бер тапҡыр Хәйбулла районы хакимиәте башлығы булып эшләгән Рөстәм Хәйруллин менән баҫыуҙар буйлап йөрөнөк. Юлыбыҙҙың бер яғында үҫкән Ырымбур фермерҙары игененең беҙҙеке менән сағыштырғанда күпкә яҡшыраҡ булыуын район хужаһы уларҙа иген үҫтереү технологияһының теүәл үтәлеүенә бәйләп аңлатҡайны. Был йәһәттән һеҙҙең фекерегеҙ нисек?**

технологиялар үҫеше дауам итә һәм элеккесә ике мең гектар ерҙе етмеш кеше эшкәртмәйәсәк. Тимәк, ҡалған кешеләр үҫтерел алған уңышты эшкәртеү, төрлө тауар формаларына еткереү менән, өсөнсөләр сауҙа менән шөғөлләнергә тейештер. Ауыл совет осорондағы һымаҡ, сеймал етештереү менән генә булһа, әллә ни алға китә алмай ҙа.

**▸ Себер тураһында күп һөйләйбеҙ, бер мәл ундағы йәштәрҙе республикаға ҡайтарыу хаҡында һүҙ сыҡты ла, онотттолар. Беҙҙең ауылдарҙы күтәрер потенциалдың иң ҙур өлөшө Себерҙә. "Себер үҙебеҙҙеке" тип тә йырлайҙар хәҙер. Себер беҙҙеке булыу менәнме ни, Себерҙә тыуған балалар үҙебеҙҙеке булмағас. Мин Себерҙә тыуып үҫеп, аҙаҡ Башҡортостанға ҡайтып, башҡортса һөйләшеп, опера һәм балет театрында эшләп йөрөгән бер генә егетте беләм: ул Буранбай Ишемғолов. Ә һеҙҙең Себер хаҡында нindәй фекерҙәрегеҙ бар?**

- Бер танышым Себер ҡалаһында йәшәгән балаларына ҡунаҡҡа барғанда Яңы йыл төнөндә урамға сыҡҡан һәм гармун тартып, башҡортса йырлашып, бейешеп йөрөгән йәштәрҙе күреп, шаҡ ҡатҡан. Ә бит бындай күренештәр хәҙер беҙҙең ауылдарҙа юҡ тиерлек. Тимәк, ауылдар Себергә күскән. Бер ҡоҙам Себерҙәге эш хаҡы менән "Башмедь"тыҡын сағыштырып ҡарап, икеһенең дә тигеҙ икәнлеген белгәс, ҡайтырға ҡарар итте. Бынан шундай һығымта яһарға була: Себерҙәге йәштәребеҙҙе лозунгылар менән түгел, лайыҡлы эш хаҡы алырлыҡ эш урындары булдырып ҡына ҡайтара аласаҡбыҙ. Әле Сибайҙың карьерын арендаға алыусылар арыу эш хаҡы түләргә итәләр, тигән һүҙҙәр ишетелде.

**▸ Бынан бер нисә йыл элек Әбйәлил районында Мөшәрип тигән үзбәк йәшәгәйне. Мин уның хаҡында "Шоңҡар" журналында "Башҡортлашҡан үзбәк" тигән мәҡәлә лә яҙып баҫтырҙым. Ул башҡорт ҡыҙына өйләнеп, уның тыуған ауылына килеп урынлашып, тиҙ генә башҡортса һөйләшергә өйрәнә. "Һеҙҙәге мөмкинлектәр беҙҙең үзбәктәргә элекһәме, бында бит сереп байырға була…" тигәйне ул миңә. Ул бер йәй эсендә еләк йыйып, емешен Магнитогорск ҡалаһына алып барып һатып, "Волга" машинаһы һатып алды. Аҙаҡтан туғандары килеп, уны тыуған яғына алып ҡайтып китте. Ситтән килеүселәр беҙгә Хоҙай тарафынан бүләк ителгән мөмкинлектәрҙе күрә, ниңә үҙебеҙ күрмәйбеҙ икән, нисек уйлайһығыҙ?**

- Йырауыы Мөхәммәтйән Ҡаҙаҡбаев үҙенең китабында егерме беренсе йылғы аслыҡта кәбеҫтә, картуф үҫтереүҙәре хаҡында яҙып үтә. Атингәндә йәшәүсе украиндар: "Егерме беренсе йылғы аслыҡта башҡорттар ҡупләп үлде, ә беҙҙе баҡса ҡотҡарып ҡалды", - тип һөйләнеләр. Башҡорттарҙың иһә, кемдең һыйыры булған, улар бирешмәгән. Үзбәктәргә килгәндә инде, улар сауҙа менән йәшәп өйрәнгән. Янырак Сибайҙан Аҡъярға бер үзбәк таксиһына ултырып ҡайтҡайным. Ул: "Беҙ, үзбәктәр, Рәсәй ярҙамында көн күрәбеҙ, беҙҙә һәр бер ғаиләнән бер үзбәк Рәсәйҙә эшләй, шуныһыҙ йәшәй алмаясаҡбыҙ. Бында бер айҙа эшләп алып ҡайтҡан аҡсаға үҙебеҙҙә ярты йыл йәшәй алабыҙ, шул аҡсаға йорттар һалабыҙ", - тине.

Мөкинлектәр бихисап үҙебеҙҙә, эшләргә, лайыҡлы йәшәргә теләк-дәрт кенә булһын. Йомғаҡлап әйткәндә, ауылдарыбыҙҙы һаҡлап ҡалабыҙ тиһәк, күп нәмә үҙебеҙҙән тора.

**▸ Фәһемле әңгәмәгеҙ өсөн оло рәхмәт, Булат Ильяс улы!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Юҡты бар иткән, үлене тере иткән көстәр ҡайһы саҡта, әҙәм заттарына бөтә оҫталыҡтарын һәм маһирлыҡтарын аҙағына саҡлы күрһәтергә теләгәндәй, шундай күркәм йән эйәләрен тыуҙырып ҡуялар.***

Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ

# ИСЕМЕМ – АЛАҠАЙ

(Донъяуи хикәйә)



Әсәйем ете бала тыуҙырып үҫтергән. Шуларҙың береһе - мин. Донъяға өсөнсө бала булып килгәнмен. Тыуғанымда яҡты донъяға йомарланып килеп сыҡмағанмын, ә һыуға шөңгөргә әҙерләнгән кешеләй, ҡулдарымды һоноп, йылы һыу тултырылған ялғашҡа шылып төшкәнмен.

Кендек инәһе вазифаһын башҡарыу өсөн саҡыртылған Ғәлимә инәй, ялғаш эсендә йөҙөп йөрөгән балаға ҡарап-ҡарап торған да, башын артҡа ташлай биреберәк, ҡытырлатып көлөп ебәргән. Ошо көлөү яҡты донъяның тәүге ауазы булғанлыҡтан, мин уны шунда уҡ отоп алғанмын һәм мәңгелеккә үҙ иткәнмен. Әсәйемдең ҡалған балалары ҡытырлатып көлмәне - был минең өсөн генә хас сифат булып һеңеште.

"Балаң еңел тыуҙы, тормошта ла үҙеңә ауыр йөк булмаҫ", - тигән Ғәлимә инәй йөгәнән имен-аман ҡотолоуына ҡыуанып ятҡан әсәйемә ҡарап. Кендегемде оҫта ғына итеп ҡырҡып бәйләгәс, инәйем мине ҡулына алған һәм, өҫкә сөйөбөрәк, ике-өс мәртәбә һикертеп алған. Был күнегеү бик оҡшап ҡалғандыр, күрәһең: мин киң итеп йылмайғанмын, ҡулдарымды сәпәкәйләтеп, кендек инәйемә ҡарап, күҙҙәремде асҡанмын.

"Атаҡ-атаҡ, был мәхлүктең күҙҙәре зәп-зәңгәр бит, - тигән Ғәлимә инәй, минә ғәжәпләнеберәк ҡарап. Әптрәхимдең дә, һинең дә күҙҙәрең күрән бит. Был ни ғәләмәт икән?" "Әптрәхим яғынан күк күҙле нәҫел остары осраштырып ҡуя, шуларға тартҡандыр", - тип яуаплаған әсәйем. "Хәйер, атайымдың күҙҙәре лә, боҙғамы, тоҙғамы оҡшап, күкһелләнеп тора бит", - тип өҫтәгән ул, бер аҙ өнһөҙ ятҡандан һуң.

Ике ҡатындың әңгәмәләшеүен әллә ни тыңларға теләмәгәнмендер мин. Әсе итеп ҡысҡырғанмын да ирендәремде шапылдата башлағанмын. "Ашарға һорай сабый, ашарға", - тип һөйләнә-һөйләнә Ғәлимә инәй мине ике ҡат йүргәккә төргән дә, соланға сығып, иртәнге һөттөң өҫтөнә йыйылған ҡаймаҡҡа сәтәкәй бармағын тығып алған. Ҡаймаҡлы ошо бармаҡты имеп, мин тәүге тапҡыр үҙ-үҙемде туйындыра башлағанмын. "Һыйырыңдың һөтө бигерәк ҡуйы икән, Бибинур, - тип һөйләнгән кендек инәйем, мин уның сәтәкәй бармағын һурған арала. - Күҙ тейеп ҡуймаһын". "Эйе, Ғәлимә апай, шулай. Әллә ни күп бирмәһә лә, һөтө ифрат ҡуйы. Уңдым Алаҡайымдан, бик уңдым".

Әсәйемдең Алаҡай тигәне ала һыйыр булып сыҡты. Быны мин, әлбиттә, үҫә төшкәс кенә аңланым. Ала һыйыр ғаиләбеҙ тормошонда шундай ныҡлы урын алды, быны ни өсөн мин ошо тарихымды шул малҡайға арнарға булдым.

* * *

Бындай ҙа ҡупшы, бындай ҙа ирәбәле, бындай ҙа аҡыллы малды ауыл көтөүе бер ҡасан да күрмәгәндер һәм күрмәҫ тә. Бөгөнгөләй хәтеремдә: ала һыйырҙың атлап китеүҙәрендә үк ниндәйҙер мөһабәтлек, еңеллек һәм нәзәкәтлелек бар ине. Аҡкоштоҡо кеүек оҙон муйынлы ҡыҙҙар баштарын нисектер һауаланыбыраҡ йөрөтһә, башҡа мал-тыуар араһында Алаҡай ҙа үҙен шулайыраҡ тотто. Бөтә көүҙә-ҡиәфәте килешле, мөгөҙҙәренән алып ҡойроҡ остарына тиклемгә бөтә ағзалары ла үҙ урынында ине уның. Минә аҙағыраҡ һыйыр кеүек йүгергән ҡатындарҙы аҙ күрергә тура килмәне, ә бына ыҡсым ҡыҙҙарға оҡшатып, ала һыйырҙай йүгергән бер генә малды ла осратырға насип булманы. Уның хәрәкәттәрендә бәйге йүгеректәренә генә хас сифаттарҙы табып, ғәжәпләнә торғайным мин. Әгәр Алаҡайға уйнатып ҡына тал сыбығы менән һуҡһам, ул, алғы тояҡтарын еңел һәм текә күтәреп, башын айғыр кеүек бөгә биреберәк, ялдарын суртан һырты кеүек дуғаландырып, юртҡан һымаҡ йүгереп киткәнә әле лә иҫемдә.

Юҡты бар иткән, үлене тере иткән көстәр ҡайһы саҡта, әҙәм заттарына бөтә оҫталыҡтарын һәм маһирлыҡтарын аҙағына саҡлы күрһәтергә теләгәндәй, шундай күркәм йән эйәләрен тыуҙырып ҡуялар - һуштан яҙып, ҡолап китерҙәй булаһың. Тик ундай камил йән эйәләре көн һайын тыуып тормай - беҙҙең күптәребеҙгә уларҙы күреп һоҡланыу бәхете тәтемәй. Уралбатыр заманында шундай йән эйәһе йылҡы малы араһында тыуһа, һыйыр малы араһында хасил булған ана шундай маһир йән эйәһе Алаҡай булғандыр.

Ала һыйырҙы нимәһе айырыуса ныҡ биҙәп торҙо һуң? Икеләнмәйенсә әйтә алам: уның күҙҙәре. Һытылырға етешеп өлгөргән ҡара ҡарағат төҫөндә һәм сикһеҙ тәрән ине уның күҙҙәре. Хайуандыҡы түгел, ә аҡыл һәм аң менән һуғарылған кеше күҙҙәре менән бәрәбер булды уның күҙкәйҙәре. Был күҙҙәрҙә мин бер ваҡытта ла ҡурҡыу һәм хәүефләнеү күрмәнем - тик хәлде аңлау һәм уйсанлыҡ ҡына сағылды уларҙа.

Ә керпектәре, ә керпектәре ниндәй ине хайуанҡайҙың! Талҡаҫ күленең көнбайыш ярын биҙәп үҫкән ҡамышарҙы хәтерләтте улар. Берәүһенеке сөм ҡара булып, йоҙроҡтай ҙур күҙенә ниндәйҙер серлелек өҫтәһә, икенсе күҙенең аҫҡы керпектәре, ап-аҡ булып, көләмһөрәү һәм шаянлыҡҡа ишара яһап торҙо.

Ҡолаҡҡыналары ла йәм биреп торҙо уның ҡупшы башына. Башынан нәҙек булып үҫеп сыҡҡан да, әкрен генә киңәйә барып, түңәрәкләнеп бөткәйне улар. Ҡолаҡтары тыш яҡтан ҡыҫҡа ғына ҡара йөн менән ҡапланһа, эстән күгелйемерәк төктәрҙең тырпайып торған көлтәһе менән биҙәлгәйне.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын нурлы күҙҙәре биҙәп торһа, һыйыр малҡайҙарына төҫ һәм бөҫ биреүсе нәмәкәйе ул мөгөҙҙәре икән. Килбәтһеҙ эре мөгөҙлө малдарҙы, хатта бер мөгөҙө дүшәмбегә, икенсеһе йәкшәмбегә ҡарап торған хайуанҡайҙарҙы ла, йыш булмаһа ла, күреп йөрөргә тура килде. Тукал һыйырҙарға иһә мин бала саҡтан уҡ йәлләңкерәп ҡараным. Нимәһелер етешмәгән һымаҡ тойола ине минә уларҙа. Тукал һыйырҙың һөтөн эсергә тура килһә, хатта ытырғынып та ҡуя торғайным.

Мөгөҙҙәренең нәфислеге, уларҙың кәрәкле урында ипле генә бөгөлөп китеүҙәре яғынан Алаҡай менән дәғүәләшеүсе бер генә һыйыр ҙа булманы Һаҡмар туғайҙарында. Баш һөйәгенә тоташҡан тирәлә мөгөҙҙәр ярайһы ғына йыуан булды, осҡа киткән һайын әкренләп нәҙегәйә барҙы. Башына яҡын урында мөгөҙҙәрҙең өҫтө ҡытай йорттарының ҡыйыҡ ситтәрен хәтерләткән ҡулсалар менән уратып алынғайны. Киңерәк ҡулсаның өҫтөнә тарырағы ҡатланып ябыла ла уныһы, үҙ нәүбәтендә, тағы ла тарыраҡ икенсе ҡулса менән алмашына. Шуныһы ҡыҙыҡ, был ҡулсалар ике төҫтән торҙо: бер өлөшө - аҡ, икенсе өлөшө ҡара булды. Баш һөйәгенән сыҡҡан ниндәйҙер һыҙыҡ, мөгөҙҙәрҙең яртыһына тиклем бара биреп, әкренләп юҡҡа сыҡҡаны хәтеремдә. Ҡыл йыланы һымағыраҡ был һыҙыҡ мөгөҙҙәрҙе уратып үтте һәм диңгеҙ ҡусҡарының тышындағы һыҙыҡҡа оҡшап торҙо. Ошо һыҙыҡтың бер яғы ҡара төҫтә, ә икенсе яғы, шәкәр кеүек, аҡ төҫтә булды. Алаҡайҙың бер көйшәнеп ятҡанында, мин шул төҫтәрҙең нисек береһе икенсеһенә күскәнен ҡарап йөрөнөм. Йөгөнөкләп һыйыр башы тирәләй әйләнә торғас, шуны асыҡланым: аҡ төҫ әкренләп ҡараға, ә ҡараһы, киреһенсә, аҡҡа күсә бара икән.

Шул туңҡанлап йөрөгәнемдә бына тағы нимәгә иғтибар иттем. Алаҡайға Хоҙай Тәғәлә, аҡ менән ҡаранан тыш, әҙ генә булһа ла, өсөнсө төҫтән дә өлөш сығарған икән. Һары төҫ булып сыҡты ул. Мөгөҙҙәре нисек кенә күркәм бөгөлмәһен, аҡ менән ҡара төҫ бер-береһе менән көрәшеп тә, ярашып та шул мөгөҙҙәрҙе ни дәрәжәлә генә зауыҡ менән биҙәмәһен, әгәр шул һары төҫ булмаһа, Һаҡмар һылыуҡайының тышҡы ҡиәфәтендә ҙур ғына китек булыр ине. Алаҡайҙың башына йәм һәм бөҫ биреүсе нәмәкәйе мөгөҙҙәре булһа, шул мөгөҙҙәрҙе лә ҡабатланмаҫлыҡ итеүсе, һис шикһеҙ, ана шул һары төҫ булды. Һыйыр сибәркәйҙәренең дә мөгөҙҙәре шуныһы менән ғәжәпләндерҙе: сәтәкәй бармаҡ оҙонлоҡтағы иң осло өлөшө һары төҫкә манып алынғайны. Бында ла тәбиғәт үҙенең булған оҫталығын тулыһынса файҙаланғайны: мөгөҙҙәрҙең иң ос ҡынаһы үтә күренмәле һымағыраҡ булһа, йыуанайған һайын ҡараңғылана барып, ахыр сиктә ҡәҙимге төҫкә әйләнгәйне. Ҡояшлы көндәрҙә мөгөҙ остары, гәрәбәне хәтерләтеп, нурланып торҙо, енелсә болотло көндәрҙә Бөрйән балы кеүек ҡарағусҡыл һары төҫкә инде, ә ямғырлы көндәрҙә иһә андыҙ тамыры кеүек көрәнһыу төҫ алды. Ошондай уҡ һары төҫ Алаҡайҙың тояҡ остарын да биҙәп торҙо. Һыйырыбыҙҙың гүзәл дә, ғәжәйеп тә сифаттарын тәфсилләп яҙһам, ҡәләм тибрәтеүҙән бармаҡтарымдың хәле ҡалмаҫ, тип ҡурҡам. Ана күпме яҙҙым, ә тасуирләгәндәрем баш һәм мөгөҙҙәрҙән ары китмәне. Ә уның маңлай сәстәре ниндәй ине! Ә ялдары һуң, ялдары! Улар тураһында яҙмай нисек кенә түҙәйем икән!? Малҡайымдың ҡойроғона ғына ла табаҡ-табаҡ биш бит арнарға булыр ине лә бит, тик мөмкинлек кенә юҡ шул.

Шулай ҙа бер нәмә тураһында яҙып китмәһәм, яҙыҡ булыр. Нәмә тигәнем һыйырҡайыбыҙҙың төҫөнә ҡайтып ҡала. Уның исеме лә шул төҫ кенәһе менән бәйле ине бит. Хозурлығы һәм төҫтәренең үтә лә камил аралашып килеүе яғынан ала һыйырға тиңләшерлек бер генә малды ла осратырға тура килмәне минә. Нисә мәртәбә "кейендереп" ҡараны икән Алаҡайҙы ошо хайуанға тән һәм йән биргән илаһи көс? Бихисап эре мөгөҙлө малды арлы-бирле генә итеп әүәләгәндән һуң, ни маҡсат менән ошо хайуанға булған ғына илһамын, бөтә оҫталығын һуңғы тамсыһына тиклем бирҙе икән был көс? Әллә тәбиғәттең беҙгә ҡеүәтле булып күренгән көстәренән дә юғарыраҡ торған тағы әллә ниндәй әрүәхтәре бармы икән? Бәлки, шул бейеклектәрҙән килгән бөйөк уҡытыусы: "Әй, хөрмәтлеләрем! Һәр йән эйәһен әүәләгәндә, барлыҡ оҫталығығыҙҙа, хис-тойғоларығыҙға таянып эш итегеҙ, зинһар өсөн!" - тип әйткәндер ҙә үрнәк өсөн ала һыйырыбыҙҙы һынландырып та ҡуйғандыр.

Ошолай булырға ла мөмкин: ниндәйҙер йәш-елбәҙәк әрүәхтең күҙе үҙ дәрәжәһендәге әрүәх ҡыҙына төшкәндер ҙә, шул ҡыҙ менән әҙәм күҙенә күренмәй генә парланышып, Һаҡмар туғайҙары өҫтөндә осоп йөрөгәндәрҙер. "Йәнекәйем, һинең өсөн бөтәһен дә эшләргә ризамын: кәрәк икән Айҙан мәңге нурланып торған гәлсәр килтерермен, теләйһең икән, Зөһрә йондоҙонан фәлсәфә ташы алып ҡайтырмын!" - тигәндер әрүәх егет, үҙенең йәнәшәһендә йөҙөп барған гүзәл ҡыҙҙың күҙҙәренә мөлдөрәп ҡарап. Һушты китәрмәле сибәр әрүәх ҡыҙы, көләмһөрәп: "Юҡ, әрүәхтәр арысланы, минә әйткәндәреңдән бер нәмә лә кәрәкмәй", - тип яуаплағандыр. Һөйөү ялҡындарында янған мөһабәт егеттең шиңгән гөлгә оҡшап ҡалыуын күргәс, йәлләүҙәренән ни әйтергә белмәй: "Ҡара әле аҫҡа, дуҫҡайым, күрәһеңме унда ауыл көтөүен. Шул көтөүҙә биҙәрлек тә хайуанды һынландырып ҡара әле, булмаһа. Һыйыр тоҡомонан булһын ул!" Шулай тигәндер ҙә ҡапыл юҡ булғандыр, ә әрүәх егет бәхетле йылмайғандыр ҙа, Рәхимйән исемле йәш көтөүсе янына күренмәй генә ҡунып, Алаҡайҙың тәүге һынланышын яһап та ҡуйғандыр.

Ҡуян өләсәйем иһә ала һыйырҙың сығышын һыу һыйырҙарына алып барып ялғай торғайны. Йәй көндәренең береһендә уның ошондай ҡыҙыҡлы ла, мөғжизәле лә хәлдәр хаҡында бәйән итеп ултырғаны иҫемдә. Ул көндө әсәйем, Түбән остоң бөтә оло йәштәге ҡатындарына, ҡарт-ҡороһона өләсәйем хөрмәтенә ҡунаҡ күрһәтә ине. Мин килеп инеүгә төпкө бүлмәнең иҙәненә төрлө төҫтәге ҡорама менән тышланған ҡаралты түшәлгәйне, дүрт-биш урынға күпереп торған яҫтыҡ ырғытылғайны. Иң төптә, уң яҡ мөйөштәге бер яҫтыҡҡа терәлеп, өләсәйем йәйрәп ултырып алғайны, ә уға ҡапма-ҡаршы мөйөштәге самауыр артына әсәйем, аяҡтарын бөкләп, сүккәйне. Төрлө йәштәге ун бишләп ҡатын-ҡыҙ, дүртмөйөш яһап, ҙур ашъяулыҡ тирәһенән урын алғайны.

**(Дауамы бар).**

**Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Франгизә ИЛБӘКОВА - тынғы белмәгән сәнғәт эшмәкәрҙәренең береһе. Режиссер, сценарист, журналист булараҡ киң эшмәкәрлеге Башҡортостан телевидениеһында эшләгән осорға тура килә. Ҙур проекттар авторы ул Франгизә Фәннән ҡыҙы. Бөгөн уны тиҫтәләгән йырҙар авторы тип тә беләбеҙ. "Үҙем булып ҡалам" тип аталған китабында ижад юлы шаҡтай тулы сағылыш таба, хисле шиғырҙары бай күңел донъяһын аса. Ошо бәрәкәтле ижад юлына ентекләберәк туҡталырға, иң мөһим мәлдәрен иҫкә алып үтергә ваҡыт еткәндер.**

# ҮҘЕМ БУЛЫП ҠАЛАМ...

**➔ Франгизә, Өфө сәнғәт институтына килгән юлығыҙҙы белге килә. Һөнәр һайлау яҙмышты яҙыуға бәрәбәр. Уның тамырҙары бала саҡҡа барып тоташалыр. Тәүге һынауҙан уҡ актерлыҡ бүлегенә инеп китеү үҙе үк күп нәмәне аңлата. Сәнғәткә булған һөйөү ҡайҙан?**

- Атай-әсәй ябай колхозсылар булһалар ҙа, йырларға бик яраттылар. 70-се йылдарҙа кис ултырыумы, туйҙарҙамы, һуғым ашындамы - ҡунаҡ булышыу ғәҙәте бик таралғайны. Табын алдынан өлкән апайым Флүзә (апайҙар район үҙәгендә интернатта уҡый ) отоп алған йырҙарын әсәй менән атайға өйрәтә, улар икәүләшеп ҡунаҡта йырлайҙар. Шулай итеп, минең дә багажға күп кенә йырҙар инеп ятты. 5-6 йәштәр тирәһендә "Кайтырыз, торналар" йыры менән бер ҡунаҡта дебют яһаным. Крапочеванан килгән Тәгзимә әбейем түгелеп илай. Йырлап бөтөүгә ныҡ итеп ҡул саптылар, әбейем 5 һум аҡса тотторҙо. Ә ул ваҡытта өләсәйемдең айлыҡ пенсияһы 5 һум булған икән. Магазинға сабып барып, ҡыҙыл вельветтан матур күлдәк һатып алдым... Ғөмүмән, ғүмеремдә өс тапҡыр йырлап сығыш яһауым ныҡ хәтерҙә ҡалған. Икенсеһе - Әлкә урта мәктәбенә 4-се класҡа уҡырға барғас (өс класты үҙебеҙҙә Юлай ауылында уҡыйбыҙ), Бөйөк Ватан һуғышына арналған смотрҙа сығыш яһаным. Өсөнсө йырлауым Өфө сәнғәт институтының актерҙар бүлегенә имтихандар биргән мәлдә булды.

**➔ Ә ни өсөн Өфө сәнғәт институтын, актерҙар бүлеген һайланың?**

- Мәктәпте 4-5 билдәләренә генә тамамлағас, минә уҡытыусыларым БДУ-ға барырға кәңәш бирҙе. Барҙым, бәлки, инер ҙә инем, рус әҙәбиәтенән имтихандан баш тартып, ике ҡуйҙыртып алып, кире ауылға ҡайтып киттем. 1982 йыл, бәлки, икеле билдәһен һорап алған абитуриенттеы берәйһе иҫләйҙер? Әлкә мәктәбе директоры Франс Хәбир улы минә өлкән пионервожатый эшен тәҡдим итте. Бер йыл эшләгән осорҙа музыка менән мауығып китеп, Өфө сәнғәт училищеһының музыка бүлегенә уҡырға барырға тигән ҡарарға килдем. Шул ниәт менән киттем Өфөгә.

Училищеға инер юлды эскәмйәлә ултырған малай-шалай бүлде: "Эй, ҡыҙыҡай, ҡайҙа китеп бараһың?"- тиҙәр былар. "Училищеға уҡырға инергә китеп барам", - тим. " Ә һин Өфө сәнғәт иститутына бар, быйыл шәп режиссер Рифҡәт Исрафилов актерҙар төркөмө йыя, унда һинең кеүек ҡыҙҙар ҙа кәрәк, беҙ ҙә документтарҙы шундай тапшырҙыҡ", - ти былар. Уларға эйәреп, киттем институтҡа. Тик актерҙар бүлегенә конкурс ҙур икән - бер урынға ун кеше. Шулай ҙа тәүәккәлләнем.

Бына актер оҫталығынан имтихан көнө. Комиссия ағзалары Тамара Шәһит ҡыҙы Хоҙайбирҙина, Фәрҙүнә Ҡасим ҡыҙы тәүҙә баштан аяҡ кәүҙәм-һынымды тикшерҙеләр. Артабан этюдтың нимә, ҡайһылайыраҡ күрһәтелергә тейеш икәнен аңлаттылар. Ошонда инде мине бала саҡтан уратып алған мөхит, ваҡиғалар, һабаҡтар - өләсәйем менән уҡыған романдарым, ятлаған һәм яҙған шиғырҙарым, илаптилап йырлаған йырҙарым, йәйен төйләгәндән ҡурсып көткән бәпкәләр, ҡышҡы юлдан күрше ауылға йәйәү атлағанда арттан ҡыуған сатан бүреләр, әсәйҙе йәлләп, таңғы биштән тороп һауған һыйырҙар - барыһы ла күҙ алдына килде. Барыһы ла тормошсан, алдаҡһыҙ, ихлас башҡарылды. Минең этюд комиссия ағзалары Олег Хановҡа ла, Рифҡәт Исрафиловҡа ла оҡшаны, күрәһең. Йөҙ кешенән 15 кешене - 6 ҡыҙ ҙа, 9 егетте ҡабул иттеләр. Теге малай-шалайҙар ҙа курсташтарым булып китте. Эйе, Рифҡәт Исрафилов көслө режиссер ине, беҙҙе лә бик күп көс һалып уҡытты, беҙҙең өсөн театр ишектәрен асты... Үҙемде һәләтле студент итеп таныттым, икенсе курстан театр сәхнәһендә мәшһүр артистар Зәйтүнә Бикбулатова, Хөсәйен Ҡудашев, Хәй Фәхриев, Фидан Ғафаров, Нурия Ирсаева, уҡытыусыларым - Олег Ханов, Гөлли Мөбәрәковалар менән бергә спектаклдәрҙә уйнай башланым. Актерлыҡ оҫталығына ғына түгел, режиссерлыҡ серҙәренә лә ылыҡтырҙы Рифҡәт Вәкил улы. Тик, театр тоҡандырған утты дөрләтеп ебәрә алманым. Яҙмыш, тип тә әйтә алмайым, хәҙерге аҡыл, тәжрибә булһа, барыһы ла башҡаса булыр ине.

**➔ Тимәк, режиссерлыҡ буйынса артабан белемеңде камиллаштырыу осраҡлы булмаған бит?**

-1987-1992 йылдарҙа Башҡорт дәүләт филармонияһында, "Йәдкәр" фольклор ансамблендә нәфис һүҙ оҫтаһы булып эшләнем. Суверенитет, тел өсөн көрәш барған осорҙа Рәми Ғариповтың әҫәрҙәре буйынса "Халҡым хазинаһы" программаһы, Рауил Бикбаевтың "Халҡыма хат" шиғыры буйынса ҡуйылған әҙәби-музыкаль концерт менән республиканың һәр бәләкәй һәм ҙур ауылын, бөтә ҡалаларын йөрөп сыҡтыҡ, шулай уҡ күрше Ырымбур, Силәбе, Һарытау өлкәләре, Мәскәүҙә лә булдыҡ. "Халҡыма хат" поэмаһын мин сәхнәнән тулыһынса һөйләй торғайным.

Тик бергәләп гастролдарҙа йөрөү күнелле (Ишморат менән бергә эшләйбеҙ, ҡыҙыбыҙ Зөлхизә лә беҙҙең менән йөрөй), әммә балаға уҡырға барырға ваҡыт етте. Зөлхизәбеҙ "Тамыр"студияһына йөрөй, тапшырыуҙар алып бара ине. Мин дә телевидениеға эшкә барырға ҡарар иттем, һәм мине ул ваҡытта шаулап-гөрләп ижад иткән "Тамаша" ижад берекмәһенә ҡабул иттеләр. Август айында эшкә урынлаштым, сентябрҙә етәкселәрем режиссер һөнәрен үҙләштерергә тәҡдим итте. 1992-1996 йылдарҙа "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы һәм Өфө дәүләт сәнғәт академияһы тарафынан ойошторолған Мәскәү телевидение хеҙмәткәрҙәре квалификацияһын күтәреү институтында "Нәфис телевидение режиссураһы" бүлегендә икенсе юғары махсус белем алдым. "Останкино" телеүҙәгендә практика үтеп, диплом эштәре төшөрөп, "Башҡортостан" ДТРК-һына режиссер булып ҡайттым.

**➔ Башҡортостан телерадиокомпанияһында режиссер булып эшләү - еңел булмаған бурыс. Һеҙ - уның фондын байытыу өсөн ҙур көс һалыусыларҙың береһе...**

- "Тамаша" ижад берекмәһендә "Куласа", "Дарман", "Йома", "Алҡыштар", "Автограф" нәфис тапшырыуҙары, фильмдар, документаль әҫәрҙәр, сәйәси-мәҙәни тапшырыуҙар, "Манара" дини тапшырыуы, "Айгөл иле" тележурналы, "Аҡ тирәк - күк тирәк" программаһы, "Арҡайым" интеллектуаль клубы, "Инсан", "Нәҙер" тапшырыуҙар шәлкеме - күңел көс һалып, күҙ нуры түгеп эшләгән режиссер эштәрем. "Мөхәббәттең дүрт миҙгеле" тип аталған



шиғри фильмым өсөн (сценарий авторы ла үҙем) "Ер һәм кешеләр" ("Земля и люди") төбәк телевидениелар бәйгеһендә Гран-при - төп приз менән бүләкләндем. "Музыка" ижад берекмәһендә, "Курай" телеканалында күп музыкаль клиптар төшөрҙөм. Күсмә телевизион станция менән спектаклдәр, концерттар, юбилей кисәләрен яҙҙырып, эфирға сығарҙым.

**➔ Телевидение режиссеры булыуҙың үҙенсәлеге нимәлә, ни өсөн уны үҙ иттегеҙ?**

- Телевидение, эфир аша бик күп нимә әйтеп, күп уй-фекерҙәрҙе еткереп була. Нәфис әҫәрҙәр тыуҙырыу юлы асыла. Төрлө идеялар, фантазиялар, режиссер алымдары өсөн киң мөмкинлек бар. Журналист яҙған тексты "кеше итеү", әҫәр геройҙарын һынғай тулҡынға индереү, биҙәп-төҙәп кәмселекһеҙ күрһәтеү ҙә режиссерҙан тора. Студияны яраҡлы хәлгә килтереү, кәрәкле кадр табыу ҙа - режиссер эше. 30 йыл эш осоронда тәбиғәттә сүп таҙартырға ла, байтаҡ ҡына геройҙарҙың өйөндә саң һөртөргә лә, шкаф, дивандар шылдырырға ла тура килде, сөнки камера бар етешһеҙлекте күрә, ә телевидение үҙ ҡанундарын алға ҡуя. Театр, концерт залдарынан спектакль, кисәләр яҙып алып ҡайтып күрһәтер өсөн дә техниканы белеү, оҫталыҡ кәрәк.

**➔ Франгизә, һеҙ Рәсәйҙең баш ҡалаһында ла эшләп ҡайттығыҙ бит әле.**

- Эйе, Мәскәүҙә шәхси телевидение студияһында эшләргә тура килде. Башҡортостан Республикаһының Рәсәй Федерацияһы Президенты янындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиллегендә сценарий авторы һәм режиссер булараҡ ветерандар өсөн концерттар, кисәләр ойоштороп. "Культура" каналы төшөргән, күренекле автор Алла Сегалованың фильмында консультант, башҡорт милли кейемдәре буйынса белгес булараҡ ҡатнаштым, халыҡ-ара конференцияларҙа башҡорт милли сәнғәте буйынса сығыштар яһаным.

**➔ Илбәковтар - Рәсәйгә танылған ғаилә. Сәнғәт өлкәһендә һәр берегеҙҙең үҙ юлы, үҙ бейеклеге, үҙ тамашасыһы бар.**

- Эйе, тормош иптәшем Ишморат Ҡәйүм улы Илбәков -Башҡортостандың халыҡ артисы, Халыҡ-ара, Бөтә Рәсәй конкурстары лауреаты, халҡыбыҙҙың танылған, мәшһүр ҡурайсылы тип әйтәләр уны. Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында эшләй. Ишҡурай авторы булараҡ, төрлө ҡаршылыҡтар, ғәҙелһеҙлектәр кисерҙе, ҡаты ауырыуҙарҙы Аллаһ Тәғәлә ҡушыуы менән еңеп сыҡты, ҡурайҙа өр-яңынан уйнарға өйрәнеп, шөғөлләнеп, Халыҡ-ара конкурста беренсе премия алып ҡайтты. Уның ҡаҡшамаҫ рух, бөгөлмәҫ күңел ныҡлығына һоҡланам.

Ҡыҙыбыҙ Зөлхизә - һәүәҫкәр композитор, күп йырҙар авторы, актриса, йырсы. Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлап, Мәскәүҙә лә эшләне. Хәҙерге көндә Башҡорт дәүләт филармонияһы солисткаһы, "Йомаҡ" проекты менән етәкселек итә. Өфө сәнғәт институтының вокал бүлегендә икенсе юғары белем ала.

Ата-әсәһе генә түгел, ҡартатай, өләсәйҙәр, туғандар ныҡ тәьсир итә балаға. Зөлхизә берҙән-бер балабыҙ булһа ла, күп туғанлы булып, Салауат һәм Хәйбулла райондарындағы ауылдарҙа туғандары менән аралашып үҫте, өләсәй-олатай тәрбиәһен күрҙе. Әсәйем ике йәше лә тулмаған ейәнсәрен "р"хәрефен әйтергә өйрәтте, йырҙар, таҡмаҡтар ятлатты, бейетте, тимәк, киләсәк юлына ҙур һуҡмаҡ һалды. Ишморат әкиәттәр һөйләне, ҡурай тыңлатты, уға башҡортса камзулдар текте, сулпылар эшләне, мин матур күлдәктәр, кейемдәр алырға, зауыҡ тәрбиәләргә тырыштым. Иртә хәреф танырға, уҡырға өйрәттек. Бәләкәйҙән "Тамыр"студияһы тапшырыуҙарын алып барҙы. Биш йәшендә беренсе "Сулпылар" республика конкурсында Гран-при яуланы, 18 йәшендә беренсе шәхсән концертын Өфөнөң йәштәр һарайында тулы зал, аншлаг менән үткәрҙе...

**➔ Франгизә, һеҙ тормошобоҙҙоң яҡтыраҡ, иманлыраҡ булырына ышанып йәшәйһегеҙме? Нимә көс бирә?**

- Кеше нимәгә булһа ла һылтанып, ҡылған ҡылыҡтарын аҡларға тырышһа, "Заманы шулай бит", тигән һүҙҙе ҡабатлай. "Заман, тимәгеҙ, заманға һылтамағыҙ, мин үҙем заман," - тигән Хаҡ Тәғәлә.

Эйе, ниндәй ысулдар менән генә яңылыштырырға, юлдан яҙҙырырға, әхләҡтән айырырға (мин үҙебеҙҙе 90-сы йылдар шауҡымына бирешеп, күп хаталар эшләгән быуынға индерәм, күпме ғаилә драмалары, фажиғәле яҙмыштар ҡалды ул замандан!) тырышһалар ҙа, йәмғиәтебеҙ барыбер таҙарына, аң ягынан да, рухи яҡтан да үҫә һәм ҡотлораҡ, йылыраҡ, кешелеклерәк була бара. Шул ҡыуандыра һәм ышаныс уята. Ҡайһы бер сиктән тыш көйәләндергән хәлдәр ҙә була, әлбиттә, әммә... Өләсәйем әйтмешләй, "әҙәмдең алаһы ла, ҡолаһы ла бар". Түҙеп, аңлап ҡабул итергә кәрәк һәр хәл-күренеште. Дингә ныҡ йәбешергә кәрәк беҙгә, динебеҙ сафлыҡ һәм яҡшылыҡҡа әндәй. Беҙ ғаиләбеҙ менән төрлө хәйриә акцияларында ла әүҙем ҡатнашабыҙ. Ике йыл рәттән "Сәнғәт кешеләре" хәйриә фонды эшмәкәрлегендә ҡатнаштыҡ, мәсет төҙөүгә бағышланған "Иман нуры халҡыма" хәйриә концертының режиссеры булараҡ ярҙам күрһәттем. Үҙ ғаиләмдән сығымдар бүлеп, хәйриә аҡсалары йыйып, өмәләр үткәреп, тыуған ауылым Юлайҙа мәсет аҫтыҡ.

Ғаиләләребеҙ ныҡ булһа, халыҡ булараҡ, бер-беребеҙгә ихтирамлы, иғтибарлы, туғандарса мөнәсәбәттә булһаҡ, берберебеҙҙе күтәрә белһәк, көслө булырбыҙ, ин шаа Аллаһ!

**Фәрҙәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Аҙнаһына бер ус еләк ашау ҙа ҡартая барыусыларҙың баш мейеһе зарарланыу ҡурҡынысын 25 процентҡа түбәнәйтә. Бынан тыш, рационға еләк-емеш индереү ҡан баҫымын нормаға килтерер, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртырта.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠӘҺҮӘ ҠАТЫН-ҠЫҘҒА КИЛЕШӘ

■ Стресс ваҡытында ҡәһүә эсеү ҡатын-ҡыҙҙарға яҡшы тәьҫир итә. Ә бына ир-егеттәр быңдай осраҡта үҙенең мейе әүҙемлеге тиҙлеген әкренәйтә генә, тип раҫлай ғалимдар. Улар аныҡлауынса, был тикшеренеүҙәр барышында асыҡланған. Унда ҡатнашыусыларҙы ике төркөмгә бүлеп, береһе ябай, икенсеһенә кофеины булмаған ҡәһүә эсергә тәҡдим иткәндәр. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ябай ҡәһүә эсеүсе гүзәл заттарҙың мейе әүҙемлеге кофеинһыҙ ҡәһүә эсеүсе ханымдарҙыҡына ҡарағанда күпкә яҡшырған. Ә ир-егеттәр, киреһенсә, мәсьәләләрҙе ауырыраҡ һәм яйыраҡ сискән, мәғлүмәтте лә хәтерендә насарыраҡ ҡалдырған.

■ Еләк-емеш ашау Паркинсон ауырыуынан һаҡлай ала, ти ғалимдар. Ошоно раҫлаусы экспертар 20 йыл дауамында 130 мең кешене тикшергән, ошо ваҡыт эсендә уларҙың 800-ендә Паркинсон ауырыуы күҙәтелгән. Белгестәр уларҙың туҡланыу рационы һәм сирҙәре араһында бәйләнеш тапҡан һәм ауырыуҙар исемлегендә флавоноидтарға бай еләк-емеште аҙ ҡулланыуын асыҡлаған. Был матдәләргә бай аҙыҡты күп ҡулланыусылар Паркинсон ауырыуы менән 40 процентҡа һирәгерәк ауырыған. Аҙнаһына бер ус еләк ашау ҙа ҡартая барыусыларҙың баш мейеһе зарарланыу ҡурҡынысын 25 процентҡа түбәнәйтә. Бынан тыш, рационға еләк-емеш индереү ҡан баҫымын нормаға килтерергә, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртырға, яман шеш булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Бонн университеты (Германия) ғалимдары асыҡлауынса, окситоцин гормоны ғаиләле ирҙәргә ҡатындарына тоғролоҡ һаҡларға ярҙам итә. Был гормон тәбиғи рәүештә гипоталамуста бүленеп сыға һәм партнерҙар араһындағы ныҡлы мөнәсәбәт өсөн яуап бирә. Был гормон кимәле төрлө кешелә төрлөсә. Эксперимент барышында тикшеренеүселәр ир-егеттәргә (никахта тороусыларына ла, тормағандарына ла) составында был гормон булған препарат тәҡдим иткән. Һөҙөмтәләр бик ҡыҙыҡлы ғына килеп сыҡҡан. Ғаиләһе булған ир-егеттәр сит ҡатын-ҡыҙҙарҙы урап тигәндәй ҡаса башлаған, ә ғаиләһеҙҙәр үҙҙәренең ҡылыҡтарын үҙгәртмәгән.

■ Афина университеты ғалимдары ике төркөм ҡатын-ҡыҙҙарҙы сағыштырып ҡараған. Беренсе төркөм 3 ай дауамында йүгергән, икенсеһе шәп итеп атлап йөрөгән. Һөҙөмтәлә, икенсе төркөмдәге ҡатын-ҡыҙҙар артыҡ килограммдарҙы күберәк ташлаған. Тикшеренеүселәр быны шулай аңлатҡан: кем йүгергән, улар күберәк көс юғалтҡан һәм көн дауамында йышыраҡ ял иткән һәм ашаған. Ә йәйәү йөрөүселәрҙең, киреһенсә, энергияһы ташып барған һәм улар ҡалған ваҡытын да әүҙем үткәргән. Бынан тыш, йәйәү йөрөгәндә көс мускулдарға, ә йүгергәндә быуындарға төшә. Бынан тыш, йәйәү йөрөү ҡан баҫымын да яйға һала. Стэнфорд университетының физиологтары юғары ҡан баҫымы менән яфаланған ҡатын-ҡыҙҙарға көнөнә йәйәү йөрөүҙе 9700 аҙымға еткерергә ҡушҡан. Алты айҙан һуң ханымдар ябыҡып, ҡан баҫымдары нормаға килгән. Ошондай уҡ экспериментты ирҙәрҙә лә үткәреп ҡарағандар. Унда 11 мең ир-егет ҡатнашҡан һәм көнөнә 10 мең аҙым һәй башлағандан һуң уларҙа инсульт һәм инфаркт хәүефе 2 тапҡырға кәмегән.

СӘЛӘМӘТЛЕК МӘКТӘБЕ

# КИҘЕҮ МИҘГЕЛЕНӘ ӘҘЕРҺЕҢМЕ?

**Көҙ етеү менән киҫкен респиратор инфекциялар һәм киҙеү менән сирләүселәр һаны арта. Был һыуыҡтар башланыу, мәктәп уҡыусыларының йәйге каникулы тамамланыуы менән дә бәйле, улар парта артына ултыра, ә өлкәндәр отпускан һуң офистарға сыға. Кешеләр менән бәйләнеш күберәк булған урындарҙа вирус менән алмашыу ихтималлығы ла юғарыраҡ. "Башинформ" Башҡортостанда яңы эпидемиологик миҙгелгә нисек әҙерләнеүҙәре һәм үҙенде ауырыуҙан нисек һаҡларға кәрәклеге хаҡында мәғлүмәт йыйҙы.**



## Вирустар һөжүм итә башланы

Роспотребнадзор белгестәре иҫәпләүенсә, Башҡортостанда сирҙең артыуы сентябрь аҙағына - октябрь башына көтөлә. 16 сентябргә ҡарата бер аҙна эсендә киҫкен респиратор инфекциялар менән сирләүҙең 20,3 меңдән ашыу осрағы асыҡланған, шуларҙың яртыһы тиерлек (9,7 меңдән ашыуы) - балалар. Уҙған аҙна менән сағыштырғанда сирҙең 44,4 процентҡа артыуы күҙәтелә. Әлегә киҙеү (грипп) менән бер кем дә ауырымаған.

"Башинформ" агентлығында үткән матбуғат конференцияһында Роспотребнадзорҙың республика буйынса идаралығы етәксеһе урынбаҫары Елена Шакирова билдәләүенсә, дөйөм ауырыу кимәленең артыуына ҡарамаҫтан, уҡыусылар ауырыу сәбәпле дәресте һирәгерәк ҡалдыра. "2024 йылда балаларҙың 38 проценты ауырыған, был тотош ил буйынса 25 процентҡа кәмерәк. Ваҡытында вакцинациялау һәм карантин ыңғай һөҙөмтә бирә", - тип билдәләне белгес.

Билдәләнеүенсә, ете көнлөк айырым кластар карантины отошло, уны уҡыусыларҙың 20 проценттан ашыуы ауырыһа ҡулланалар. Хәҙер тулыһынса белем биреү ойошмалары карантинға ябылмай. Элек мәктәптә уҡыу процесы, ҡағиҙә булараҡ, 2-3 аҙнаға туҡтатыла ине. Карантин мәктәп уҡыусыларының күпләп йоҡтороуын булдырмаҫҡа мөмкинлек бирә.

## Таж-зәхмәт тә онотолмай

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2023 йылдың майында Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы коронавирус пандемияһының тамамланыуы тураһында иғлан итте. Әммә был COVID-19 хәҙер бөтөнләй юҡ тигәнде аңлатмай. Вирус беҙҙең менән ҡалды, тик ул киҫкен респиратор инфекцияһынан һәм гриптан ҡурҡынысыраҡ түгел.

Әйткәндәй, коронавирус инфекцияһы ла миҙгелле булды. Әгәр йәйгеһен инфекция менән хәл тотороҡло ҡала икән, көҙ етеү менән сирлеләр һаны тиҙ арта башланы. Мәҫәлән, 16 сентябргә ҡарата тәүлегенә 82 сир осрағы асыҡланған. Сағыштырыу өсөн, бер аҙна элек тәүлегенә 50-гә яҡын сирле асыҡланған, ә арты ай элек көн һайын 30-ға яҡын кеше сирләгән. Ковидтан 93 пациент стационарҙа, 834 кеше амбулатор дауалана.

Башҡа инфекциялар кеүек үк, коронавирус та үҙгәреүгә яраҡлашҡан. Мәҫәлән, хәҙер Рәсәйҙә "Стратус" яңы штаммы әүҙем тарала. Ул билдәле "Омикрон"дың варианты булып тора. Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе урынбаҫары Елена Шакирова һыҙҙәренсә, элеккеһе менән сағыштырғанда ҡайһы бер үҙгәрештәргә ҡарамаҫтан, ковидтың яңы төрө, нигеҙҙә, еңел формала кисерелә һәм айырым иҫкәртеү сараларын талап итмәй.

"Сирҙең бер аҙ артыуы ихтимал булһа ла, яңы коронавирус инфекцияһы миҙгелле ауырыуҙар реестрына индерелгән, шуға күрә күмәк сиклəүҙәр, шулай уҡ мотлаҡ битлек режимы планлаштырылмай. Элеккесә хәүеф төркөмөндә - бөтә миллионлы ҡалалар", - тип аңлатты бирҙе эксперт.

Табип-инфекционист Ләйсән Садиҡова эпидемия миҙгелендә пневмония менән сирләгән пациенттарҙың күбәйеүен аңлатты. Уның менән кешеләр йыл әйләнәһенә ауырый ала, әммә көҙгө-ҡышҡы осорҙа сирҙең артыуы күҙәтелә. "Ғәҙәттә, кешеләр вируслы инфекциялар, мәҫәлән, коронавирус инфекцияһы, грипп менән зарарланғанда, пневмония менән сирләүселәр һаны арта", - тип аңлатты табип.

## Дауалауға ҡарағанда иҫкәртеү еңелерәк

Киҙеүҙән һаҡланыуҙың һөҙөмтәле ысулы булып элеккесә вакцинация ҡала. Роспотребнадзор мәғлүмәттәре буйынса, республикаға 505 меңдән ашыу доза вакцина килтерелгән, шул иҫәптән өлкәндәр өсөн - 246 мең доза "Совигрипп", "Флю-М" һәм балалар өсөн 258 мең доза "Ультрикс". Әлегә 389 меңдән ашыу кешегә вакцина яһалған. Коллектив иммунитет барлыҡҡа килеү өсөн төбәктә бөтәһе 2 миллионға яҡын кешегә прививка яһатыу планлаштырыла. "Беҙҙең медицина ойошмалары вакциналарҙың 40 процентын файҙаланған, сентябрь аҙағында тағы килә. Процедураға алдан яҙылырға саҡырабыҙ, әммә бынан алда табип ҡарарға тейеш", - тип билдәләне Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының амбулатор медицина ярҙамы күрһәтеүҙе ойоштороу бүлеге етәксеһе Альбина Танһыҡҡужина.

Билдәләнеүенсә, 6 айлыҡ балаларға, мәктәп уҡыусыларына, юғары уҡыу йорттары һәм колледж студенттарына, медиктарға, педагогтарға, транспорт һәм коммуналь өлкә хеҙмәткәрҙәренә, 60 йәштән өлкәндәргә, йөклөләргә, призывниктарға һәм хроник үпкә ауырыуҙары, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы, һимереү һәм метаболизм боҙолоуы менән сирләгән кешеләргә киҙеүҙән бушлай прививка яһала.

"Зубово" инфекция үҙәге табип-инфекционисы Ләйсән Садиҡова эпидемия миҙгелендә шәхси гигиенаны үтәү, йышыраҡ ҡулдарҙы йыуыу, бинаңарҙы еләтеү, мөмкин тиклем ауырыуҙар менән аралашмау, һыуыҡтан ҡасыу, спорт менән шөғөлләнеү мөһим булыуын иҫкә төшөрҙө. Ә вирус инфекцияларының тәүге билдәләре барлыҡҡа килһә, үҙ-үҙеңде дауалау менән шөғөлләнеү урынына шунда уҡ табипҡа мөрәжәғәт итеү яҡшыраҡ.

Ләйсән ЗАКИРОВА.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# СӘЛӘМ БИРГӘН - МЕҢ САУАПЛЫ



**Сәләмләшеүгә мосолмандарҙа айырыуса ҙур иғтибар бирелә, улар, ғәҙәттә, бер-береһе менән ҡул бирешеп күрешә.**

"Ике мосолман ҡул биреп күрешкәндә, ҡулдары бер-береһенән айырылғанға тиклем уларҙың кескәй гонаһтарының бөтәһе лә ярлыҡанып", - тигән Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһис-сәләм.

Сәләм биреү 70 сауап менән бүләкләнә. Сауаптарҙың 69-ы - беренсе булып сәләм биргән кешегә, береһе сәләмгә яуап ҡайтарғанға була.

Күреүегеҙсә, сәләмләшеү - ябай ғәҙәт кенә түгел. Көнөнә әллә нисә тапҡыр ҡабатланған иҫәнләшеү һүҙҙәренең мәғәнәһе ҙур.

Әлегерәк кешеләр бер-береһенә таныш-тоноштары аша сәләм ебәрер булған. Хәйер, был күренеш әле лә һаҡланған. Һинең аша сәләм ебәргәндәр икән, һин уны оҙаҡҡа һуҙмай тәғәйен кешеһенә еткерергә лә тейешһең. Бәҡтиһән, үҙ мәлендә (онотолопмо, иғтибарһыҙлыҡ йә иһә аңлы рәүештәме, башҡа сәбәп менәнме) тапшырылмаған сәләм кеше иҫенә оло бурыс булып ята икән.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

## БИШ БАЛАЛЫ БУЛҺА ЛА...

**Башҡортостандан биш бала атаһы МХО-ға ил һаҡларға юлланған. Көйөргәҙе районынан "Алтын" ҡушаматлы яугир хаҡында "Көнгәк" гәзите яҙа.**

"МХО-ның тәүге көндәренән егеттәр янына барғым килде. Ваҡытында Чечня болғанышын үткән кеше булараҡ, ундағы хәлдәрҙең нисегерәк икәнен күҙ алдына килтерә инем. 2024 йылдың ноябрь айында РФ Оборона министрлығы менән контракт төҙөп, сығып киттем. МХО-ла БТР-ға ултырҙым, бронетөркөм водителе булып хеҙмәт иттем. Таңғы алтыла һалдаттарҙы алғы һыҙыҡҡа индерәм, кисен алып ҡайтам. Бронемашинала ҡаршылыҡ тыуҙырған ерҙәр, ҡыуаҡлыҡтар, һаҙмат урындар аша үтергә тура килә. Шулай уҡ боеприпас, аҙыҡ-түлек ташыу ҙа минең яуаплылыҡта. Унда иң ауыры беләһегеҙме нимәлә? Яралы һәм һәләк булған яуҙаштарҙы ут аҫтынан алып сығыу. Ҡалған ауырлыҡҡа сыҙарға була..." - ти яугир.



Бөгөн яугир район дауаханаһында реабилитация курсы үтә. Тәнендәге ун ике ярсыҡ тынғы бирмәй һалдатҡа. Һаулығын нығытҡас, ул янынан яу ҡырына юлланырға ниәтләй.

## БАТЫР ЙӨРӘКЛЕЛӘР ШУНДАЙ БУЛА!

**Ҡырмыҫҡалынан "Джага" позывнойлы яугир Махсус хәрби операцияға китергә тип ике тапҡыр контракт төҙөгән. Был яугирҙың ҡаһарман яу юлы һәм батырлыҡтары хаҡында "Даирә" гәзите һөйләй.**

Яугир 1967 йылғы. МХО-ға тиклем ташсы, тимер-бетон конструкциялары буйынса монтажсы, электр менән иретеп йәбештереүсе булып эшләй. Армияға барырға насип булмай. Төрлө ауырлыҡтар, бала ҡайғыһы күрергә лә тура килә. 25 йәшлек улы юл фажиғәһендә һәләк була. "Ошо ваҡытта Махсус хәрби операция башланып китте. Патриотизм тойғоһо һәр саҡ көслө булды. Тыуған илгә хәүеф янағанда үҙемде хәрби зонала кәрәгерәк итеп тойҙом", - ти яугир. Шулай ул Тыуған илде яҡларға ҡарар итә. 2022 йылдың октябрендә Рәсәй Оборона министрлығы менән контракт төҙөп, Миңлеғәле Шайморатов исемендәге мотоуҡсылар батальонында штурмлаусы отрядтың 5-се ротаһында уксы булып хеҙмәт итә башлай.

"Херсон өлкәһендә һуғыштым. БМП-ла барғанда минометтан аттылар. Һигеҙ кешенән биш кеше үлде, беҙ өсәү иҫән ҡалдыҡ. Бында һул аяғым яраланды. Луганск Республикаһы госпиталендә бер ай яттым. Унан сыҡҡас, тағы штурмлауға кереп киттем. 50 йәштән өлкәндәрҙе ҡайтарырға тигән ҡарар сыҡҡас, минә ул сакта 55 йәш булғас, ҡайтарҙылар. Ҡайтһам да, күңелем унда ине. Шуға тағы ла китергә булдым. Олоһоң, тип алмаҫҡа иткәйнеләр, мин үҙемдең физик көсөмдө турникта егерме тапҡыр күтәрелеп иҫбат иттем. Бер йылға Рәсәй Оборона министрлығы менән контракт төҙөп, тағы хәрби зонаға юлландым. Штурмлаусылар составында ла, ил сигендә лә позицияны һаҡлап торорға тура килде. Бер заданиеға ингәндә 125 кешененән 5 кеше генә иҫән ҡалдыҡ. Ә тағы берәүһендә ҡаршыға йөҙ кеше килгәндә пулеметтан илле тапҡыр тирәһе атып бөттөм дә йүгереп китеп өлгөрҙөм. Әммә ҡулыма миномет ярсыҡтары эләкте. Госпиталдәрҙә дауаланыу курстары үткәндән һуң, сәләмәтлек буйынса яныраҡ ҡайтарҙылар. Енеү беҙҙең яҡта булырына ныҡ ышанам", - тип һөйләне ул.

Ҡурҡыу белмәҫ "Джага" күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн Батырлыҡ ордены, Шайморатов, Суворов, "Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыға" һәм башҡа миҙалдар менән бүләкләнә.

## АТЫЛҒАН ЙОНДОҘҘАЙ БУЛДЫ

**Эльвира Йәғәфәрова менән Александр Граковтың мөхәббәт тарихы күптәрҙә һоҡланыу уята.**

Мәләүез механика-технология техникумын тамамлаған Эльвира хеҙмәт юлын Сорғот ҡалаһында башлай. Тап ошонда Омск ҡалаһынан Александар Граков менән таныша. Һөйгәненә оҡшар өсөн егет хатта башҡортса һөйләшергә өйрәнә. Эльвира эшләгән офис коронавирус таралған осорҙа ябыла һәм ул тыуған ҡалаһына ҡайтырға мәжбүр була. Егеттең "Мин һине барыбер ташламайым" тигән һүҙҙәрен ысынға алмай ҡыҙ, әммә ныҡышмал егет һүҙендә тора, бер нисә айҙан уны эҙләп, Мәләүезгә килә. Йәштәр никахтарын теркәй. Улдары Данияр тыуа, бер йылдан Даян донъяға килә.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бәхеттәре оҙаҡҡа һуҙылмай уларҙың. Махсус хәрби операция башланғас, Александрҙың әсәһе телефондан теркәлеү урыны буйынса улына повестка килтереүҙәре тураһында хәбәр итә. Мәскәүҙән вахтанан ҡайтып ҡына торған Александр ғаиләһе менән поезда алыҫ Омск тарафына юллана. Ҡулдарында - ике айы ла тулмаған Даян, бер йәшлек Данияр. Юлда уҡ Александр хәрби комиссариатҡа ҡайтыуы тураһында хәбәр итә, ике бәләкәй бала менән булғас, бәлки, МХО-ға саҡырыуҙы бер аҙ ваҡытҡа кисектерен торорҙар, тип ышана улар.

- Мобилизация буйынса 2023 йылдың 7 ноябрендә Александр Махсус хәрби операцияға алынды, 23 июлдә иһә контрактҡа ҡул ҡуйған, - тип хәтерләй Эльвира Фаяз ҡыҙы. -Хәрби машина наводчигы булып хеҙмәт итте. Хәбәрһеҙ юғалды, тигән ҡурҡыныс хәбәр алғас, көн менән төн буталды. Ҡайҙа ғына мөрәжәғәт итмәнек. 2024 йылдың 22 августында ғына һәләк булыуы тураһында белдек. Александр ихлас кеше ине, кәйефһеҙ сағын, төшөнкөлөккә бирелгәнен хәтерләмәйем. Улдарыбыҙ, үҫкәс, кем булыр икән, тип бер нисә тапҡыр һорағайны. Ғүмеренең ҡыҫҡа булыуын үҙе белдеме икән, тип уйлайым. Балаларымдың бер генә һорауына яуап таба алмайым. Йыш ҡына "Нишләп һаман ҡайтмай?" - тип һорайҙар. "Атайығыҙ һеҙҙең һымаҡ балалар тыныслыҡта, именлектә йәшәһен тип һәләк булды. Ул беҙҙең эргәлә, һеҙҙе ҡурсалай, әммә уны күреү һәм ҡосаҡлау мөмкин түгел", - тип яуап бирәм. Балаларыма күҙ йәшен күрһәтмәскә тырышам...

Үҙе бала кеүек кенә күренгән йәш әсәнең юғалтыу ҡайғыһы менән көрәшеүе - үҙе ҡаһарманлыҡ. Юғалтыу ҡайғыһы бер ҡасан да үтмәй. Әммә әсә кешенең балаларын аяҡҡа баҫтырыу, кеше итеү теләге көслө була бит ул. Шундай көстөң барлығын Махсус хәрби операцияла һәләк булған яугирҙың тол ҡатыны Эльвирала тойҙом...

**Рәфилә СИБӘҒӘТУЛЛИНА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



## КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Буҙ тумыртҡа**

**(Седой дятел)**



Күгәрсен ҙурлыҡ ҡына. Ҡәүҙәһенең төҫө - тоноҡ йәшел. Ҡойроғоноң өҫкө яғы йәшкелт-һары. Башы, муйыны, ҡорһағы көл төҫөндә, ата ҡоштоң маңлайы - ҡыҙыл, сикәһендә ҡара "мыйыҡ"тары бар, инә ҡошта ҡыҙыл төҫ юҡ. Йәш ҡоштар көрән, шулай уҡ "мыйыҡ"тары юҡ.

Ҡош туйы мәлендә ата ҡош "кью-кью-кью" йәки "кии-кии-кии" тип ныҡ ҡысҡырып, моңло итеп тауышлана.

Евразияның көньяғындағы урман зонаһынан алып Сахалинға тиклем йәшәй. Башҡортостанда йышыраҡ япраҡлы ағастар үҫкән, шулай уҡ ҡатнаш урмандарҙа, Урал алды шарттарында иһә туғайҙарҙа, һирәгерәк япраҡлы ағастар урманында көн итә. Тик ылыҫлы ағастарҙан торған урмандарҙы яратмай. Үҙенә йәшәү өсөн ҡулайлы булған бөтөн ерҙә лә осрай, тик шулай ҙа буҙ тумыртҡа төбәк өсөн һирәк осрай торған ҡош иҫәпләнә.

Өфө фән һәм технологиялар университетының зоология музейы өсөн 1963 йылда Шишмә районында (В.Г. Ершов), 1965 йылда Ғафури районында (биолог Ф.С. Үтәғәнов) буҙ тумыртҡа тотола. Тәүге автор буҙ турғайҙы 1966 йылдың 18 сентябрендә Нуриман районы Терекле ауылында күрә. Өфөлә иһә йыл һайын ҡышын ата ҡош профессор Б.М. Миркин фатиры тәҙрәһенә ҡуйылған тағараҡҡа сусҡа майы ашар өсөн осоп килә. Ошондай уҡ ҡыҙыҡлы ваҡиға Өфөнөң Ленин урамында ла теркәлгән. Икенсе автор уҡыу йортоноң Нуғай ҡасабаһында урынлашҡан студенттар базаһында ла йыл һайын буҙ тумыртҡаны осрата, иң аҙаҡҡы тапҡыр был 2008 йылда теркәлде.

Ата һәм инә ҡош ағас олонон ерҙән 3-5 метр бейеклектә соҡоп, оя яһай. Ата тумыртҡа йоморҡаларҙы - төнөн, инә ҡош көндөҙ баҫа. Ояла үҙҙәрен ныҡ шым тоталар һәм бәпкәләр сыҡҡансы тауышланмайҙар. Йәш ҡоштар иһә ояны ташлап китер алдынан 2-3 көн буйына туктауһыҙ ҡысҡыра.

Ҡар аҙ булған йылдарҙа, шулай уҡ яҙ-йәй-көҙ миҙгелдәрендә ҡырмыҫҡа менән туҡлана. Ҡышын серек ағас олонода ризыҡ таба. Йәй аҙағына йәш ҡоштар ояны ташлап китеп бөтә, оло ҡоштар иһә, ғәҙәттә, урынын ташламай. Ҡышын урындарын алыштырыуҙары ихтимал. Башҡа тумыртҡаларҙан айырмалы рәүештә, буҙ тумыртҡа ҡала, ауылдарға килеп, ағас йорттарҙы "тикшереп" йөрөй, кирбес йорттарҙың ҡыуышыраҡ урындарын да үҙ итә. 5 йәшкә тиклем йәшәүҙәре билдәле.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!




## УЯН ҺӘМ... йәшәй башла!

**1936 йылда Америка яҙыусыһы Дороти Бранд "Уян һәм йәшә" тигән китабында баш мейеһе өсөн бер нисә ҡыҙыҡлы күнегеү тәҡдим иткән. Улар кешене өйрәнгән мөхитенән сығарыу, икенсе төрлө перспективаларҙы, хатта икенсе төрлө ысынбарлыҡты күрһәтеү, ижади ҡараш талап ителгән ситуациялар тыуҙырыу өсөн тәғәйенләнгән.**

- Көнөнә 1 сәғәтте бер нәмә лә әйтмәйенсә генә, бирелгән һорауҙарға ҡыҫҡа ғына яуаптар бирергә уҙрағыҙ. Шул уҡ ваҡытта, әйләнә-тирәгеҙҙәге кешеләр һеҙҙе нимәләр үпкәләгән йәки кәйефе юҡ, шуға һөйләшмәй тип уйламаһын, үҙегеҙҙе тәбиғи тотоғоҙ. Бер кемгә лә бер ниндәй ҙә иҫкәртеү яһамағыҙ, һеҙҙән мәғлүмәт алырға тырышыусыларға ла иғтибар итмәгеҙ.
- Көн һайын 30 минут буйына бер предмет хаҡында уйлағыҙ, башҡа нәмәгә әүрәмәгеҙ. Килеп сыҡмаһа, күнегеүҙе 5 минуттан башларға була.
- 15 минут "мин, минә, минеке" тигән һүҙҙәр ҡулланмайынса һөйләшергә тырышығыҙ.
- Кешеләр менән тулған теләһә ниндәй бинаға инер алдынан тупһаһында туктап, уның ҙурлығын баһалағыҙ.
- Яңы танышығыҙ һеҙҙең менән аралашҡанда тик үҙе тураһында ғына һөйләһен, тик быны үҙе һиҙмәһен. Ул саҡ ҡына ситкә тайпыла икән, әңгәмәне кире үҙ юҫығына ҡайтарығыҙ.
- Маҡтанмайынса, зарланмайынса, әңгәмәсендә ялҡытмайынса тик үҙең тураһында ғына һөйләп ҡара.
- 2 сәғәткә план төҙө һәм уны теүәл үтә.
- Үҙенә 12 осраҡлы талап ҡуй, мәҫәлән, 20 саҡрымды йәйәү үтергә, 12 сәғәт ашамаҫҡа, төшкә ашты ғәҙәти булмаған урында ашарға, көнө буйы бер нәмә лә әйтмәҫкә, төнөн йоҡламаҫҡа, ә эшләргә, һ.б.
- Көн дауамында бөтөн тәҡдимдәргә ыңғай яуап бирергә.

**Яҙыусы билдәләүенсә, был күнегеүҙәр тәү ҡарашҡа ҡыҙыҡ, әммә файҙаһыҙ тойолһа ла, улар тормошоғоҙға төрлө яңы нәмәләр индерәсәк һәм үҙегеҙҙе яҡшыраҡ белергә ярҙам итәсәк.**



## 29 СЕНТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 Д/ф "Тело государственной важности. Подлинная история Красной королевы". К 90-летию со дня рождения Регины Збарской". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.20 Д/ф "Тело государственной важности. Подлинная история Красной королевы". [16+]
12.05 "Горячий лёд". Фигурное катание. Открытие сезона 2025-2026. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
13.00, 1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Улица Шекспира". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 15.30, 2.00, 3.30 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Атом". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном-8". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 21.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Башкорттар. [12+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Формула здоровья. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 О чем молчат Памятники. [12+]**
**22.00, 3.30 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**23.30 Х/ф "Девушка средних лет". [12+]**
**1.00 Спектакль "И судьба - не судьба". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 30 СЕНТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Улица Шекспира". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 15.30, 2.00, 3.30 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Атом". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном-8". [16+]**
**11.00 Специальный репортаж. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.00, 3.30 Подкаст. Интонации. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Елкән". [6+]**
**20.45 Квадратные метры. [12+]**
**21.00 Деловая среда. [12+]**
**22.00 Дустар. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Девушка средних лет". [12+]**
**1.30 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 1 ОКТЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Улица Шекспира". [16+]
0.00 Премьера. "Архитектура музыки". [12+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 15.30, 2.00, 3.30 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Атом". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.12 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Так не бывает". [16+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 "Экологично". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Д/ф "История одной любви. Альбина и Фанис Исхаковы". [12+]**
**17.00 Деловая среда. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Доступный Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Какого лешего?" [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" - "Сибирь" (Новосибирск). КХЛ.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2025". [12+]**
**0.00 Х/ф "Ивановы". [12+]**
**1.45 Спектакль "Земляки". [12+]**
**3.30 Защитники Отечества. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 2 ОКТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Улица Шекспира". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1 Башкортостан (Уфа)
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 15.30, 2.00, 3.30 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Атом". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.12 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Так не бывает". [16+]**
**11.00 Специальный репортаж. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.00 Башкортостан#вместе. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Креативный код. [12+]**
**21.00 Формула здоровья. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Остров исправления". [16+]**
**1.45 Спектакль "Караул, тещу украли!". [12+]**
**3.15 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 3 ОКТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.10, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.25 Д/ф Премьера. "Глазами Орсона Уэллса". [16+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 15.30 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
23.55 Истории Большой Страны. [12+]
0.55 Х/ф "Счастливый шанс". [12+]
4.18 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Так не бывает". [16+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Башкорт йыры-2025". [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дустар. [12+]**
**23.30 Х/ф "Находка". [16+]**
**1.15 Спектакль "Дальше тишина". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 4 ОКТЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Как любила я и как меня любили". К 100-летию со дня рождения Веры Васильевой". [12+]
11.05 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф Премьера. "Нет объяснения у чуда...". К 100-летию со дня рождения Марлена Хуциева". [12+]
13.05 Х/ф "Июльский дождь". [12+]
15.10 Х/ф "Весна на Заречной улице". [12+]
17.00 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 Премьера. Праздничный концерт ко Дню учителя. [12+]
23.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Наши. Военкоры. [12+]
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Мне нужна твоя жизнь". [16+]
0.45 Х/ф "Лучшая подруга". [12+]
4.09 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 Хазина. [6+]**
**9.00 "Сәләм представляет..." [12+]**
**9.15 Своих не бросаем. [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 "Читаем с Грамотейкой". [6+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Курсак". [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30 "Ете егет". [12+]**
**13.30 Башкорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.15 Ломая барьеры. [12+]**
**18.00 Деловая среда. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15, 4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байык-2025". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башкорт йыры-2025". [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Х/ф "Фиктивный брак". [16+]**
**2.00 Спектакль "Любишь - не любишь?". [12+]**
**4.15 Письма солдатам. [12+]**
**5.15 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**6.00 Тайм-аут. [12+]**

## 5 ОКТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 Д/ф Премьера. "Жизнь не по сценарию...". К 90-летию со дня рождения Армена Джигарханяна". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "Есенин". К 130-летию со дня рождения поэта". [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Премьера. Театрализованный концерт, посвященный 130-летию Сергея Есенина. [0+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера. "Опасная близость". [18+]
0.00 "ArtMasters". Церемония награждения в Большом театре. [12+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.20, 1.30 Х/ф "Работа над ошибками". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 Наши. Военкоры. [12+]
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Парад юмора. [16+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 Күстәнәс. [12+]**
**8.45 Доступный Башкортостан. [12+]**
**9.00 "Мама". [12+]**
**9.15, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45 "Читаем с Грамотейкой". [6+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Беседка". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [6+]**
**12.00 "Атайсал. Бәҙҙекеләр! Знай наших!" [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Креативный код. [12+]**
**13.45 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**14.00 Дорога к храму. [6+]**
**14.30 Формула здоровья. [12+]**
**14.45 Честно говоря. [12+]**
**15.30 Патриот РФ. [12+]**
**15.45 Квадратные метры. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" - ХК "Сочи" (Сочи). КХЛ.**
**19.00 "Елкән". [6+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Симфония "ЗОВ". [12+]**
**0.00 Х/ф "Грешник". [16+]**
**1.45 Спектакль "Дорогая Памелла". [12+]**
**4.15 Әлләсе... [12+]**
**5.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һиҗри йыл.*

| Сентябрь - Октябрь (Рәбиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 29 (7) дүшәмбе | 5:29 | 7:15 | 13:30 | 16:58 | 18:57 | 20:43 |
| 30 (8) шишәмбе | 5:31 | 7:17 | 13:30 | 16:56 | 18:55 | 20:40 |
| 1 (9) шаршамбы | 5:33 | 7:18 | 13:30 | 16:54 | 18:52 | 20:37 |
| 2 (10) кесе йома | 5:35 | 7:20 | 13:30 | 16:52 | 18:50 | 20:34 |
| 3 (11) йома | 5:37 | 7:22 | 13:30 | 16:49 | 18:47 | 20:32 |
| 4 (12) шәмбе | 5:40 | 7:24 | 13:30 | 16:47 | 18:45 | 20:29 |
| 5 (13) йәкшәмбе | 5:42 | 7:26 | 13:30 | 16:45 | 18:42 | 20:26 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

✓ *Рәсәйҙә туризм өлкәһе һуңғы йылдарҙа бигерәк тә әүҙем үҫешә, был тенденциянан Башҡортостан да ситтә ҡалмай. Республикабыҙға быйыл 1,2 миллиондан ашыу турист килгән.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 27 СЕНТЯБРЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ ТУРИЗМ КӨНӨ

**Был иҫтәлекле көн 1979 йылда Бөтә донъя туристик ойошманың Генераль ассамблеяһы тарафынан булдырылған.**



Ни өсөн нәҡ 27 сентябрме? Сөнки 1970 йылда тап ошо көндә Бөтә донъя туристик ойошманың Уставы ҡабул ителгән.

Байрам туризмға йәлеп итеү, донъя иҡтисадына индергән өлөшөн күрһәтеү, төрлө илдәр халыҡтары араһында бәйләнештәрҙе нығытыу өсөн билдәләнә.

Рәсәйҙә туризм өлкәһе һуңғы йылдарҙа бигерәк тә әүҙем үҫешә, был тенденциянан Башҡортостан да ситтә ҡалмай. Республикабыҙға быйыл 1,2 миллиондан ашыу турист килгән.

Сираттағы башватҡыста һеҙгә Башҡортостандағы популяр тәбиғәт урындарын табырға тәҡдим итәбеҙ.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**37-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Нәзәкәт. Кәүҙәләнеш. Әбей. Йәмғиәт. Мәхшәр. Бабичева. Сари. Милләтсе. Редактор. Шовинист. Шикәйәт. Тараҡан. Нимб. Йосопов. Рушанна. НЛО. Ҡояш. Илбаҫар. Уҫаҡ. Ябаға. Кандидат. Тояҡ. Молл. Лепкә. Араҡы. Тәкә. Театр. Нәшә. Фронтовик. Стена. Опто.

**Вертикаль буйынса:** Емеш. Амортизатор. Көндәш. Яла. Әүлиә. Аласуҡ. Әлбә. Кинйә. Лавр. Ҡамыт. Әрнеш. Евфрат. Нәҙерғолов. Булат. Рената. Әпсен. Әкәмәт. Алтын. Осло. Кәләш. Шыйҙа. Тайтояҡ. Кино. Оҙон. Сакля. Чукча. Шәриғәт. Ҡапҡан. Лиана. Айран. Вето. Түрә.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

*М.Горький исемендәге Ырымбур өлкә драма театры гастролдәре:*

**26 сентябрь "Укрощение строптивой"** (У. Шекспир, Р. Исрафилов), комедия. 12+

**27 сентябрь "Служебный роман"** (Э. Брагинский, Э.Рязанов, Р. Исрафилов), комедия. 12+

**28 сентябрь "Судьба человека"** (М. Шолохов, А. Федоров), драма. 12+

**1 октябрь "Ваня ағай"** (А.Чехов, С.Пектеев). 16+

**2 октябрь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова, А. Абушахманов), мелодрама. 16+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**26 сентябрь "Гарнир по-французски"** (М. Камолетти, А. Шрайнер), комедия. 16+

**27 сентябрь "Играем Пушкина: Царевна-Лебедь"** (А. Пушкин, О. Мусина), әкиәт.12:00. 6+

**27 сентябрь "Дни Савелия"** (Г. Служитель, М. Күлбаев). 18:00. 12+

**28 сентябрь "Сказание о семи батырах"** (Д.Йосопов, Р.Хакимов), фэнтези. 12:00. 6+

**28 сентябрь "Аҡһаҡ"** (М. Ғиләзов, Ф. Ғәрипов), драма. 12+

**30 сентябрь "Пеппи длинныйчулок"** (А. Линдгрен, О. Пронин). 11:00. 0+

**30 сентябрь "Поджигатель"** (Г. Горин, М. Күлбаев), трагикомедия. 16+

**1 октябрь "Чиполлино"** (Д. Родари, Р. Хәкимов), мажаралар. 11:00. 6+

**1 октябрь "Седина в бороду или невеста из Имеретии..."** (Б. Рацер, В. Константинов, М. Күлбаев), музыкаль комедия. 12+

**2 октябрь "Сказание о семи батырах"** (Д.Йосопов, Р.Хакимов), фэнтези. 11:00. 6+

**2 октябрь "Дейеүкәй"** (С. Лебо, А. Абушахманов). 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Халыҡ-ара ҡурсаҡ театрҙары фестивале сиктәрендә тамашалар:*

**26 сентябрь "Похождения жука-носорога"** (К. Паустовский). Ырымбур өлкә ҡарсаҡ театры. 10:00 һәм 12:00. 6+

**26 сентябрь "Караван-сарай"** (И. Лукманова, Д.Юлдашева), Үзбәк милли ҡарсаҡ театры. 11:00 һәм 15:00. 6+

**27 сентябрь "Я родился завтра"** (Р. Мусаев), Яр Саллы дәүләт ҡурсаҡ театры. 15:00 һәм 19:00. 12+

**27 сентябрь "Әсә яланы"** (С. Айтматов), "Әкиәт" Татар дәүләт академия ҡурсаҡ театры. 18:00. 12+

**28 сентябрь "Песни небесной птицы"** (З. Долгова), Марий Эл республика ҡурсаҡ театры. 12:00 һәм 15:00. 12+

**28 сентябрь "Ленинградка"** (Б. Константинов), С.В. Образцов исемендәге дәүләт академия ҡурсаҡ театры. 18:00. 12+

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26 сентябрь** XIX Халыҡ-ара **"SAUERFEST"** орган фестивален асыу. Штефан Кисслинг (Германия) концерты. 12+

**1 октябрь 87-се концерт миҙгелен асыу.** Башҡортостан Республикаһы Халыҡ инструменттары милли оркестры концерты. 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**2 октябрь "Зәйтүнә"** (С.Сурина), драма. 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**28 сентябрь "Путешествие в тайную комнату".** Музыкаль-әҙәби лекторий. 0+

**1 октябрь "Листопад волшебных звуков".** Классик музыка кисәһе. 6+

**2 октябрь "Любимые песни о главном".** XXXV концерт миҙгелен асыу. 6+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**1 октябрь "Әстәғәфриулла!"** (Н.Ғәйетбай), комедия. 16+

### БР Милли музейы

**30 сентябрь "Башҡортостандың таш кәшәнәләре".** Башҡорттар тарихын һәм этнографияһын өйрәнгән ғалим-этнограф В.В. Вильяминова-Зернованың тыуыуына 185 йыл тулыу айҡанлы экскурсия. 15:00. 12+

✓ *Сибай тамашасылары менән шул тиклем ҡәнәғәтбеҙ, беҙҙе аңлап, һөйөп, рәхмәтле булып ҡарай беләләр. Ундайҙар башҡа яҡта юҡ! Был буш һүҙ түгел, гастролгә килгән башҡа театрҙар ҙа шул фекерҙә.*



*МӘҘӘНИ МАЙҘАН*

# НИСӘ ЙӘШ? 95 КЕНӘ!

**Театрҙар ҡартаямы икән? Юҡтыр. Олпатланалыр, абруйланалыр, нығыналыр - тағы әллә күпме ланалыр, йәшәрмәһә лә, заман талабына, замана тамашаһыһы ихтыяжына тап килтереп йәшәйҙер. Республикабыҙҙа икенсе профессиональ театр булып Стәрлетамаҡ ҡалаһында тәү башлап донъяға ауаз һалған Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры быйыл 95-се ижади миҙгелен аса. Бер быуатҡа яҡын тарихы булған дәүләт ойошмаһы үҙен нисек тоя, тын алышы нисек? Театрҙың тамашасыларҙы ойоштороу буйынса директор урындаҫары Айгөл Альберт ҡыҙы ҒӘЙНУЛЛИНАға ошо һәм башҡа һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек:**



- 2025 йыл - Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығын билдәләү йылы. Был мөһим тарихи ваҡиға театрыбыҙҙың 95-се ижади миҙгелен асыуға тура килә. Билдәле драматург Хәмит Ирғәлиндың әҫәре буйынса театрыбыҙҙың баш режиссеры Денис Нурғәлин сәхнәләштергән "Ҡанатлы генерал" спектакле Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы ваҡиғалар, сығышы менән Әбйәлил районы Күсем ауылынан булған Советтар Союзы Геройы, генерал-майор Таһир Күсимов тураһында. Был уникаль тамашала артистарыбыҙҙың тулы составы ҡатнаша. Кешеләргә тыуған яғыбыҙҙың тарихын, арҙаҡлы шәхестәрен белеү бик мөһим. Әгәр беҙ йәшәгән урам ул кешенең исемен йөрөтә икән, мәктәпкә билдәле шәхестең исеме бирелһә, беҙ уның кем икәнлеген киләһе быуынға аңлатып, тарихын һөйләп, күрһәтеп тапшырырға тейешбеҙ. Мәҫәлән, район үҙәге Асҡарҙағы гимназия Таһир Күсимов исемен йөрөтә, был генералдың тормош юлын гимназистар ғына белергә тейеш, тигәнде аңлатмай, уны башҡа милләттәштәребеҙ ҙә белергә тейеш. Тәү сиратта был турала мәғариф учреждениелары - мәктәптәр, колледждар, институт уҡытыусылары ҡыҙыҡһынырға тейеш, сөнки замана йәштәре йылдан-йыл тарихыбыҙҙан ситләшә бара. Әгәр театрҙар ҙа ҙур тәрбиәүи көскә эйә булған был ҡиммәттәрҙән ситләшһә, тарих хәтер булыуҙан туҡтаясаҡ, йәшәгән урамыңдын исемен белеп тә, арҙаҡлы шәхестең биографияһын белмәү ғәфү итмәҫлек хата. Шуға күрә беҙ театрыбыҙҙың ижади потенциалын ҡулланып, йәштәргә аңлайышлы, ҡыҙыҡлы итеп, Бөйөк Ватан һуғышы тураһындағы ошо тамашаны әҙерләнек. Тамашасыларҙы ойоштороу буйынса директор урынбаҫары булараҡ, сибайҙарға, ғөмүмән, театрыбыҙҙы белгән, спектаклдәребеҙгә йыш йөрөгән яратҡан тамашасыларыбыҙға мөрәжәғәт итәм: милли батырыбыҙ кимәлендәге шәхес тураһында ишетеп белеү генә аҙ, спектаклде килеп ҡарағыҙ, мәғлүмәтте башҡаларға ла таратығыҙ.

Тамашасыларыбыҙҙың теләктәрен иҫәпкә алып, быйылғы миҙгелдә комедия жанрындағы бер юлы ике спектакль әҙерләнә, сөнки бөгөнгө көндә еңел булмаған төрлө ҡатмарлы ситуациялар ҡоршауында йәшәйбеҙ, кешеләр йылмайыу-көлөүҙең ни икәнен онотмаҫҡа тейеш. Ижади миҙгелде асыу көнөндә Наил Ғәйетбайҙың "Әстәғәфирулла" исемле пьесаһы буйынса саҡырылған режиссер Рөстәм Хакимов сәхнәләштергән комедия ҡуйыласаҡ. Театрыбыҙҙың баш режиссеры Денис Нурғәлин Туфан Миңнуллиндың "Алты ҡыҙға бер кейәү" әҫәре буйынса комедия әҙерләй. Был сәхнә әҫәрҙәрен яратҡан тамашасыларыбыҙ ихлас ҡабул итер, тип ышанабыҙ.

Әйткәндәй, беҙ Сибай тамашасылары менән шул тиклем ҡәнәғәтбеҙ, беҙҙе аңлап, һөйөп, рәхмәтле булып ҡарай беләләр. Ундайҙар башҡа яҡта юҡ! Был буш һүҙ түгел, гастролгә килгән башҡа театрҙар ҙа шул фекерҙә. Беҙгә тоғро таяныс булғандары, бер спектаклде лә ҡалдырмай ҡарағандары өсөн ҙур рәхмәт уларға!

Пушкин карталары проекты буйынса йәштәрҙе театрға ылыҡтырыу буйынса ла күп эшләнә. Мәҫәлән, "Ҡанатлы генерал" спектаклен өлкән класс уҡыусылары, колледж, институт студенттары өсөн махсус күрһәтергә йыйынабыҙ.

Яңы йыл байрамдары ла оҙаҡ көттөрмәй килеп етәсәк, балаларҙы шатландырыу өсөн әҙерлек бөгөндән үк бара. Ҡыҫҡаһы, театр гөрләй, үҙенең изге миссияһын онотмай. Артистарҙың бер төркөмө республикабыҙ районлары буйлап сәфәргә сыға, икенсеһе театр сәхнәһендә уйнауын дауам итә. Бөтә был эштәр театр бинаһында ремонт барыу менән бер рәттән эшләнә. Киләһе йыл башында күптәнге йола буйынса артистарыбыҙ Учалы тарафтарына юлланасаҡ. Ғөмүмән, милләттәштәребеҙ күпләп йәшәгән ҡалаларҙа сығыш яһау, эргә-тирәләге ауылдарына барыу бик уңай. Мәҫәлән, "Ҡанатлы генерал"ды Стәрлетамаҡҡа алып барғанда ҡалаға яҡын ауылдарҙа ла күрһәтәсәкбеҙ. Әйткәндәй, Стәрле ҡалаһы пьесаның авторы, ҡыҙғанысҡа, күптән түгел вафат булған Хәмит Ирғәлиндың тыуған яғы. Ул спектаклде Стәрлетамаҡ тамашасыһына күрһәтергә ныҡ хыяллана ине. Беҙ уның теләген онотмайбыҙ, матур гастролдәр ойошторорға иҫәпләйбеҙ.

"Берҙәм Рәсәй" партияһының "Бәләкәй ҡалалар театрҙары" проекты буйынса сәхнәгә сыҡҡан был спектакль театр декадниғы мәлендә Өфө тамашасыларына ла күрһәтеләсәк.

Әлбиттә, бөтөнләй көтөлмәгән төрлө жанрҙағы спектаклдәр тыуасаҡ. Йылына беҙ шундай ете тамаша әҙерләйбеҙ, төрлө йәштәге, төрлө ихтыяжлы тамашасыларыбыҙҙы ҡыуандырабыҙ. Махсус операцияла ҡатнашҡандарҙың ғаилә ағзаларына билеттар бушлай, күмәк балалы ғаиләнең бәләкәстеренә 50 процент ташлама яһала. Башҡа төрлө ташламалар, төрлө акциялар үткәрәбеҙ. Хәҙер бит мәғлүмәттәр үтә күренмәле, театр сайты аша ҡарап, белеп-күреп барырға була. Премьераларҙан һуң комментарийҙарҙа үҙ фекерҙәрегеҙҙе белдерһәгеҙ, шат булырбыҙ. Быйылғы миҙгелде асыу көнө Ололар көнөнә тура килә, төрлө ойошмалар коллектив заявка биреп, өлкән йәштәге коллегаларына матур бүләк эшләй ала. Бөтәгеҙҙе лә 95-се Ижади миҙгелде асыу тантанаһына көтәбеҙ. Бергә булайыҡ!

**Радик ӨМӨТҠУЖИН,**
**театрҙың әҙәби-драматургия бүлеге етәксеһе.**

*АФАРИН!*

## "ӘЙ ЙОЛА" ТӨРКӨМӨ ТУРҒА СЫҒА



**"Интервидение-2025" халыҡ-ара йыр конкурсында уңышлы сығыш яһаған "Әй Йола" төркөмө Рәсәй ҡалалары буйлап ҙур турға сыға. Төркөм "Европа плюс", "Русское радио", "Энерджи", "Лайк ФМ" кеүек федераль радиостанциялар эфирында "Китап" нәшриәтендә донъя күргән "Урал батыр" китабын уйната. Китапта төркөм музыканттарының автографтары ла була.**

10 октябрҙән 5 декабргә тиклем төркөм Рәсәйҙең 22 ҡалаһында сығыш яһай. Музыканттарҙы Силәбе, Омск, Новосибирск, Красноярск, Санкт-Петербург, Архангельск, Калининград, Воронеж, Һарытау, Волгоград, Дондағы Ростов, Краснодар, Мәскәү, Түбәнге Новгород, Ҡаҙан, Һамар, Ырымбур, Ижевск, Пермь, Екатеринбург, Төмән ҡалаларында көтәләр. Яҡташтарыбыҙ сәйәхәтен Өфөлә тамамлай.

Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, республикаға, айырыуса "Һомай" йырына клип төшөрөлгән урындарға ҡыҙыҡһыныу - өс тапҡырға тиерлек, ә башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосын һатыу 30 тапҡырға артҡан. "Был беҙҙе яңы ижадҡа илһамландыра. Тиҙҙән тулыһынса "Урал батыр" эпосына нигеҙләнгән альбом сығарабыҙ", - ти "Әй Йола" төркөмө солисы, Башҡортостандың халыҡ артисы Ринат Рамаҙанов.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәтҡә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## КҮРӘҺЕҢ БУЛҺА...

## тигеҙ ерҙә абынырһың

Ерәнә күрә ҡоланы, һыуына күрә йыланы, ҡыҙына күрә кейәүе, өйөнә күрә иләге.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тәбиғәттә изгелек тә, яуызлыҡ та юҡ, улар бары кешенең ихтыяжынан килеп сыға.

**(Бенедикт Спиноза).**

Кем ул дуҫ? Ихлас һөйләшеп була һәм уның алдында ҡысҡырып уйлай ала торған кеше.

**(Ральф Эмерсон).**

Ысын мөхәббәт алтындан һәм балсыҡтан шуныһы менән айырыла: бүлгәндә лә ул кәмемәй һәм бәләкәсәймәй.

**(Шелли).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше яңылыштан ғына икенсе бер кешегә зыян эшләй. Күрелгән ҡаза әллә ни ҙур булмай, ләкин зыян күреүсе был хәлде ғәфү итергә теләмәй, киреһенсә, юғалтҡандан күберәк файҙа алырға теләп, зарар итеүсегә "Минең зыянды ҡапла!" тип мөрәжәғәт итә.**

**- Зыянды ҡаплай алмайым шул, - тип яуаплай кеше, - ғаиләм ҙур, һиңә түләрлек бер байлығым да юҡ...**

**- Улайһа, суд түләтер! - тип янай ҙа, зыян күреүсе судьяға китә.**

**Судья уларҙың икеһен дә үҙенә саҡыра, икеһен дә иғтибар менән тыңлай һәм зыян күреүсенең, нәфсеһенә баш була алмайынса, зыянды ҡапларға түгел, ә байырға теләүҙән тейешенән күберәк хаҡ талап итеүен аңлай. Шунан ул был ҡомһоҙ кешегә былай ти:**

**- Һин зыян итеүсегә лә, миңә лә ваҡытты алғаның өсөн түләргә тейешһең...**

**- Улай булырға тейеш түгел, - тип туҙынып китә зыян күреүсе. - Мин зыян күрҙем һәм миңә зыянды ҡапларға тейештәр. Һин законды боҙаһың һәм мин һине лә аҡылға ултыртасаҡмын...**

**Шулай ул ғәҙеллек эҙләп, донъя ҡыҙырып сығып китә. Ләкин эҙләгәнен таба алмай, бар ерҙә үҙенең дәғүәләрен ҡабатлай һәм уны бар ерҙән ҡыуалар. Аҙаҡҡы мәлдә ул Хоҙайға мөрәжәғәт итә. Хоҙай уны тыңлап та тормай шулай ти:**

**- Мин барыһын да беләм. Ҡомһоҙлоҡ аҡылыңды яуламаған булһа, һин ғәҙеллек таба алыр инең. Әммә ҡомһоҙлоғоң алдан йөрөгәс, һиңә ғәҙеллек кәрәкмәй...**

**Зыян күреүсе Алланың һүҙҙәрен аңламай, ә өйөнә ҡайтып еткәндә ул, ғөмүмән, аңлауҙан туҡтаған була, сөнки ул аҡылынан яҙа. Шулай ул үҙенең ни теләгәнен дә белмәй ҡаңғырып йәшәп ята..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

1 582218 911006 25038

Баш мөхәррир: **Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 25.09.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 25.09.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 26.09.2025 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2707
Заказ - 1800